ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

5-11 март (буранай)

2016

№ 10 (688)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Алмағастар сәскә атҡан саҡта...



6-7

Беҙ - Аллаһ хозурында,



тик үҙебеҙ генә Уны күрмәйбеҙ 8-9

Инә ҡорт көслө булһа,

умарта көслө була



11

Һай, башҡортомдоң йолалары!



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм ҡатын-ҡыҙҙар! Байрам менән! Ҡатын-ҡыҙ тормошондағы иң оло вазифаға - Әсәлек, Өләсәйлек бәхетенә өлгәшеп, ғаилә нигеҙен мөхәббәткә, татыулыҡҡа, яҡтылыҡҡа, аңлашыуға, етешлеккә ҡороп, хеҙмәт урынында ла уңыш, хөрмәт ҡаҙанып, Сәләмәтлек ғәли йәнәптәре менән ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәргә насип итһен Хоҙай, тип теләйбеҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғаиләлә атай - баш, ләкин был әсәйҙең дәрәжәһен кәметмәй, киреһенсә, күп нәмә тап уның абруйына бәйле, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Ришат САБИТОВ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәтенең Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы етәксеһе урынбаҫары:*** Минең әсәйем Фәрзәнә Исрафил ҡыҙы ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләне. Хәҙер аңлауымса, уҡытыусылыҡ уның тәғәйенләнеше, тормоштағы төп урыны булған, сөнки мәктәптә генә түгел, ауылда йә башҡа урында ла тап уның ошо уҡытыусылыҡ сифаттары өҫтөнлөк итте: һәр кемгә өлгө була алыуы, иғтибарлылығы, ярҙамсыллығы менән. Мәскәүҙең В.И. Ленин исемендәге педагогия институтын тамамлап, алдынғы методика буйынса эшләгән юғары категориялы рус теле уҡытыусыһы булыуына ҡарамаҫтан, әсәйемдең белемгә, яңылыҡҡа ынтылышы бер ваҡытта ла һүнмәне.

Уның ошо тормош ҡағиҙәләре беҙгә, үҙ балаларына ғына түгел, уҡыусыларына ла күскән. Бөрйән районы Байғаҙы мәктәбен тамамлап, артабан уҡып, төрлө һөнәрҙәр алып эшләп йөрөгән уҡыусылары әсәйемә килеп рәхмәттәрен әйтеп китер ине. Ауылдаштары алдында ниндәй генә ҙур абруй менән файҙаланмаһын, мәктәп эше, ғаилә, йорт-хужалыҡ мәшәҡәттәре нисек кенә тығыҙ, көсөргәнешле булмаһын, әсәйебеҙ хәстәрлекле, сабыр, кеселекле ҡатын да була белде, халҡыбыҙ йолаһындағыса, ир хаҡын һанлап, ололап, ихтирамлап, беҙҙең алда атайыбыҙ дәрәжәһен, уның абруйын күтәрергә тырышып торор, атай тәрбиәһен беренсе урынға ҡуйыр ине. Өйөбөҙҙән һәр саҡ йылылыҡ, нур бөркөлөүе, йыйнаҡ, таҙа булыуы ныҡ хәтеремдә.

Ул йылдарҙа бурыстары ла, яуаплылығы ла күберәк булған ауыл Советы рәйесе вазифаһында эшләүсе атайыбыҙ ҙа беҙҙең тәрбиәгә күп көс, хәстәрлек һалды. Атайҙарса, ир-егеттәрсә. Ҡайһы берҙә шуҡлыҡтарыбыҙ өсөн ныҡ ҡына эләгә, әрләнеп тә алабыҙ, ләкин әсәй йылылығы, уның беҙҙе һүҙһеҙ ҙә аңлап тороуы, ғаилә өсөн ышаныслы тыл булдыра алыуы бары тик әсәйҙәр ҡулынан ғына килә торған мөғжизәләр, тигән фекергә киләм йәшәй-йәшәй.

***Хәләф ИШМОРАТОВ, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты:*** Беҙҙең башҡорт ғаиләләрендә, әлбиттә, атайҙарҙың төп хужа булыуына ишаралап, әсәйҙәрҙең аҙым һайын ошо ҡағиҙәне раҫлап, "Атайың ни әйтер?", "Атайың белеп ҡалһа...", "Атайыңдан рөхсәт ал" тип иҫкәртеп тороуы ғәҙәти күренеш. Әммә беҙҙең ҡанға һеңгән был ҡағиҙә әсәйҙәрҙең дәрәжәһен кәметмәй. Уларҙың башҡа берәү ҙә биләй, алыштыра алмай торған үҙ урыны бар. Тарихҡа күҙ һалғанда ла, бөйөк шәхестәр ҙә хатта иң яҡшы сифаттарын әсәйҙәрҙән алған, тигән хәҡиҡәт менән осрашабыҙ бит. Ошо миҫал үҙе генә лә кешенең шәхес булып формалашыуында әсәй тәрбиәһенең төп нигеҙҙе тәшкил итеүе, уның ҡеүәтле көс икәне тураһында һөйләй. Быны үҙ сығанаҡтары бар, әлбиттә. Сабый ҡарында яралғас та туғыҙ ай буйына әсәһенең йөрәк тибешен ишетеп ята. Яҡты донъяға тыуғас та ул әсә йылыһынан айырылмай әле: күкрәк һөтөн имгәндә лә әсәйҙең йөрәк тибешен тыңлай. Артабан, үҫеп, әҙәм булғас та тормош юлында кешене әсәһенең йөрәк тибеше оҙатып йөрөй һымаҡ. Ғүмерҙең төрлө мәлдәрендә һине аңлаусы, яҡлаусы, ҡурсалаусы әсәй бит. Атайым менән әсәйем икеһе бер төптән тырышып донъя көттө, беҙгә, туғыҙ балаға, матур тәрбиә бирҙеләр, бөтәбеҙгә лә белем алып, һөнәрле булырға ярҙам иттеләр. Үҙҙәренең бала саҡтары ауыр замандарға тап килгәнгәме, әллә күңелдәре йомшаҡ булғанғамы - икеһе лә шул тиклем бала йәнлеләр ине: ҡағып-һуғыу түгел, беҙгә ҡаты өндәшеп, тауыш күтәргәндәрен дә хәтерләмәйем. Күрәһең, үҙ абруйҙары, эшһөйәрлек өлгөләре менән тәрбиәләү булғандыр бар маҡсаттары. Һәм, ысынлап та, атайыбыҙ йыш ҡына беҙҙе эргәһенә йыйып алып, фронтта кисергәндәрен һөйләй башлаһа, тын да алмай тыңлай инек. Әсәйебеҙ Заһира Солтангәрәй ҡыҙы ла 12 йәшендә генә атай-әсәйһеҙ ҡалып, етемлек һәм һуғыш әселәрен татыған кеше булараҡ, һәр балаһына ла яҡты яҙмыш юрап, бәхетле булыуыбыҙҙы, ә уның өсөн тырышып уҡыу, белемгә ынтылыу кәрәклеген аңыбыҙға һеңдерә белде. Әсәй аҡылы, уның беҙ бала саҡтан ишетеп үҫкән һүҙҙәре, әйткән мәҡәл-ишаралары йәшәй-йәшәй ғүмер үрҙәрен артылғанда ҡат-ҡат иҫкә төшөп, хатта бөгөнгә тиклем дә тормоштоң ҡайһы бер ҡатмарлыҡтарын аңларға ярҙам итә...

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!



Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы бәйгеһе еңеүсеһе Сәриә Рәхмәтуллина.

# БАШ ҠАЛА УҠЫТЫУСЫЛАРЫ...

## бәйге тотто

**Уҡыу энә менән ҡойо ҡаҙыу булһа, уҡытыуҙың иһә ниндәй ауыр хеҙмәт икәнен күҙ алдына ла килтереп булмай. Шулай ҙа баш ҡалабыҙҙа һәм республикабыҙҙа үҙҙәренең һөнәри оҫталығын юғары кимәлдә күрһәткән уҡытыусылар һаны йылдан-йыл арта ғына бара. Әле күптән түгел 19-сы тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы", 12-се тапҡыр үткәрелгән "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурстарына, "Йөрәгемде балаларға бирәм" тип аталған өҫтәмә белем биреүсе педагогтар араһындағы ярышҡа йомғаҡ яһалды. Фиҙаҡәр педагогтарҙы БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова, БР Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры Азат Ибраһимов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов һәм башҡа саҡырылған ҡунаҡтар тәбрикләне.**

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ғаиләлә атай - баш, ләкин был әсәйҙең дәрәжәһен кәметмәй, киреһенсә, күп нәмә тап уның абруйына бәйле, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

*Салауат ӘБҮЗӘРОВ, шағир, журналист:* Атайыбыҙ 35 йәшендә был фани донъя менән бәхилләште. Әсәй менән беҙ 5 бала (4 малай, 1 ҡыҙ) тороп ҡалдыҡ. Мәктәптә уҡып йөрөгән һәм итәктән төшөп өлгөрмәгән балаларын әсәйебеҙ бер үҙе нисек аяҡҡа баҫтыра алды икән, тип аптырайым хәҙер. Мосолман ҡатын-ҡыҙҙарында ғына була торған сабыр холҡо, әҙәплелеге, кешеләргә яҡты йөҙө арҡаһында ул ауылда ихтирам иткәндәр. Бер ваҡытта ла уның кешеләр менән тәмһеҙләшкәнен ишеткәнебеҙ булманы, ауыл халҡы һәр саҡ ихтирам итте үҙен. Малай саҡтың шуҡлығы менән тәртип боҙоп ташлаһаҡ та, ул беҙҙе битәрләп тауыш күтәрмәне.

Хәтерҙә, ауылдың яңғыҙ ҡалған оло инәйҙәре гел беҙгә килә торғайны. Әсәйебеҙ уларҙы сәй менән һыйлай, эше муйындан булһа ла, уларҙың күңел бушатҡанын сабыр ғына тыңлай. Ауылда кешенән ныҡ ҡурҡҡан "диуанараҡ" бер апай йәшәне. Ул беҙгә бик йыш килеп, күңеленә йыуаныс-дауа табыр ине. Хәйер, түшәктә ятҡан яңғыҙ инәйҙәрҙе ҡарарға ла йөрөнө әсәйебеҙ. Уларҙы икмәк-һөттән өҙмәне.

Яңғыҙы биш бала ҡараған ҡатындың ирле-атайлы ғаиләләрҙән һис ҡалышмай донъя көтөүенә һөҡланыусылар ҙа, көнләшеүселәр ҙә булды, әлбиттә. Ғәйбәт таратыусылар ҙа табылды. Ләкин Аллаһы Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә ышанып, иманда булған, ураҙаларын ҡалдырмаған әсәйебеҙҙең быға иҫе китмәне. Исеме лә Мәрйәм бит уның!

Беҙ, әсәйемдең улдары - буласаҡ ил һалдаттары, бер-бер артлы бөтәбеҙ ҙә армия сафында хеҙмәт итеп ҡайттыҡ. Һәр беребеҙ тормошта үҙ юлын тапты. Ләкин һеңлебеҙ генә йәшләй вафат булып ҡалды. Бер бөртөк ҡыҙын юғалтыу ҡайғыһын ауыр кисерһә лә, бөгөлөп төшмәне, хәсрәт утын эсенә йомдо әсәй. Яңғыҙына ир балалар тәрбиәләүе еңел булмағандыр, тип уйлайым хәҙер. Ир балаға атай һүҙе, ир ныҡлығы ла бик кәрәк бит, ләкин, шөкөр, беребеҙ ҙә ебегән, былҡым булып үҫмәнек, сөнки әсәйебеҙ беҙгә әсәй ҙә, кәрәк саҡта атай ҙа була белде. Атайҙар әсәйҙе алыштыра алмы икән - мин әйтә алмайым, ә бына әсәйем миҫалында әсәйҙәр ҡулынан килмәгән бер эш тә юҡ, тип раҫлай алам! Һәр кемгә үҙ әсәһе яҡын, ҡәҙерле, ләкин беҙҙең башҡорт халҡында уларҙың айырыуса изге һәм фиҙаҡәр йөрәкле булыуына иманым камил. Шулай булмаһа, әйтегеҙ әле: әсәй хаҡында шиғыр яҙмаған шағирҙы, йыр-көйҙәр ижад итмәгән композиторҙы беләһегеҙме һеҙ? Өҫ йыр йә шиғырҙың икәүһе - әсәйҙәр хаҡында! Бына шундай данлау һәм рәхмәттәргә кем лайыҡ беҙҙә тағы?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

УҠЫЙБЫҘ...

# РӘМИҺЕҘ ТОРА АЛМАҺЫНДАР

**Совет заманының матур бер йолаһы бар ине: иртәнге почта менән танышыу, яңы килгән гәзит-журналдарға күҙ йүгертеп сығыу, ә инде эштән ҡайтҡас, уларҙы ентекләп уҡыу. Ғөмүмән, ул саҡтарҙа матбуғат баҫмалары алдырмаған ғаилә бик һирәк булғандыр. Тағы шуныһын әйт әле: почта хеҙмәтенең өлгөрлөгө! Көнөнә ике тапҡыр гәзит-журнал таратып сығырҙар ине.**



Шул замандарҙан бирле иртән уҡ матбуғат баҫмалары яҙғандар менән танышыу ғәҙәткә һеңеп ҡалған, бер көн генә гәзит уҡымаһаң да, бит йыумағандай тояһың үҙеңде. Дөрөҫ, бөгөн күптәр, айырыуса йәш быуын, яңылыҡтарҙы интернеттан ғына ҡарай, гәзит алдырып уҡыусылар һирәк. Шул уҡ ваҡытта гәзит-журналдың үҙенә генә хас "тәме" һәм йәме, кинәнесе, яңылыҡ-мәғлүмәти хәбәрҙәрҙән тыш, башҡа төр ҡыҙыҡлы мәҡәләләре барлығын да улар, тимәк, белмәй ҙә, тоймай ҙа.

Шөкөр, мин әле лә иҫке ғәҙәтемә тоғро: почта килеүенә ҡарап, иң тәүҙә үҙебеҙҙең "Киске Өфө"нө, "Башҡортостан" менән "Йәшлек"те уҡыйым, килгән көндәре булһа, "Ағиҙел" менән "Ватандаш"ҡа ла бүленмәйенсә булдыра алмайым. Ә интернетта уларҙы тулылыһынса уҡыу мөмкин дә түгелдер, тип уйлайым. Һәм, ғөмүмән, ҡулыңа тотоп икмәк ашаған һымаҡ, гәзитте лә үҙен тойоп, ҡулға алып уҡыуға етмәйҙер ул.

Уҡыу - матур ғәҙәт икән, ул, һис шикһеҙ, кешенең тормош рәүешенә, холҡона әүерелә. Ә холоҡ-характерҙы беҙҙән кем әүәләй? Телебеҙ асылғандан алып - халҡыбыҙҙың тылсымлы, героик һәм көнкүреш әкиәттәре, аҙағыраҡ - классик әҫәрҙәр геройҙары, зыялы шәхестәребеҙ, замандаштарыбыҙ яҙмыштары. Бөгөн минең күңел талабы - шиғриәт. Шиғыр яратҡандан да түгел, осраҡлы берәй шиғри әҫәр ҙә түгел, ә ни бары замандаштары һәм киләсәк менән ошо телдә аралашыу бәхетенә эйә булған Рәмиҙең мәңгелек һорауҙарға ошо телдә беҙгә яуап таба алғаны өсөн. Беҙҙән һуңғыраҡ бер талай быуындарҙың теле уның "Туған тел"е менән асылды, әле лә ул телебеҙҙән төшмәй, милли гимныбыҙға әүерелде. Бер һәм берәгәйлеләр өлөшөнә генә төшә шул бындай ижади яҙмыш. Ҡабат-ҡабат ҡулға алам тиңдәшем кеүек ябай ҙа, остазым булараҡ бөйөк тә Шағирыбыҙҙың "Таш сәскә"һен, "Умырзая йыры"н, "Алырымҡош менән Бирмәмҡош"он, "Көндәлектәр"ен... Ҡанатлы һүҙбәйләнештәргә әүерелгән тапҡыр һәм көслө шиғри юлдарҙы көндәлек телмәр запасына ла индерергә, эшемдә лә файҙаланырға тырышам: күберәк күңелдәр отоп алһын уны, улар ҙа шул телдә аралашһындар, ҡыҙыҡһынһындар һәм, ниһайәт, улар ҙа Рәмигә килһендәр, уның бер көн, бер минут та тора алмаһындар, тип...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Теманы дауам итеп, "Киске Өфө"нө лә уҡығыҙ, ул һеҙҙең зауыҡты ла, танһыҡты ла ҡандырыр, уйландырыр, күңелдәргә рух ныҡлығы ҡундырыр, тотонорға ҡыймайыраҡ торған ниндәйҙер эштәрҙе атҡарыр сәм дә уятыр, мең төрлө һорауҙарығыҙға яуап та бирер, тип өндәшмәксебеҙ.**




● Әле бына 1 февралдән 31 мартҡа тиклем гәзитебеҙгә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс 50665) яҙылыу бара.

● Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтар гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.

● Февралдә 2016 йылдың икенсе яртыһы йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып **(ә беренсе ярты йыллыҡ өсөн йомғаҡ яһалды һәм быйылғы 6-сы һанда баҫылып сыҡты)**, квитанцияларын редакцияға ебәргән 3 уҡыусыбыҙға **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап бүләгә иткәйнек. Быйа ул бәхетле уҡыусыларыбыҙ: Учалы ҡалаһынан **Мәрзиә Солтанбаева,** Хәйбулла районы Йәнтеш ауылынан **Әлфиә Торомтаева,** Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылынан **Әкрәм Ҡәйепҡолов.**

● Мартта ла 2016 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 3 уҡыусыбыҙға **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап бүләк итмәксебеҙ. Йә, кем алыҡ?

● Гәзитебеҙгә беренсе ярты йылға яҙылып өлгөрмәгәндәр марттың 20-нә тиклем яҙылһа, уны апрелдән **(3 айға - 272 һум 88 тин)** алдыра башлаясаҡ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Ишембай районының етештереү һәм инфраструктура объекттарын ҡарап сыҡты, Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск автомобиль юлын төҙөү барышы менән танышты. Республика етәксеһе Маҡар ауылынан Ҡаҙармаға тиклем файҙаланыуға тапшырылған юл участкаһында, Ҡолғона ауылында 2014 йылда төҙөлә башлаған күп функциялы социаль-мәҙәни үҙәк майҙансығында булды. Ишәй ауылында "Ишембай эзбизташы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең етештереү майҙансығында, шулай уҡ Ғүмәр яткылығындағы эштәр барышы менән танышты.

✔Республика Башлығы Ишембай районына эш сәфәре барышында Көҙән ауылында Башҡортостан Милли музейының филиалы булған Әхмәтзәки Вәлиди музейының экспозицияһын ҡараны. Музей 1993 йылда булдырылған. Фондта 1 800-ҙән ашыу экспонат, шул иҫәптән шәхси фотоһүрәттәр һәм документтар, үҙе иҫән сағында сыҡҡан ғилми баҫмалар, дипломдар һаҡлана. Экспозицияла Әхмәтзәки Вәлидиҙең ғилми һәм ижтимағи-сәйәси тормошо хаҡында документаль материалдар тупланған, тыуып үҫкән һәм бала сағы, йәшлеге үткән йорттоң интерьеры элекке хәленә ҡайтарылған, XX быуат башындағы мәҙрәсәнең йыһаздары яңыртылған.

✔Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры, республика Хөкүмәте Аппараты етәксеһе Илшат Тажетдинов Контракт системаһын үҫтереү буйынса Хөкүмәт координация комиссияһының эш рәйесе итеп тәғәйенләнде. Кадрҙар үҙгәрешенә бәйле комиссияның составы яңыртылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

✔Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев Чебоксарҙа (Сыуаш Республикаһы) хеҙмәт баҙарындағы хәл һәм мәшғүллеккә булышлыҡ итеү саралары тураһында кәңәшмә үткәрҙе. Унда Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ольга Голодец, Рәсәйҙең мәғариф һәм фән министры Дмитрий Ливанов, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин, төбәк башлыҡтары, эшҡыуарлыҡ һәм профсоюз ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың хеҙмәт баҙарындағы хәле тураһында доклад менән сығыш яһаны.

БЫЛ АЙҘА...

# МАРТТА...

## ҡояш та йомарт!



**Ниһайәт, яҙ башлана, тип әйтергә ине лә, быйыл ҡыш үҙе яҙға тартым холҡо менән аптыратып сыҡты. Миҙгелдәр ҙә алышынып, яңылышып китә хәҙер. Өлкәндәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалһаң, элек "ҡар ҙа ваҡытында яуып, яҙ ҙа ваҡытында килә" торған булған. Быйыл яҙғы ҡояшҡа ныҡ ҡына көс сарыф итергә тура килер, ахыры: эш күп буласаҡ уға - ҡыш буйына ҡар мул яуҙы, тирә-яҡта бейек-бейек көрт буралары ҡалҡып сыҡты. Рәсәй Гидрометүҙәге күҙаллауынса, яҙ оҙаҡҡараҡ һуҙылмаҡсы шуға ла. Өҫтәүенә, мартта аҡман-тоҡман тулап аласаҡ әле, шуныһы яҙ килмәҫ, ти боронғо һынамыш. Халҡыбыҙ бит был айҙы буранай тип юҡҡа атамаған.**

Ҡарҙың күплеге, бер яҡтан, йәй айҙары өсөн яҡшы булып, ер дымға туйынып ҡалһа, уның икенсе яғы хәүефләндереп тә ҡуя: ташҡын, һыу баҫыу кеүек мәшәҡәттәргә лә әҙер булырға кәрәк, юғиһә, бындай стихия ҙур ғына бәләләр килтереүе бар. Ҡыҫҡаһы, яҙ оҙаҡҡа һуҙылһа ла, ҡарҙың яйлап иреүе хәйерлерәктер, тимәксемен. Метеорологтар мартта һауа температураһының ыңғай динамикаһын күҙаллай, ләкин уларға ышаныуы ла ҡыйын хәҙер: тәбиғәт, айырыуса яҙғы айҙар, көтөлмәгән сюрприздарға һәләтле.

Календарға күҙ һалһаҡ, яҙ башы **8 Март** - Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнән башҡа күренекле даталарға әллә ни бай ҙа түгел һымаҡ. Берәү булһа ла, берәгәйле байрам шул! Дөрөҫ, мартты бесәйҙәр байрамы тип тә йөрөтәләр. Календарь ҙа шуны раҫлай, күрәһең. **1 март** Бөтөн донъя граждандар оборонаһы көнө менән бер рәттән, Бөтөн донъя бесәйҙәр көнө лә икән. Быныһы уйынлы-ысынлы булһа, уның ҡарауы, марттың тәүге көндәре **(3)** Бөтөн донъя яҙыусылар көнө булараҡ бик урынлы билдәләнә, тип әйтергә була: ижад халҡы оҙонға һуҙылған ҡышҡы йоҡонан уяныр китер, бәлки. Өҫтәүенә, тағы ике аҙнанан Бөтөн донъя шиғриәт көнө лә яҙ һулышын яҡынайтыуға сәбәп буласаҡ. Был көндө беҙ быуындарҙы киләсәккә етәкләүсе Аҡмулла, Бабич, Рәми, Ахматова, Евтушенко, Пушкин шиғырҙарын ҡайта-ҡайта уҡып сығырбыҙ, яттан һөйләрбеҙ. Шуныһы ғына үкенес: заманыбыҙ улар кеүек титандарҙы тыуҙыра алмай әлегә. Һүҙ иң көслө ҡорал, тиһәк тә, әлегә үлем сәсеүсе ҡурғаш пулялар, ер йөрәген аҡтарыусы бомбалар иң көслө ҡорал булып ҡала. Тәүге космонавт Юрий Гагариндың, Ер шары шундай бәләкәй, үҙе зәп-зәңгәр, һаҡлайыҡ ошо матурлыҡты, тигән васыяты ла онотолдо - әле бында, әле тегендә ер тетрәтеүсе шартлауҙарҙың тынғаны ла юҡ. Йыл һайын **20 март** - Халыҡ-ара Ер көнөн билдәләүҙең маҡсаты ла шуға экология мәсьәләләре менән генә сикләнмәй. Ул көндө бөтөн илдәр һәм ҡитғалар балалары йыйған тәңкәләр аҡсаларға 1954 йылда Японияла ҡойолған Тыныслыҡ ҡыңғырауы яңғырай. **22 март** Бөтөн донъя кимәлендә билдәләнеп килгән Һыу көнө ошо теманың дауамы булараҡ, кешелеккә ерҙәге тәбиғи, таҙа һыу ресурстарының төпһөҙ түгеллеген аңғартып, киҫәтеп торғандай: киләсәктә эсәр һыу алтындан да ҡиммәтлерәк буласаҡ, тигән лаҡап - ул лаҡап ҡына түгел, тимәк. Буранайҙың һуңғы аҙнаһы Бөтөн донъя метеорологтар көнө **(23)** менән башланып, ай үҙе Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн музыка аҙналығы **(24 - 30)** менән тамамлана.

Буранайҙа бик күп уҡымышлы, талантлы, эшһөйәр һәм ҡыйыу йөрәкле шәхестәр донъяға килгән. Улар араһында Башҡортостаныбыҙ ғорурлығы булған Советтар Союзы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, химия, биология, медицина, техник, ауыл хужалығы, иҡтисад, философия, геология-минералогия фәндәре докторҙары - дәрәжәле ғалимдар, табиптар, агрономдар, тау инженерҙары һәм башҡа һөнәр эйәләре тыуған. Ошо таланттарҙы тәрбиәләп үҫтергән, кеше иткән республикабыҙ өсөн дә иҫтәлекле көн бар был айҙа. 1919 йылдың **20 мартында** Рәсәй Эшсе-Крәҫтиәндәр хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйыла. Ил, донъя тарихында тәүгеләрҙән булып!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...

Ҡытайҙа боронғо аҡыл: "Ҡатын-ҡыҙ өсөн тормошта бала сағтан өйрәнергә тейешле бары тик бер генә мөһим нәмә бар - энергия йыйыу, туплау һәм һаҡлау", - ти. Был уның тәғәйенләнеше. Ир-ат өсөн ул ҡабат-ҡабат тулыланып торған йәншишмә булып тора. Арыған ҡатын-ҡыҙ ир-атҡа көс тупларға ярҙам итә, ҡороған шишмә кеүек, һыуһаған юлсының һыуһынын ҡандыра алмай. Эске низағ һәм кире хис-тойғо тыуҙырған эшмәкәрлек ҡатын-ҡыҙға тап килмәй. Гүзәл зат үҙе, ғаиләне хаҡына һәм төп тәғәйенләнешен тормошҡа ашырыу өсөн нимә генә эшләһә лә, уны яратып башҡарырға тейеш. Уға ҡәнәғәтләндереүсе һәм гармонияға килтереүсе бөтөн нәмә менән дә шөғөлләнергә ярай - йырларға, һүрәт төшөрөргә, тегергә, музыка менән шөғөлләнергә, ҡул эштәре башҡарырға. Нимә генә эшләгәндә лә ҡатын-ҡыҙҙың бөйөк миссияһы - ғаилә өсөн ҡыуаныс, оптимизм, яҡтылыҡтың бөтмәҫ энергия сығанағы булыу.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ТЕЛДЕҢ ДӘ...

## моңо бар

**Мине иң ныҡ борсоғаны - туған телебеҙҙең һутһыҙлана барыуы. Ризыҡтың таты, тәме кәмей барған кеүек бит ул аралашҡан телебеҙ шишмәһенең һайыға барыуы.**

Телмәребеҙ шул тиклем сүпле, хатта тел белгестәребеҙ, журналистарыбыҙ, күп кенә яҙыусыларыбыҙ ҙа үҙ фекерен ысын башҡорт телендә әйтеп бирә, сығыш яһай алмай башланы. Радио-телевидениеләғы сығыштарҙы ла, трибунанан һөйләүселәрҙе лә "йәнде уска тотоп" ултырып тиңгәндәй тыңлайым, исмаһам, һин "русса әйткәндә" тип ҡыҫтырмаһаң ярар ине, тип ултырам. Юҡ, был беҙҙең мотлаҡ һүҙгә (бәлки, хатта мәҙәнилек кимәле билдәһе тип тә иҫәпләйҙәрҙер) һәм, тимәк, мотлаҡ шартҡа әйләнде - өлкәндәр ҙә, йәштәр ҙә, башҡорттарға әйтә торған фекерҙең төп әрәсәһен рус телендә аңлата башланы.

Икенсенән, тел моңоноң һутһыҙланыуы, тимәк, ҡотһоҙланыуы борсой. Ысын башҡортса һөйләшеү юғала бара. Иң элек ул баҫымды дөрөҫ яһамауҙан килә. Әгәр башҡорт теле әле һөйләшкән кеүек булһа, боронғо оҙон көйҙәребеҙ ижад ителмәҫ ине. Боронғо йырҙарға ҡолаҡ һалайыҡ әле: баҫым һуңғы ижеккә төшә лә, бөгөл-бөгөл берләм юл кеүек, иҫ китмәле моң хасил итә. Һәр бөгөләшенән тулҡын-тулҡын моң урғыла. Тының, күкрәктәге моңоң еткән тиклем һуҙ ҙа һуҙ, әйҙә. Был бит телебеҙҙең моңона, баҫымдың һуңғы ижеккә төшөүенә бәйле. Һандуғас моңондай телебеҙ турғай сирҡылдауына ҡалып бара. Әлеге лә баяғы йырламауҙан, шиғыр-ҡобайырҙарҙы дөрөҫ һөйләмәүҙән килә был.

"Йөйләү" ял итеү үҙәгендә телмәргә ныҡ иғтибар итергә тырышабыҙ, әммә "ағас тел" кеүек инде балаларыбыҙ теле - тәүге ижеккә баҫым яһап, ҡыҫҡырып тороп, ҡулдарын унлыһуллы йәйеп ебәреп һөйләйҙәр. Ҡыҫҡырып һөйләүҙе оҫталыҡ икән тип уйлайҙар. Башҡорт бит әйтә торған фекерен ҡыҫҡырып, бойороп еткермәгән, ә ипле генә итеп һендерел әйткән. Тел моңо үҙгәрмәһә, фекер әрәсәһе лә юғалмай. Тел моңо юғала барған һайын, көйҙәребеҙ юҡҡа сыға. "Былбылым" (Заһир Исмәғилев), "Тыуған ауылым" (Хөсәйен Әхмәтов), "Минең йондоҙом" (Рафиҡ Сәлмәнов), "Алтын балдаҡ" (Абдулла Хәлфетдинов), "Башҡорт теле" (Айрат Ҡобағошов) кеүек халыҡ көйөнә тартым, күңелдәрҙе наҙлап торған йырҙар һирәк ижад ителә хәҙер. Был иһә көй ижад итеүселәребеҙҙең тел моңон тоймауынан, баҫымды дөрөҫ белмәүенән килә.

Заманында рус тел белгестәре башҡорт теленең һығылмалы, яғымлы, наҙлы булыуына иғтибар иткән икән, был өндәребеҙҙең күплегенә бәйләнгән. Башҡорт телендәге өндәр хәрефтәр һанына ла, әйтелешенә лә тап килмәй. Хәҙерге башҡорт теленең өндәре хәреф атамаһы ҡалыбына яраҡлаштырыла. Һәр өндө хәреф менән билдәләү алфавитты сикһеҙ күбәйтер ине. Шуның өсөн бер нисә өн бер хәреф менән билдәләнгән. Хәҙер беҙ балаларға тәү башлап алфавитты ятлатып, тел теорияһы - грамматика өйрәтә башлағанлыҡтан, телебеҙҙе 40 (ъ, ь иҫәпләнмәне) хәреф ҡалыбына тыңҡыслайбыҙ. Шунлыҡтан, өндәребеҙ дөрөҫ әйтелмәй, тел моңона зыян килә. Бер генә миҫал. Һуңғы ваҡытта Сибай, таба, бабай, әбей һәм башҡа һүҙҙәргә "б" шул тиклем ҡолаҡты яра, ысын башҡортса яңғырамай. Башҡорт телендә был хәреф йомшаҡ ҡына итеп, "б" менән "в" өндәре араһында, ирендәр бер-береһенә ҡағылыр-ҡағылмаҫ ҡына итеп әйтелгән һәм "w" менән билдәләнгән. Ғөмүмән, тел яңғырашы кешенең, тимәк, халыҡ теле халыҡтың күңел торошон бар итеүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Шулай булғас, ысын башҡортлоҡто һаҡлауҙа ысын башҡорт моңо һәм теле яңғырашының тос өлөш индереүен иҫәпкә алырға һәм телебеҙгә үтә лә иғтибарлы булырға тейешбеҙ. Һәр беребеҙ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 22 мартан 24-нә тиклем Өфөлә "Заманса ҡала-2016" төбәк-ара форумы үтә, унда Рәсәйҙең төҙөләш комплексы проблемалары, төҙөләштә, торлаҡ-коммуналь хужалыкты хоҡуҡи көйләүҙең мөһим мәсьәләләре һәм башҡалар тикшерелә. Бынан тыш, форум барышында "СтройТехЭкспо", "Коммуналь хужалыҡ" һәм "Юл" махсуслаштырылған күргәҙмәләрен уҙғарыу ҡаралған. "Заманса ҡала-2016" форумын уҙғарыу урыны: Менделеев урамы, 158, "ВДНХ-Экспо" комплексы.

✓ Башҡортостанда наркотиктар менән сауҙа иткән 700 сайт ябылған. Граждандарҙы ҡабул итеү барышында Наркотиктар әйләнешенә контроль буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығы начальнигы Александр Митюков ошо хаҡта хәбәр итте. Александр Митюков һүҙҙәренсә, ведомство хеҙмәткәрҙәре бөтә донъя селтәрендә ҙур эш алып бара, үҙ ваҡытында ошондай сайттарҙың эшмәкәрлеген туҡтата. Билдәләнеүенсә, республикала йәшәүсе һәр кем ошо эштә ярҙам күрһәтә ала.

✓ Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, марттың тәүге ун көнөндә Башҡортостан биләмәһендә аномаль йылы һауа торошо һаҡлана. Һауа температураһы норманан 5-7 градусҡа юғары. Айҙың беренсе аҙнаһында тоторо҅ҡһоҙ һауа торошо көтөлә. Бер аҙ епшек ҡар яуасаҡ, боҙлауыҡ буласаҡ. Һауа температураһы төндә -3, -12 градус, аяҙайтҡанда -17 градусҡа тиклем. Көндөҙ йылыраҡ - 0, -5.

✓ Мәскәүҙә, Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә, "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни үҙәге ойошторолоуға бер йыл тулыуға арналған ҙур концерт булды. "Аҡ тирмә" үҙәге мегаполиста төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтен һаҡларға ярҙам итеүсе, яҡташтарҙы берләштереүсе 50-нән ашыу мәҙәни үҙәктәрҙең береһенә әүерелде. Концертта билдәләнеүенсә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙәк бер нисә ижади коллективты туплап, илебеҙҙең баш ҡалаһында үҙаллы "башҡорт филармонияһы"на әйләнде.

✓ Өфөлә балалар һауыҡтырыу лагерҙарына һәм шифаханаларға юлламалар йәрминкәһе уҙғарыла. Республика Профсоюздар федерацияһының матбуғат хеҙмәте билдәләүенсә, быйыл ҡала яны лагерында бер койка-урындың хаҡы 747 һумға тиклем арткан (2015 йылда - 685 һум), шифаханала - 867 һум (былтыр - 795 һум). Йәрминкә 18 мартта Башҡортостандың Профсоюздар йортонда ойошторола. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХӘСТӘРЛӘҮ ҮҘ ИҢЕНДӘ

**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың Владивосток урамындағы 15-се йорттоң ҡыйығының бер өлөшө емерелеп төшөүе төрлө фекерҙәр тыуҙырҙы.**

Был йорт 1969 йылда төҙөлөп, ҡыйыҡ ябыуы һәм терәүҙәре ҡар баҫымын күтәрә алмайынса емерелгән. Ләкин әлегәсә йорт капиталь ремонт талап иткән объекттар исемлегенә индерелмәгән булған һәм ошо ваҡиғанан һуң уны тиҙ арала ҡыҫҡа ваҡытлы программаға индереү мәсьәләһе ҡарала. Бер яҡтан, был ваҡиға торлаҡ фондының иҫкереүенә тағы бер дәлил булды. Икенсе яҡтан, милекселәр капиталь ремонт өсөн әле саҡ түләй башланы һәм, ныҡлап уйлаһаң, был дөрөҫтөр ҙә, сөнки ауыл ерҙәрендә милекселәр үҙҙәренең йортон үҙ көстәре менән ремонтлай, шуның өсөн үҙ кеҫәһенән финанс сығымдары йәлеп итә. Быға тиклем ҡалалағы күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр бындай проблемалар менән бигүк осрашмай ине, сөнки барлыҡ хужалыҡ эштәрен коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре дәүләт иҫәбенә башҡарҙы. Хәҙер баҙар иҡтисады шарттарына күсеү уларҙы ла яныса йәшәргә һәм "Буштың атаһы үлгән" тигән мәҡәлде хәтергә төшөрөргә мәжбүр итте. Капиталь ремонт үткәреү буйынса Төбәк операторының матбуғат хеҙмәте белдереүенсә, ошо йортта йәшәүселәрҙең 68 проценты иғәнәләрҙе ваҡытында түләп тора икән, ә ҡалғандары һаман да кемгәлер ышана, күрәһең.

Социологик һорау алыуҙар һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә һәр икенсе фатир хужаһы капремонт өсөн түләүҙәрҙе "көс етмәҫтәй" тип белдерә. РФ Дәүләт Думаһының ҡайһы бер депутаттары был нормаларҙы үҙгәртеүҙе генә түгел, бөтөнләй уларҙан баш тартыуҙы талап иткән закон инициативаһы менән сығыш яһаһа, РФ Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Дмитрий Козак 24 февралдә капиталь ремонт тураһындағы закондан баш тартыу һәм уны тамырынан үҙгәртеү планы күҙалланмай, тип белдерҙе. Был йәһәттән БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев та иғәнә йыйыу туҡтатылмаясаҡ тине: "Кеше үҙе йәшәгән өй өсөн яуаплы. Уға ҡыйыҡтан һыу үтмәүе, баҫҡыстарҙың нормаль булыуы, стеналарҙың күркәм булыуы, торбаларҙан һәр саҡ һыу ағып тороуы кәрәк. Шуға ла, минеңсә, халыҡҡа үҙенең милкендә булған милек өсөн матди яуаплылыҡ тойорға тура киләсәк". Бөгөн торлаҡ фондындағы проблемаларҙы халыҡ үҙ көсө менән хәл итә алмағанлыҡтан, капиталь ремонт тураһындағы закон ҡабул итеү зарурлығы тыуған да инде.

Әйткәндәй, республикаһының мәғлүмәт агентлыҡтары һәм башҡа мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, быйыл торлаҡ фондына капиталь ремонт үткәреүгә милекселәрҙең 2,5 миллиард иғәнәһенән 1063 күп фатирлы йортто ремонтлауға тотоноу планлаштырыла. 2014 йылда был пункт буйынса аҡса йыйыу 50 процентҡа үтәлһә, былтыр ул 83,7 процентҡа, дүртенсе кварталда иһә 93,5 процентҡа етә. Былтыр капиталь ремонтҡа 2,4 миллиард һум тотонолоп, 159 мең кеше торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан.

Бына шулай, әгәр үҙ милкеңдең хеҙмәт осоро оҙайһын, ул ҡайғы-хәсрәт түгел, бары тик шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына килтерһен, тиһәң, уны ла ҡарап, тәрбиәләп, хәстәрләп торорға кәрәк икәнлеген оноторға, кемдер килеп эшләр әле, тип кемгәлер өмөтләнергә ярамайҙыр барыбер ҙә.

Шәрифә САЛАУАТОВА.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Баш ҡаланың "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса Терминология комиссияһы үҙенең эшен тәртипкә һалып, бына нисәмә йылдар инде ал-ял белмәй, республикала йәшәүсе халыҡтарҙың телдәре һағында тора. Уның эшмәкәрлеген ҡала хужалығының төрлө өлкәләрендә күҙәтергә мөмкин. Махсус ойошторолған Терминология төркөмө ағзаларының осҡор күҙенә бер генә хата ла салынмай ҡалмай. Ләкин хаталар, яҙғыһын баҡсала дәррәү күтәрелеп сыҡҡан сүп үләндәре кеүек, һаман да Тел тигән гөлбаҡсаны йәмһеҙләп, осрап ҡына тора. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов рәйеслегендә уҙған сираттағы ултырышта ла һүҙ ошо һәм Законды ғәмәлгә ашырыуҙағы башҡа мәсьәләләр хаҡында барҙы.**

# ДӘҮЛӘТ ТЕЛДӘРЕН БЕЛГӘН...

## хеҙмәткәрҙәр кәрәк!



Сынтимер Биктимер улы белдереүенсә, был ултырышҡа әҙерлек барышында Өфөнөң Дим, Калинин, Ленин райондарында алтаҡталарҙың, предприятие-ойошмаларҙың эш ваҡытының, башҡа күргәҙмә мәғлүмәттең дәүләт телдәрендә яҙылышын күсмә тикшереүҙәр ойошторолған һәм эш барышында асыҡланған етешһеҙлектәр буйынса күрһәтмәләр бирелгән. Һөҙөмтәләрҙе анализлау шуны күрһәтә, хаталарға тәржемә эшләгәндә түгел, нигеҙҙә, алтаҡталарҙы, башҡа продукцияны әҙерләү этабында юл ҡуйыла. Был, үҙ сиратында, теге йәки был реклама хеҙмәтендә башҡорт телен белгән белгестең булмауы тураһында һығымта яһарға этәрә. Сөнки инде нисәмә тапҡыр ҡабатланыуға ҡарамаҫтан, күбеһенсә башҡорт теленә генә хас булған өҫҡөнсәлекле хәрефтәрҙе яҙғанда хаталар ебәрелә.

Шулай уҡ Өфөлә быйыл бер нисә йыл рәттән хаталарға ҡертә ҡуйыу маҡсатынан "Грамоталы ҡала" конкурсы уҙғарыла. Әлеге ваҡытта сараның беренсе - район этабы тамамланған. Уның барышында предприятие, ойошма һәм учреждениеларҙың Законды тормошҡа ашырыу буйынса эшмәкәрлеге баһаланһа, сираттағы ҡала этабында ҡала районҙарының эште ойоштороу кимәле тикшереләсәк.

Ултырышта башҡа сығыш яһаусылар менән бер рәттән, ҡала хакимиәтенең Мәғлүмәт-аналитика идаралығы - матбуғат хеҙмәте етәксеһе Камил Юлаев мәғлүмәт өлкәһендә башҡарылған эштәр менән таныштырҙы. Был хеҙмәт даими рәүештә өфөләр араһында милләт-ара мөнәсәбәттәр, тормоштоң төрлө тармаҡтарында туған телдәрҙе ҡулланыу мәсьәләләре буйынса йәмғиәт фекерен өйрәнеү мониторингы үткәреп тора. Һөҙөмтәлә яуап биреүҙә ҡатнашыусыларҙың 91,4 проценты - рус, 20,4 проценты - башҡорт, 22,8 проценты - татар, 5 проценты сит телдәрҙе камил белә. Дөйөм алғанда, халыҡ ҡалалағы милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе ыңғай баһалай. Хакимиәттең рәсми сайтында закондың үтәлешен яҡтыртҡан мәҡәләләр донъя күреп тора, шулай уҡ уның башҡорт телендәге версияһын камиллаштырыу өҫтөндә эшләйһе бар әле.

Баш ҡала хакимиәтенең Мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса идаралыҡ етәксеһе Исламетдин Мәмбәтов ошо өлкә буйынса эшләнгән эштәрҙе бәйән итте. Билдәләнеүенсә, Законды тормошҡа ашырыу йәһәтенән бигерәк тә муниципаль китапханаларҙың әүҙемлеген күрһәтергә кәрәк, сөнки тап улар республикала йәшәүсе халыҡтар телендәге баҫма байлыҡты һаҡлау һәм пропагандалау буйынса эш алып бара һәм был йүнәлештә төрлө формалар, ысулдар ҡуллана. Балаларға өҫтәмә белем биреү учреждениеларында Мифтахетдин Аҡмулланың, Мостай Кәримдең, Айҙар Байыҡтың ижадына, башҡорт композиторҙарына арналған саралар уҙғарыла, балалар музыка мәктәптәренең ҡайһы берҙәрендә милли уйын ҡоралдарында уйнарға өйрәнә. Мәҙәниәт һарайҙарында милли студиялар, төрлө коллективтар эшләй. Мәҙәниәт һәм ял парктарында халыҡ байрамдары уҙғарыла. Былар барыһы ла Закон талаптарын ғәмәлгә ашырыуҙың бер сағылышы булып тора.

Йомғаҡлап әйткәндә, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса баш ҡалала эш алып барыла, әммә уны тағы ла һөҙөмтәлерәк итеү өсөн реклама хеҙмәттәрен генә түгел, барлыҡ хеҙмәттәрҙә лә ике дәүләт телен дә камил белгән белгестәр менән тулыландырырға кәрәк икәне көн кеүек асыҡ.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанстат 2015 йылға бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡын баҫтырып сығарҙы. Мәҫәлән, былтыр ғинуар-декабрь айҙарында урта медицина персоналының уртаса эш хаҡы 21,1 мең һум булһа, кесе медицина персоналының - 14,1 мең һум. Мәктәп уҡытыусыларының - яҡынса 25,6 мең, балаларға өҫтәмә белем биреү учреждениелары педагогтарының - 22,6 мең, балалар баҡсаһы тәрбиәселәренең 21,5 мең һум тәшкил иткән. Социаль хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы - 19,1 мең һум, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең иһә яҡынса 17,9 мең.

✓Салауат районының Малаяҙ ауылында "Каратау шонҡары" фильмының премьераһы булды. Документаль таҫма танылған актер - 2015 йылда арабыҙҙан киткән Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Хәмит Яруллиндың тормошона һәм ижадына бағышланған. Фильмды Зөһрә Бураҡаеваның сценарийы буйынса "Башҡортостан" киностудияһы режиссеры һәм операторы Радик Килмәмәтов төшөргән.

✓Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2016 йылдың тәүге айында Башҡортостанда 4255 сабый тыуған, 4490 кеше вафат булған. Үлемдең төп сәбәптәре - ҡан әйләнеше ауырыуҙары (44 процент), яман һәм хәүефһеҙ шештәр (12), шулай уҡ бәхетһеҙ осраҡтар, ағыуланыуҙар һәм имгәнеүҙәр (9).

✓Учалынан "Таусы" хоккей командаһы "Алтын шайба" Бөтә Рәсәй турнирында еңеү яуланы. Малайҙар урта йәш төркөмөндәге ауыл командалары категорияһында республика исеменән сығыш яһаны. Ярыштар Салауат ҡалаһында үтте. Еңеүсе исемен яулар өсөн Башҡортостанға Силәбе, Һамар, Ырымбур, Свердловск һәм Тверь өлкәләренән, Сыуашстандан, Приморье крайы, Татарстандан 12 команда килде. Силәбеләр турнирҙа икенсе урынға лайыҡ булды. Өсөнсөлә - Татарстандың "Балтаси" командаһы.

✓2018 йылда Өфө моторҙар производство эшләү берекмәһе МиГ самолеттары өсөн двигателдәр етештерә башларға ниәтләй. Әле ошо двигателдәр Өфө моторҙар эшләү берекмәһенең филиалында - В.В. Чернышев исемендәге Мәскәү машина эшләү предприятиеһында етештерелә.

✓ Ете йыл дауамында балаларға электрон белем биреү программаһы буйынса эшләүсе 52-се лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы Сәриә Рәхмәтуллина конкурстың абсолют еңеүсеһе булып танылыуы ғәжәп түгел.



*АФАРИН!*

# БАШ ҠАЛА УҠЫТЫУСЫЛАРЫ...

## бәйге тотто




**(Башы 1-се биттә).**

Баш ҡаланың башҡорт теле уҡытыусылары ла заманға ярашлы алдынғы технологияларҙы үҙләштереп, йылдан-йыл һөнәри белемдәрен үҫтереүгә йөҙ бора. Был юлы "Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында тап шундай 22 педагог ҡатнашты, уларҙың етәүһе лауреат исеменә лайыҡ булды. Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы әйҙәүсе белгесе Розалия Сафиуллина әйтеүенсә, быйылғы конкурсанттар бығa тиклемге ҡатнашыусыларҙан инноватика яғынан көслө булыуҙары, таныш булмаған синыф уҡыусылары менән дә тиҙ генә уртаҡ тел таба, яңы технологиялар, уҡытыу алымдары ярҙамында дәрестәрҙе мауыҡтырғыс, йәнле итеп ойоштора белеүе менән айырылып торған. Конкурстың жюри ағзаһы, филология фәндәре кандидаты Ирена Ҡолһарина ла был фекерҙе йөпләй: "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары эҙләнә, туған телебеҙҙе киләсәк быуынға тапшырыу сараларын камиллаштыра, үҙҙәренең белем биреү концепцияларын дәлилләй", - тине ул.

Бына шуға күрә лә, ете йыл дауамында балаларға электрон белем биреү программаһы буйынса эшләүсе 52-се лицейҙың башҡорт теле уҡытыусыһы Сәриә Рәхмәтуллина конкурстың абсолют еңеүсеһе булып танылыуы ғәжәп түгел. Сәриә Хәбир ҡыҙы көндәлек эшендә "Бер уҡыусыға - бер компьютер" моделен, башҡа алдынғы уҡытыу программаларын әүҙем ҡулланыусы педагог. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытҡанда дәресте ҡыҙыҡлыраҡ итеп үткәреүгә ярҙам итеүсе бындай алымдар мөһим, тип һанай ул.

Баһалама ағзаларына "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашыусы 44 педагог араһынан да еңеүсене һайлауы бик еңелгә тура килмәне. Быйыл "Иң шәп педагог" титулына тарих уҡытыусыһы Сергей Переверзев лайыҡ булды. Сергей Сергеевич Өфөнөң 159-сы һанлы мәктәбендә эшләй. Компьютер, төрлө телефон уйындары менән мауыҡҡан балаларҙы нисек итеп тарих фәненә ылыҡтырыу серен ул күптән асҡан. Уҡыусыларға информацион һәм коммуникацион технологияларҙы ҡулланып мәғлүмәт тупларға өйрәтеү, компьютерҙы уйын уйнау өсөн генә түгел, ә белемеңде арттырыу маҡсатында ҡулланырға мөмкин булыуын аңлатыуҙы маҡсат итеп ҡуйған ул. "Был конкурста тәжрибә уртаҡлашыу ниәтендә ҡатнаштым һәм коллегаларыма минең белемем кәрәк булыуын күрҙем", - ти Сергей Переверзев.

Әйткәндәй, быйылғы конкурстарҙа педагогикала тәүге аҙымдарын яһаусы, әммә заман талаптарын үҙләштереп, хатта тәжрибә тупларға ла өлгөрөүсе йәш уҡытыусыларҙың ҡатнашыуы ла шәйләнде. "Педагогик өмөт" номинацияһында еңеүсе 29-сы урта белем биреү мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлфинә Шәмиғолова, мәҫәлән, үҙ эшендә инновацион алымдарҙы ҡулланыу буйынса өлкән коллегаларынан һис ҡалышмауын иҫбат итте. Мәктәптә ни бары өс йыл уҡытһа ла, ул заманса технологиялар ярҙамында тикшеренеү эштәре лә алып барған, фәнни мәҡәләләр яҙа, үҙенең һүҙлеген сығарған. "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы" конкурсында йәш педагогтар араһында быйыл тәүге тапҡыр бирелгән "Педагогик дебют" номинацияһында Өфөнөң 3-сө гимназияһы уҡытыусыһы Надежда Ульянова билдәләнде. Ә өҫтәмә белем биреүсе педагогтар араһындағы "Йөрәгемде балаларға бирәм-2016" конкурсында 27 уҡытыусы араһынан Өфөнөң Комаров исемендәге Балалар ижад йорто Антон Емелин еңеүсе тип табылды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# МИНЕҢ ӨЛӘСӘЙЕМ

Идеаль ҡатын-ҡыҙҙар буламы? Була. Хәҙер мин һеҙгә ана шундай кешенең сифаттарын һанап сығам. Уның күҙгә иң тәүҙә бәрелгән һыҙаты - йылмайып торған мөләйем йөҙө. Ул бер ваҡытта ла төшөнкөлөккә бирелмәй. Бер ҡасан да йөҙөн һытып ултырмай. Бер ҡасан дә ғәйбәт һөйләмәй. Әңгәмәсеһенә тауыш күтәрмәй, ҡаршы әйтһә лә, йөҙөн йыртмай. Уның иренә мөнәсәбәте, иренең дәрәжәһен юғары тотоуы башҡаларға өлгө.

Эйе, әле мин үҙ өләсәйем тураһында бәйән иттем. Атайымдың әсәһе Мәстүрә Бирғәле ҡыҙы Ишбулатова тураһында, идеаль ҡатын-ҡыҙ, тип, тулы ышаныс менән әйтә алам. Ни өсөн? Сөнки ул әле генә һанап үткән бар сифаттарға ла эйә, кешеләргә иғтибарын, күңел йылыһын йәлләмәй бирә, кемдеңдер килтереп биреренә, уның өсөн кемдер килеп эшләренә өмөт итеп ултырмай, бар бурысты үҙ елкәһенә һалып, бар мәсьәләләрҙе үҙе хәл итә, балалары өсөн дә, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн дә алыштырғыһыҙ тәрбиәсе.

...Иҫемдә, әрмегә китергә йөрөгәнемдә уның тауышы ҡалтырап киткәйне. Һәр саҡ күтәренке кәйефтә йөрөп, бер саҡта ла йөҙөн һытҡаны булмағанға күрә, миңә уның был кәйефе сәйерерәк тойолғайны шунда. Һеҙҙең дә йәнәшәгеҙҙә бармы ошондай идеаль ҡатын-ҡыҙҙар?..

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*



# КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨЛДӨ...

## тыныслыҡ ҡына юҡ

**Ағымдағы йылдың 27 февраленә ҡараған төндә БМО-ның Хәүефһеҙлек Советы Рәсәй һәм АҠШ тәҡдим иткән проект нигеҙендә Сирияла хәрби көс ҡулланыуҙы туҡтатыуҙы күҙаллаған резолюция ҡабул итте. Уға ярашлы, Дамаск ваҡыты менән 2016 йылдың 27 февралендә, 00:00 сәғәттә, ил биләмәһендә хәрби көс ҡулланыу туҡтатылды. Был режимға ҡушылыу өсөн оппозицион төркөмдәр резолюцияның төп талабын - Сирия һәм уға ярҙам итеүсе башҡа хәрби көстәргә ниндәй ҙә булһа ҡорал, шул иҫәптән ракета, миномет һәм танкка ҡаршы ракеталар ҡулланыуҙы туҡтатырға тейеш ине. Резолюция ҡабул ителеүгә бер нисә көн үтте. Әлеге ваҡытҡа ниндәй һығымталар эшләргә була?**

Ҡағыҙҙа килешеү үҙ көсөнә инде, әлбиттә, ләкин көтөлгән тыныслыҡ башланманы. Әлегә тиклем барған көсөргәнешле хәрби бәрелештәрҙән һуң тиҙ генә тыныслыҡ урынлашыуға өмөт тә юҡ ине, әлбиттә. Килешеү шарттары Рәсәй һәм АҠШ тарафынан эшләнелеп, конфликтта ҡатнашыусыларға иғлан ителде. Был барыһына ла оҡшаманы. Мәҫәлән, Төркиә үҙе өсөн килешеүҙең мотлаҡ түгеллеге хаҡында белдерҙе һәм Сирия биләмәһендә хәрби көс ҡулланыуын туҡтатманы. Сәғүд Ғәрәбстаны вәкилдәре иһә, Рәсәй менән Сирияға килешеү шарттарын боҙоуҙа ғәйеп ташланы һәм, кәрәк булһа, илдә үҙенең ҡоро ер ғәскәрҙәре көсөн ҡулланырға әҙер булыуын белдерҙе. Ә Сирия ғәрәп армияһы, Ирандың экспедицион корпусы һәм Рәсәйҙең Һауа-космос көстәре өсөн хәлдәр әллә ни үҙгәрмәне - уларға әле булһа хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашырға тура килә, сөнки ҡаршы яҡ көс ҡулланыуын дауам итә.

Әлеге мәлдә Рәсәй алдында "Ислам дәүләте" һәм "Ан-Нусры" террористик төркөмдәре урынлашҡан биләмәләрҙе "таҙартыу" һәм унда Сирия армияһының контролен көсәйтеү, Анҡара менән Эр-Рияд тарафынан тура хәрби интервенцияны булдырмау бурысы тора. Шул уҡ ваҡытта АҠШ, әгәр ҙә Рәсәй ул тәҡдим иткән ташламаларға, башлыса Бәшәр Әсәдте алып ташлауға, риза булмаһа, эштең ҙурға китеүенә ишара яһауҙан туҡтамай. Хәрби бәрелештәрҙе көйләүгә тиклем Әсәдтән "ҡотолоуҙы" һәм ошо рәүешле Сирияның легитим үҙәген юҡ итеү теләге менән Төркиә һәм Сәғүд Ғәрәбстаны ла яна. Улар Сирияның курд һәм сөнниҙәр йәшәгән биләмәләрендә үҙҙәренең контролен урынлаштырыуҙа нәҡ ошо шарттарҙың ҙур роль уйнауын белеп эш итә һәм шуға ынтыла. Күреүебеҙсә, хәлдең сиселешенә төрлө ҡараштар булған һәм был ситуацияла һәр кемдең үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртыуы билдәле. Шуға күрә, резолюцияның ҡабул ителеүе генә Сирияла килеп тыуған ҡатмарлы хәл-ваҡиғаларҙы көйләүгә булышлыҡ итмәйәсәк. Бында, тәү сиратта, бөтә яҡтарҙың да бер-береһен ишетеүе һәм мин-минлеген ситкә ҡуйып, террористик төркөмдәрҙе юҡ итеүҙә берҙәм көс булып эш итеүе мөһим. Ләкин ҡайһы бер илдәрҙең төрлө хәрби провокациялары, хәлде ҡуйыртырға тырышыуы тыныслыҡ урынлаштырыу процесының башланыуына түгел, ә хәрби бәрелештәр алдынан була торған тынлыҡ ишараһы, буғай.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йүткереү

❖ 6-8 ҡара торманы йоҡаҡ ҡына итеп турарға, шәкәр һибергә, 6 сәғәт төнәтергә. Һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Йүткереү ҡоро булған саҡта ҡыҙыл көртмәле (брусника) сиробына бал өҫтәп яһалған дауа ярҙам итә. Шулай уҡ һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡара сәй урынына еләкле сәй эсегеҙ.

## Гайморит

❖ Гайморитттың беренсе билдәләре башланғас та кисен аяҡтарҙы эҫе һыуға тығып ултырып, бер нисә ҡат бөкләп һалынған марляға меновазин һөртөп, уны танау биленә (переносица) һалырға, өҫтөнән полиэтилен ябырға, башҡа йылы шәл ябынырға ла йоҡларға ятырға. Күҙҙәргә меновазин төшмәһен өсөн мамыҡ һалырға була. Иртән танауҙан бүленделәр сыға башлай һәм көнө буйы дауам итә.

❖ Бер семтем кипкән һөйәл үләнен эмаль һауытҡа һалып, 100-әр грамм үҫемлек майы, ай май өҫтәргә. Ҡайнатырға һәм һоро төҫкә ингәс, уттан алырға, һөҙөргә. Тағы ла эмаль һауытҡа ҡойоп, ярты балғалаҡ прополис, шырпы ҡабындай балауыҙ һалырға, йылытырға. Майҙы танауға һөртөргә. Һыуытҡыста һаҡларға.

## Быуындар һыҙлағанда...

❖ 1 ҡара торманы ҡырғыстан үткәреп, һутын һығырға, шул уҡ күләмдә бал һәм араҡы, саҡ ҡына тоҙ өҫтәргә. Һыҙлаған быуындарға һөртөп, төрөнөп, йоҡларға ятығыҙ.

## Диатез

❖ Балала диатез башлана икән, ҡолаҡ артындағы һәм биттәге ҡутырға балан һуты һөртөргә. Көнөнә бер нисә тапҡыр эшләргә.

## Тимерәү

❖ Тимерәү мәлендә бер ниндәй майҙар ярҙам итмәһә, түбәндәге дауаны ҡулланып ҡарағыҙ: ҡайын ҡайырыһын яғып, көлөн тимерәүгә һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КҮГӘРСЕН БЕЙЕҮЕ

**Башҡорттарҙа бөгөн дә күгәрсендең итен ашау тыйыла. Бөрйән, ҡарағай-ҡыпсаҡ, юрматы, йомран-табын, ҡошсолар ырыуҙарында күгәрсенде үлтереү һәм уны ризыҡ итеп ҡулланыу бәлә килтерә тиелә.**

Күгәрсенгә тотем ҡош булараҡ ҡарау ҡайһы бер башҡорт йолаларында ла сағыла. Этнограф Л. Нагаева "Күгәрсен" халыҡ бейеүен ғилми әйләнешкә индерә. Бейеү башлыса Баймаҡ районы башҡорттары тарафынан башҡарыла һәм ҡоштоң ҡылыҡтарын ҡабатлауҙан ғибәрәт. Уның фекеренсә, был йола бейеүе боронғо башҡорттарҙың тотемик ҡараштары менән бәйле. XIX быуат аҙағында - XX быуат башында "Күгәрсен" бейеүен теге йәки был йола башҡарғанда ғына түгел, ә дөйөм байрамдарҙа, ҡыҙҙар уйындарында бейейҙәр.

Рус этнографы һәм фольклорсыһы С. Рыбаковтың "По Уралу, среди башкир" тигән юлъяҙмаларында ла бер ҡыҙыҡлы факт осрай. Уға 1894 йылдың йәйендә Баймаҡ районы Темәс ауылында күгәрсен гөрөлдәүенә оҡшатып башҡарылған йырҙы яҙып алырға тура килә. Тимәк, был этнографик феномендар күгәрсенгә табыныуға арналған дөйөм бер йоланың айырым күренеше генә булыуы ихтимал.

Башҡорттарҙа сөннәткә биреү йолаһында сөннәтсе баба баланы күгәрсен алып киләм, тип йыуата (Борай районы эске йылан, Яңауыл районы уран, Пермь крайы Барҙа районы ғәйнәләре). Сөннәткә ултыртылған малай шартлы рәүештә ир ҡорона ингән иҫәпләнә. Сөннәтсе баба уға: "Тай инең, айғыр булдың!" - тип әйтә (Пермь крайы Барҙа районы ғәйнәләре, Һамар өлкәһе Большечерниговский районы сыуын ҡыпсаҡ, монаш бөрйән, айыу үҫәргән ырыуҙары). Ни өсөн сөннәтсе баба күгәрсен вәғәҙәләй һуң? Сөнки сөннәткә ултыртыу йолаһы бик боронғо һәм тәүтормош тотемик йолалар менән бәйле. Малайҙың ир булыуы тотем бабаның ҡурсыуы аҫтында башҡарыла. Тимәк, бында бындай тотем булып күгәрсен торған. Был йола мәлендә борон төрлө уйындар - көрәш, йүгереү, һырғауылға үрмәләү, ут менән һынау, тәнгә яра һалып сыҙамлыҡты һынау үткәрелгән. Йәғни, борон башҡорттар күгәрсенгә арнап үткәрелгән байрамда малайҙарҙы сөннәткә ултыртыуы ла ихтимал.

"Дандан батыр" әкиәтендә Ҡәһҡәһә урлап алып киткән батша ҡыҙы Нәркәсте эҙләү өсөн сығасаҡ батырҙы түбәндәгесә һайлайҙар: күрәҙәсе ҡулынан осоп сыҡҡан күгәрсен кемдең иңенә ҡуна, шул батша ҡыҙы артынан китә һәм уның кейәүе була. Күгәрсен өс тапҡыр Дандан батырҙың иңенә ҡуна. Дандан батыр ҙур ҡаршылыҡтарҙы үтеп, алышта өс дейеү һәм уларҙың инәһен үлтереп, батша ҡыҙын ҡотҡара һәм уға өйләнә.

Башҡа халыҡтарҙың дини-йола мәҙәниәтендә күгәрсенгә арналған тотемик байрамдар тураһында мәғлүмәт осратырға тура килмәне. Шулай ҙа рустарҙа "Күгәрсен" тигән уйын осрай әле. Бер туған Гриммдарҙың "Өс тел" тигән әкиәтендә күгәрсен шулай уҡ изге ҡош иҫәпләнә. Бер графтың алйот улы була. Атаһы уны өйөнән ҡыуып сығара. Алйот Римға китә, тап шул мәлдә Рим папаһы үлгән дә кардиналдар яңы папа һайлай икән. Алйоттоң ҡорамға килеп инеүе булған, ике аҡ күгәрсен осоп килеп, ике яурынына ҡунған. Быны кардиналдар Хоҙай билдәһе тип ҡабул итеп, алйотто папа итеп һайлаған.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ХӘТЕРКИТАП

# АЛМАҒАСТАР СӘСКӘ АТҠАН САҠТА...

Әшкә-маҙар микроавтобуста йөрөргә ғәҙәтләнгәнмен, йыш ҡына 75-се маршрутҡа ултырам. "Газель"дәрҙең береһенә экран ҡуйылған: реклама-фәлән, мәҙәктәр һәм... "Альбаева Зоя... 1942... Разведчица... Погибла в неравном бою..." тигән видеоны йөрәкһеп күҙҙән үткәрәм. Бөйөк Еңеү юбилейы уңайынан йыл буйы күрһәтелде ул. Ҡаһарман ҡыҙҙың фотоһы таныш та тойолғандай.

... Белоретта уҙған әҙәби марафонда саҡта ҡулыма райондың "Урал" гәзитен алдым. Иғтибарҙы "Зоя-Зәйтүнә" тигән мәҡәлә йәлеп итте. Яҡташым Нәзирә ханым Хафизова яҙмалары өсөн мин төҙөгән китапты ("Дәһшәтле йылдар ауазы. Өфө, "Китап". 2005) файҙаланыуын белгертә һәм ул илһөйәрлек рухындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлаша.

*"Үҫмер саҡта апай-инәйҙәрҙән "Катюша" йырының икенсе төрлө вариантын ишеткәнем бар ине. Бына Сосновка ауылында ветерандарға юбилей миҙалдары тапшырғас, сәй табыны ойошторолдо. Шунда Сосновка ауылынан Заһира апай Фәтҡуллина моңло тауышы менән "Зәйтүнәкәй"ҙе йырлап ебәрҙе.*

*Алмағастар сәскә атҡан саҡта*
*Йылға өҫтөнә томандар ятты.*
*Сығып бейек текә яр башына*
*Зәйтүнәкәй алыҫҡа баҡты...*

*Беҙ, рысыҡайҙар, ветерандарҙы ҡотлау ҡоро ғына үтмәһен әле, тип, бәләкәй генә концерт номерҙары алып килгәйнек. "Катюша"ны башҡортса йырланыҡ. Күрәһең, Заһира апай ҙа беҙгә "Зәйтүнәкәй"ҙе йырлап ишеттерергә булғандыр. Был йырҙы халыҡ батырҙарса һәләк булған башҡорт ҡыҙы Зәйтүнәгә арнап сығарғандыр, тигән күптәнге уйым Зәйтүнәнең батырлығы тураһында яҙырға дәртләндерҙе".*

Артабан Зояның патриотик яҙмышы ҡыҫҡаса күҙаллана... Бына ошо "ҡыҫҡалыҡ" мине лә ҡәләмгә үрелдерҙе: Бөйөк Еңеүҙең 60 йыллығына арналған китапты ҡабат ҡулға алдым. Ундағы "Ватан хаҡына үләм!" тигән мәҡәлә-иҫтәлектәр шәлкеме, маршруткалағы ролик, "Урал" гәзитендәге яҙмалар - һәммәһе лә бер батырлыҡ хаҡында! Әлбиттә, күренекле журналист, республика Хәрби-дан музейы хеҙмәткәре Фәрит ағай Вәхитовтың ихлас фатихаһын алғас, исеме йырҙарға һалынған башҡорт разведчицаһының геройлығын "Киске Өфө" уҡыусыларына тулыраҡ, аныҡыраҡ еткерергә килештек. Рәхмәт инде түбәндә мәҡәләләре биреләсәк авторҙарға, мәшһүр "Катюша"ның башҡортса вариантын йырлап үҫкән замандаштарға.

## Ә ул бөтән Зоя ине...

Төпкөл башҡорт ауылынан сыҡҡан, өйҙә лә, мәктәптә лә, фронтта ла Зоя тип йөрөтөлгән Зәйтүнә исемле ҡыҙға (шуға беҙ ҙә уны Зоя тип алдыҡ) ғазаплы үлем кисергәндә егерме йәш була. Әммә уның батырлығы тураһында гәзиттәрҙә яҙылмай - тиҫтә йылдар буйы уның тураһында белмәйҙәр. Әйткәндәй, ул хеҙмәт иткән батальонда тигеҙ булмаған алышта Зоя Әлбаеваның һәләк булыуын беләләр, әммә "хәбәрһеҙ юғалған", тип иғлан итеүҙе хуп күрәләр.

1942 йылдың 9 авгусы иртәһендә Сталинградтан 120 километрҙа ятҡан Садовый ауылына немец разведкаһының моторлаштырылған отряды бәреп инә. Был юлдың уртаһында урындағы топография Песчанка тип атаған бейеклек ята. Зоя Әлбаева дежур иткән күҙәтеү пункты ла ошонда урынлашҡан була. Немецтар, техникаларын ҡалдырып, йәйәүләп, бейеклеккә ҡарай китә. Атыштар яңғырай. Алыш башлана.

Көндәлек фронт эпизоды тип аталырҙай бәрелештә көстәрҙең күрәләтә тигеҙһеҙлеге күҙгә ташлана - баштан-аяҡ ҡоралланған фашистарға ҡаршы тышҡы күҙәтеү, хәбәр итеү һәм элемтә хеҙмәте (ВНОС) посында дежур итеүсе бер генә ҡыҙ ҡала. Бейеклек - уның берҙән-бер өҫтөнлөгө. Быны фашистар тиҙ арала һиҙеп ала һәм йәшеренеп ятырға мәжбүр була. Байтаҡ ваҡыт үткәндән һуң, тәҙрәһенән яңғыҙ атыу тауышы яңғыраған ышыҡлауысҡа тыл яғынан бер немец һалдаты яҡынлаша. Автоматтан атҡан тауыш яңғырай һәм тынып ҡала. Шул саҡта ғына гитлерсылар дошмандың кем икәнлеген аңлай. Һәләк булған ҡыҙ кәүҙәһе янында карабин ята, тирә-яҡҡа атылған гильзалар һибелгән, ә патрон ҡабында бары тик бер генә - һуңғы - патрон.

Бындай ентеклелек ҡайҙан, тип һорарһығыҙ. Тимәк, быны кемдер күргән һәм Зояның батырлығы тураһында башҡаларҙың белмәүе мөмкин түгел. Эйе, белгәндәр, тик тиҫтә йылдан һуң ғына. Ә батырлыҡ янында хаинлыҡ та булған...

Әйтелеүенсә, Зоя "хәбәрһеҙ юғалғандар" исемлегендә. Башҡортостанға, Зояның ғаиләһе - әсәһе һәм апаһы (атаһы һуғышҡа киткән) йәшәгән 12-се совхозға Лида Стахеева үҙ белдеге менән яҙған "похоронка" килә. Бына ул хат:

*"Һаумыһығыҙ, Зояның хөрмәтле әсәһе! Һеҙҙе минең борсоғом килмәй, әммә командованиеның Зояның үлеме тураһында хәбәр итеү-итмәүе миңә билдәле түгел. Әлбиттә, был бик ауыр хәл, беҙ барыбыҙ ҙа ныҡ ҡайғырҙыҡ, әммә тәҡдир шулай ҡушҡас, бер ни ҙә эшләп булмай. 1942 йылдың 9 авгусы иртәһендә ул сменаға баҫты, сәғәт 11-ҙә хәрби посында һәләк булды. Минең хатымды алыу менән хәбәр итегеҙ. Әлегә һау булығыҙ. Сәләм менән Стахеева Лида".*

"Командованиеның Зояның үлеме тураһында хәбәр итеү-итмәүе миңә билдәле түгел" тигән һөйләмгә иғтибар иттегеҙме? Юҡ, хәбәр итмәгәндәр. Ҡәҙимге элемтәсегә Зояның үлгән көнө һәм хатта сәғәте лә билдәле булғанда, ни өсөн командованиеға был билдәле түгел? Унан да бигерәк, ныҡ һуңлап асыҡланыуынса, күрше постағы ҡыҙҙар Зоя менән бәйләнеш тотҡан һәм һуңғы һулышҡа тиклем уның тауышын ишеткән. Байтаҡ йылдарҙан һуң Садовый ауылындағы 2-се мәктәптең эҙәрмәндәр отряды тикшереүҙәр башлағас, урындағы гәзиттә бына нимә яҙып сығыла:

*"Яҡынлашып килгән немец мотоциклистарын күргәс, Зоя, тейеш булғанса, был хаҡта ротаға хәбәр итә, элемтә линияһы буйынса фашист самолетының осоп үтеүе тураһында белдермә ебәрә һәм: "Ут асам", - ти. Карабиндан атыу һәм автоматтың яуап тауыштары ишетелә. Һәм тағы Зояның тауышы: "Хушығыҙ, ҡыҙҙар, Ватаным өсөн үләм".*

Садовый ауылындағы күҙәтеү посы начальнигы Л. Лесинға һәм батальон командиры В. Бейлихисҡа ошо хаҡта еткермәүҙәре мөмкинме? Әлбиттә, мөмкин түгел. Әммә ни өсөндөр элекке комбатҡа эште "Зояның үлеменә шаһиттар һәм күреүселәр булманы" тип күрһәтергә кәрәк булған. Элекке пост начальнигы А. Лесин, күңелһеҙ һорауҙарға яуап бирергә тура килгәс, бөтөнләй башҡаса һөйләй: *"Ул иртәлә вахтанан бушаған*



*ҡыҙҙар менән колхозға аҙыҡ-түлек алырға киттек, әммә атышты ишеткәс, кире боролдоҡ. Хәл-ваҡиғаның ҡатмарлылығын күреп, мин был эшкә ҡыҫылмаҫҡа ҡарар иттем һәм ут асмаҫҡа тигән команда бирҙем. Һалдаттар менән посҡа барып еткәс* (немец разведчиктары сығып киткәс. - **Л. А.**), *окоп янында Әлбаеваның кәүҙәһе ятҡанын күрҙек... Элемтә тергеҙелгәс, барыһы тураһында ла взвод командирына хәбәр иттем. Ул фельдшер килгәнсе (?!) мәйетте ергә күммәҫкә, посты бөтөрөргә һәм кис еткәс, үҙенә табан хәрәкәт итергә бойорҙо".*

Ҡайҙа бында дөрөҫлөк, ҡайҙа алдаҡ? Бер ниндәй ҙә "фельдшер" килмәгән - уның кәрәге лә юҡ. Ә Зояны ерләргә урындағы ҡатын-ҡыҙҙар балалары менән ҡомло асыҡлыҡҡа күмәкләп килгән. Батырҙарса һәләк булған Зояны "хәбәрһеҙ юғалғандар" исемлегенә индерергә кемдең башына еткән? Хәлде асыҡлау өсөн ваҡиға булған мөхиттә иҫкә төшөрәм. 1942 йылдың йәйенә ул ҡырҡа ҡатмарлашҡан. Бына нимә тип хәбәр итә элекке комбат В. Бейлихис: *"Немец ғәскәрҙәре, Тихорецк - Сталинград тимер юлы буйлап ҙур көстәр менән хәрәкәт итеп, беҙҙең 3-сө рота торған Зимовники станцияһына һуғыш менән килеп етте һәм уға сигенергә приказ бирелде. 11 июлдә батальон штабы (уға ла сигенергә приказ бирелде) торған Элиста алынды. 36-сы күҙәтеү пункты булған 2-се һәм 4-се роталар айырым күрһәтмә бирелгәнсе ҡалдырылды. Сталинградтың һауаға ҡаршы оборонаһы күҙһеҙ һәм ҡолаҡһыҙ ҡала алмай ине".*

Үлемгә кемдең ҡалдырылғанын бойороҡ биреүселәр белә инеме икән? Зоя Әлбаева хеҙмәт иткән "ҡатын-ҡыҙҙар батальоны" ҡарамағына ҡалдырылған 36-сы пост һауаға ҡаршы оборонаның "күҙе" һәм "ҡолағы" булған.

Ә хәҙер ошо һорауға әйләнеп ҡайтайыҡ: Зояның белдермәһен алып та һәм уның тиңһеҙ алышта һәләк булыуына тамам ышанғандан һуң да командирҙарҙың был хаҡта өндәшмәүҙе хуп күреүен ни менән аңлатырға? Бәлки, бында дошман постарының баҫып инеүенән ҡурҡып йәшеренгәндәрҙер? Геройҙарса һәләк булған ҡыҙҙы лайыҡлы ерләргә ваҡыттары булмағандыр һәм уның артабанғы яҙмышы тураһында уйланып торғансы, уны хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләүе еңелерәк булғандыр?

Был фараздың дөрөҫлөгөн аҙаҡтан Садовый ауылында элемтәсе ҡыҙҙар һәм уларҙың етәкселәре менән күрше йәшәгән Матрена Федоровна Колганова һәм уның улы Иван Данилович раҫланы. Ул саҡта малай ғына булған Иван, һуғыш баҫылғас, башҡа бала-саға менән бейеклеккә күтәрелгән һәм улар һәләк булған ҡыҙҙы күреп күмгән. Улар бына нимә һөйләгән: *"Немец разведкаһы ауылға ки-*

*леп ингәс, отряд командиры бинаны ҡалдырып сығырға һәм ышыҡлауыс ҡороу буйынса сара күрергә бойороҡ бирҙе. Үҙ посынан Зоя ғына китмәне һәм тиң булмаған алышты үҙенә алды. Немецтар киткәс, беҙҙекеләр йыйылды. Улар бик ашыға ине. Кәрәк-яраҡтарын арлы-бирле ҡапсыҡтарға тултырҙылар ҙа, ҡараңғы төшөү менән ылауға тейәлеп, Садовый ауылынан сығып киттеләр. Етмәһә, уларҙың командиры, формаһын сисеп, ҡатын-ҡыҙ күлдәге кейеп алды".*

"Ни өсөн Зояны оноттолар?" тигән һорауға яуап шундай. Бик ҡабаланғандар, Зояның ҡаһарманлығы тураһында уйларға ваҡыттары булмаған. Ә уны халыҡҡа еткереүҙең мәғәнәһе юҡ, юғиһә, шунда уҡ уларҙың "фронттағы хәлдә" ҡатнашыуҙары тураһында һорау тыуыр ине.

Бәхеткә күрә, барыһының да намыҫы "йоҡомһорамаған" икән. Шул уҡ Лида Стахеева, башҡа элемтәселәр кеүек уҡ, нимә булғанын асыҡларға тырыша. 1968 йылдан һуң ғына даимиға әйләнгән һәр осрашыуҙа батыр әхирәттәрҙе мотлаҡ иҫкә алалар. Бары тик бер кеше, частың шоферы, һуғыштан һуң Элистала тимерсе булып эшләгән Илья Семенович Погорелов олоғайғас ҡына (тыныс күңел менән үлер өсөн), дөрөҫлөк эҙләп, Садовый ауылына китә. Урындағы мәктәп эҙәрмәндәре, ниһайәт, эҙләнеү алып барыуға этәргес ала. Дөрөҫлөктө йәшерергә теләмәүселәрҙең күрһәтмәләре иҫ киткес зур әһәмиәткә эйә була. Тиҫтәләрсә йылдар үткәс кенә командирҙарҙың арамһыҙ хәтерҙәре арҡаһында онотолоуға дусар булған батыр ҡыҙҙың ҡаһарманлығы тураһындағы дөрөҫлөк тергеҙелә. Ҡомло тауға, Зояның һуңғы бейеклегенә алып барған Садовый ауылы ситендәге урам уның исемен йөрөтә. Зояның окоп ҡомо менән күмелгән мәйете Бөйөк Ватан һуғышы мемориалына күсерелә. Ваҡыт үтеү менән һарғайып бөткән фотографияла донъяға таныш булмаған героиняның ни тиклем саф һәм гүзәл икәнлеге сағыла.

**Л. Әлимамедова.**
**("Труд" гәзитенән, 2004 йыл).**

## Зоя Әлибаева билдәһеҙ герой түгел

"Ә ул бүтән Зоя ине" исемле мәҡәләне ("Башҡортостан", 2004 йыл, 17 ноябрь) уҡығас, ни өсөн Зоя-Зәйтүнә беҙгә өр-яңы сифатта тәҡдим ителә икән, тип аптырап ҡалдым.

Зәйтүнә Әлбаеваның исеме эҙләнеүҙәрем һөҙөмтәһендә миңә бынан егерме йыл самаһы элегерәк билдәле булды. Миңә уның фронттан яҙған хаттары һәм уларға аңлатма ебәрелгәйне. Был хәбәр Стәрлетамаҡ ҡала тарих, тыуған төйәкте өйрәнеү музейынан килгәйне. Бының менән сикләнмәй, 2004 йылдың апрелендә был музейҙа шәхсән булдым һәм ҡаһарман яҡташыбыҙҙың махсус "дело"һы менән танышып, үҙем кәрәк тип тапҡан мәғлүмәттәрҙе күсереп яҙып алдым.

Әлбаевтар элекке Маҡар районынан икәнлеге аңлашыла. Ғаилә Стәрлетамаҡ эргәһендәге совхозда төпләнеп йәшәгән. Зәйтүнәнән ҡала тағы ике ҡыҙ булған. Уларҙың апаруҡ урыҫлашып бөткәнлеге хаттарҙан күренә. Зоя-Зәйтүнәнең хаттары ла фәҡәт урыҫ телендә. Фамилияһы ла шуға үҙгәреш кисергәндер.

Улар йәшәгән урындың, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, эҙҙәре лә һаҡланмаған. Белеүселәр ҙә юҡ. Зоя-Зәйтүнәнең хаттарын музейға тапшырыу ошо хаҡта һөйләй. Тимәк, уның һеңлеләре тыуған-үҫкән төбәкте ташлап киткән, тигән һүҙ. Ҡыҙ балаһың ризығы ҡайҙарға тартҡанын самалап та булмай шул. Тағы шуныһы: кеше ғаилә архивын ирекле көндән архивҡа йәки музейға тапшырмай. Ҡасан да булһа бер кәрәге тейер, ҡулланылышы табылыр тигән ышаныста эшләнгән был эш.

Зоя-Зәйтүнә 1922 йылда тыуған. 1942 йылдың яҙында Башҡортостан ҡыҙҙарынан торған беренсе эшелон составында һуғышҡа үҙ теләге менән киткән. Мәғлүм булыуынса, беҙҙең һылыуҙар Сталинград фронтына ебәрелгән. Бында килгәс, улар элемтәсе, приборсы, медицина хеҙмәткәре һ.б. вазифаларҙа ир-егеттәрҙе алыштыра. Әлбаева иһә тышҡы күҙәтеү, хәбәр итеү һәм элемтә (ВНОС) посында дежур була.

Фажиғә 1942 йылдың 9 августында була. Башта уҡ шуныһы ризаһыҙлыҡ һәм аңлашылмаусанлыҡ тыуҙыра: пост командиры башҡа яугирҙар менән аҙыҡ-түлек йүнәтеү маҡсатында ҡайҙалыр китә, поста ике ҡыҙ ҡалдыра. "Труд" гәзитендә "бер ҡыҙ" тиелгән, дөрөҫ түгел: Әлбаева менән Мурылева ҡала. Һуғышсан бурыс ауыр ҙа, еңел дә түгел, немец самолеттары килә башлау менән штабҡа хәбәр итергә кәрәк. Бер нисә аҙна эсендә эшкә күнегеп өлгөргән ҡыҙҙар, бер ни булмағандай, бурысты теүәл үтәй. Әммә фронтта хәл күҙ асып йомғансы тиерлек тиҙ үҙгәреүсән. Һис көтмәгәндә ауылға немец мотоциклдары килеп тула һәм шундуҡ постағы ике ҡыҙҙы ҡамап ала. "Труд" гәзитендә яҙылғанса, немецтар атыш башламай. Тиле булһалар ҙа, аңлайҙар: күҙ алдында ике йәш ҡыҙ. Теләктәре - уларҙы ҡулға төшөрөү. Шул маҡсаттан фашистар посҡа яҡынлаша. Ошо минутта ҡыҙҙар кем уҙарҙан ут аса, немецтарҙың бер нисәһен атып йыға. Ләкин атыу оҫталыҡтары самалы булғандыр, немец посҡа үрмәләй башлай һәм Мурылеваны әләктереп ала. Оборона тотҡан Әлбаева, нисек кенә тырышмаһын, йыртҡыстарҙы ҡырып бөтөрә алмай. Уны ҡулға алам тип үрмәләгән бер һалдатты автоматы менән йыға һуға. Ләкин немецтарҙың түҙеме шартлай, һәм улар Әлбаеваға тоҡсап атырға мәжбүр була.

Был тарихты йөрәк әрнеүе менән әсенеп яҙған "Труд" хәбәрсеһе хәрбиҙәрҙең һәләк булған Зояны ерләмәүе хаҡында дөрөҫ бәйән итә. Садовое ауылы халҡы батыр ҡыҙҙы әлеге пост урынлашҡан урында ер ҡуйынына тапшыра. Тиҫтәләрсә йыл ғүмер үткәс кенә ауыл Советы туғандар ҡәберлеге булдырыу тураһында ҡарар сығара. Ҡәберлеккә З. Әлбаева ла ерләнә. Ауылды азат итеүҙә һәләк булған ватандаштарға 1972 йылда һәйкәл ҡуйыла. Унда З. Р. Әлбаеваның да исеме алтын хәрефтәр менән яҙылған.

Яҡташыбыҙҙың немец фашистарына ҡаршы көрәштә күрһәткән батырлығы ауылдаштарҙы таң ҡалдыра. Ул йылдарҙа өлкәндәр ҙә, мәктәп балалары ла Зоя-Зәйтүнәнең исемен телдән төшөрмәй. Фажиғәне йәшереп ҡалдырырға тырышҡан рота һәм батальон командирҙарынан айырмалы, ауыл халҡы Әлбаеваның исеме, батырлығы һәм иҫтәлеге тураһында оло хәстәрлек күрә. Ауылдың Әлбаева һаҡлаған урамына һәм мәктәпкә уның исеме бирелгән, Әлбаева тураһында иҫтәлектәр туплана. Уларҙың бер өлөшө Стәрлетамаҡ музейында һаҡлана.

Әлбаеваның яҙмышы мине лә тәрән тулҡынландыра. Был турала "Аҡ аманат - һалдат хаттары" китабына ла ("Китап", 2000 йыл) индерелде. Стәрлетамаҡ ҡала гәзитендә мәҡәлә баҫылды. "Молодежная газета"ға ла биреп ҡарағайным, уңышһыҙлыҡҡа осраным. Мөхтәрәм мөхәррир, беҙ тиражды һаҡлауға булышырҙай яҙмаларҙы ғына баҫабыҙ, тип кире борғас, күңелем нык ҡырылды. Әлбаева тураһында яҙмау мөмкинме? Ошо батырлыҡты уҡыған йәштәр гәзиттән йөҙ бороу кеүек насар хәлгә төшә алырмы?

Тағы шуныһы: комсомолка, ҡурҡыу белмәҫ хәрби ҡыҙ Зоя-Зәйтүнә Әлбаеваның яҙмышы рәссам, шағирҙар иғтибарынан да төшөп ҡалмаһын ине. Өфөлә һәм республикабыҙҙың башҡа район-ҡалаларында ла Зәйтүнә Әлбаева исеме менән аталыр урындар табылыр тигән өмөтөм дә бар минең.

**Фәрит ВӘХИТОВ,**
**республика Хәрби дан музейы ғилми хеҙмәткәре.**
**("Башҡортостан" гәзитенең 2004 йылғы 7 декабрь һанынан).**

## Тарихсынан аңлатма

"Ә ул бүтән Зоя ине" тигән мәҡәләлә 12-се совхоз телгә алына. 1930 йылдың йәй башында ауылдаштарым, малдарын етәкләп, үҙҙәренең йәйләүенә - Әсе Яланға килеп етер алдынан уларҙы: "Был ерҙәр һеҙҙеке түгел, боролоп ҡайтып китегеҙ", - тип ҡоралы кешеләр туҡтата. Ошо йылда НКВД-ға ҡараған 12-се совхоз ойошторолған булған. Бында республиканың көнбайыш райондарынан, башҡа өлкәләрҙән репрессияланғандарҙы һөргөнгә килтергәндәр. Мин белгәндәрҙән Илеш, Саҡмағош тарафтарынан килеүселәр бар ине. Һәләүек йылғаһы башында, совхоздан үрҙәрәк, Әсе Яланда 10-сы холоҡ төҙәтеү колонияһы (ИТК) ойошторола. Әптек ауылы тирәһендә 4-се колония һәм 10-сы совхоз, Ямаш ауылы тирәһендә 11-се совхоз эшләй. Уны урыҫтар Рославль тип йөрөттө. Совхоздар һәм колониялар тимер юлдан алыҫта (иң яҡыны Раевка станцияһы ине) урынлашҡайны. Төрмә халҡы ҡыш урман ҡырҡып, яҙ Һәләүек йылғаһы буйлап уны Стәрлетамаҡҡа ағыҙҙы. Өс совхоз да ит етештереүгә махсуслаша.

Һуғыш алдынан Рәхмәтулла Әлибаев 12-се совхоз директоры вазифаһын башҡарҙы. Уның ҡыҙы Нәркәс (1930 йылғы) менән Этҡол мәктәбендә V класта бергә уҡыным. Нәркәс менән бергә Йыһания, Әнисә, Рәшит тигән уҡыусылар килә ине. Нәркәс - "Ә ул бүтән Зоя ине" тигән мәҡәлә геройы Зоя-Зәйтүнәнең бер туған һеңлеһе. Һуғышҡа тиклем Зәйтүнә Өфөлә сәнғәт училищеһында уҡый ине. Уҡыуҙы тамамланымы-юҡмы икәнлеген белмәйем. Һуғыштан әйләнеп ҡайтмағандарҙың исемлеге 22 томлыҡ "Хәтер" китабында бар. 21-се китапта: "Альбаева (Алибаева) Зайтуна Рахматулловна 1922 года рождения, уроженка Миякинского района, лейтенант. Пропала без вести в июле 1942 г.", - тип яҙылған. (Ҡарағыҙ: Память. Республика Башкортостан. Книга двадцать первая (дополнительная). Уфа. "Китап", 2000 г. С. 544).

1948 - 1949 йылдарҙа мин X класта уҡығанда Әлибаевтар Маҡар районы үҙәге Петровск ауылында йәшәне. Ә Нәркәс һөт заводында лаборант булып эшләй ине. 1950 йылдың яҙында атаһының беҙҙең колхозда район уполномоченныйы булып йөрөгәнен хәтерләйем. Артабанғы яҙмыштарын белмәйем.

**Ғәббәс ЯКУПОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

* * *

Тарихҡа мәғлүм: ир-егеттәр менән бер ҡатарҙан ҡатын-ҡыҙҙары ла яуға баҫҡан ил-дәүләтте еңеү мөмкин түгел. Дошманға ҡаршы ҡаһармандарса ҡорал күтәреү славян ҡәүемдәренән - урыҫ, төркиҙәрҙән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас. Бөйөк Ватан һуғышында ла ошо ике милләттән гүзәл зат вәкилдәре иҫ киткес батырлыҡтар күрһәткәне билдәле. Миҫалға Борис Васильевтың (1924-2013) "Ә таңдар бында тып-тын" тигән пацифистик повеҫын ғына алайыҡ. Унда ла бит бер төркөм ҡыҙҙар фашистарҙың әҙмәүерҙәй диверсанттары йыртҡыслығынан һәләк була. Был әҫәрҙе Ҡытай, Корея һ.б. көнсығыш илдәрендә лә яратып уҡыйҙар икән. Әҫәр буйынса төшөрөлгән фильмдар ҙа Халыҡ-ара кинофестивалдәрҙә мәртәбәле призлар яулай. Үҙәк гәзиттәр ошо повесть нигеҙендә атаҡлы театрҙың балет постановкаһын сәхнәләштерергә әҙерләнеүен яҙа... Ә бит донъялар тыныс түгел. Әле тегендә, әле бында неофашистар, мәкерле террористар яңынан ҡуптара, ҡыҫҡаһы, оло һуғыш уты дөрләмәҫ, тимә. Әйҙәгеҙ, уяу булайыҡ, илебеҙҙе, еребеҙҙе, телебеҙҙе һаҡлайыҡ, милләт-ара, дәүләт-ара, ҡитға-ара татыу йәшәйек!

**Сабир ШӘРИПОВ,**
**яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Үҙенә һағауылдар һайлап алғас, ул төн уртаһына тиклем шундай ҡоторған хәлгә килде һәм үҙе лә, кешенән бигерәк, демонға оҡшай башланы. Был ваҡытта тауыш һәм бейеү үҙгәрә төштө, һәм ен күреүсе, иғтибарлап, бар булған тәҙрәләргә баҡты. Ахырҙа, яман ен-бәрейҙе күргәндәй хәлгә килеп, үҙенең мылтығын алды, маһир уҡсы ҡош атырға барғандағы кеүек, шым ғына тәҙрәгә табан яҡынлашты һәм шул тиклем ҡаты итеп атып ебәрҙе, хатта беҙ һелкенеп киткән башҡорт аласығы аҫтында баҫылып ҡалмайыҡ, тип хәүефләндек. Унан һуң ул үҙенең һағауылдары оҙатыуында, бик ҡаты ҡысҡырып, ҡулында яланғас ҡылысын тотҡан килеш, өйҙән атылып килеп сыҡты һәм, ҡылысын бер туҡтауһыҙ болғай-болғай, Ыҡ йылғаһына тиклем йүгереп барҙы. Уның әйтеүенсә, яраланған ен һыуға төшөп киткән, һәм ул хужаны, шайтан, йәғни ен-бәрей башҡаса уның ҡатынына инеп йөрөмәйәсәк, тип өмөтләндерҙе. Ул ышандырырлыҡ булһын өсөн шайтан ултырған ерҙәге яңы ғына аҡҡан ҡанды һәр теләгән кешегә күрһәтте, уны беҙ ысынлап та күрҙек: ҡандың ни рәүешле барлыҡҡа килеүенә төшөнөү ауыр түгел; ул көрәш башланыр алдынан шайтан килгәнен теүәлерәк белеү һылтауы менән ихатаға сыҡҡайны. Ошо мәсхәрәне тамамлағас, ул шул уҡ төндә ҡайҙалыр ғәйеп булды; иртә менән беҙ ошо ауылда ҡалдырып киткән мәлдә сирле ҡатын да һуңғы һулышын ала ине. Уйлауымса, ошолай итеп ен ҡыуыу күбенһенсә сирлеләрҙең үлеме менән бәйле була; ен күреүсенең иптәштәре менән ҡысҡырышыуы һәм туҡлауынан барлыҡҡа килгән хафаны күҙ алдына килтерһәң, ен-бәрейҙәр тураһындағы уйҙырманың ни өсөн ҡот осорорлоҡ булыуы асыҡлана.

Сирлене яҙмыш ҡарамағына тапшырып, Ҡыҙыл Мәсеттән 45 саҡрымдарҙа булған Вознесенскийҙағы ҡаҙна иҫәбендәге баҡыр иретеү заводына юлландыҡ. Был заводҡа юл Ыҡ йылғаһы буйлап бара. Ул, башҡа Урал йылғалары кеүек уҡ, ташлы һәм үтә шәп ағымлы булып, урманһыҙ бейек тауҙар менән уратып алынған: әммә йылға ағымы ыңғайына Ағиҙелгә яҡынлаша барған һайын, был тауҙар урмандарға байыраҡ була бара. Тауҙарҙың бейеклеге, шулай уҡ Ыҡ йылғаһының бормаланып ағыуы һәм юл ыңғайында уға ҡойоусы бәләкәй генә Мәгреш, Шишимәш (автор Шишимашь тип яҙа, бәлки, был йылғасыҡ Шишмә тип аталғандыр. - **Ред. иҫк.**), Пшәлә, Шыланча йылғалары 46 саҡрым арауыҡта беҙҙе ун ике тапҡыр йылға кисергә мәжбүр итте; ике тапҡыр Күсейөклө (автор Кусеюклю, тип алған, бәлки, Кесе Ыҡлы, тип уйларға кәрәктер. - **Ред. иҫк.**), ун мәртәбә - Ыҡ аша.

**(Дауамы бар).**

# БЕҘ - АЛЛАҺ

## тик үҙебеҙ генә

**Танылған шағирәләребеҙ, Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Зөлфиә Ханнанова менән Лариса Абдуллинаны берләштергән уртаҡ сифат - ил, милләт яҙмышы өсөн борсолоп йәшәүгә бәйле фиҙаҡәрлек. Ларисаның шиғырҙарын уҡып күңел тетрәнеүҙәре кисергәндә, Зөлфиәнең шиғырҙарын уҡып күҙгә йәштәр тығылғанда уларҙың был асылын тағы ла тәрәнерәк аңлайһың. Улар менән әңгәмәне лә тап ошо юҫыҡта ҡорҙоҡ.**

**Кеше үҙ ғүмерендә ауыр хәлдәргә тарығанда ғына башҡа иң бәхетһеҙ көндәрен бәхеткә тиңләй. "Бәхет көслө рухлы кешегә үҙе юл таба" тип әйтелә һинд мәҡәлендә. Бына һеҙҙең ҡарамаҡҡа бәхет нимә ул? Үҙемә килгәндә, миңә бәхетле булыуым мөһим түгел, үҙемде бәхетле итеп тойоуым мөһим...**

**Лариса:** Бәхет - кешеләр уйлап сығарған абстракт төшөнсә. Бөтә кеше лә донъяла философ, ғалим, аҡыл эйәһе түгел бит инде. Шуға ла һәр кеше үҙен бәхетле итеп тойор өсөн шундай гармониялы хәлде уйлап сығара. Ғалимдар хатта "Бәхет адреналины" барлығын иҫбат иткән. Ғалимдар бәхетте мейеләге һоро шыйыҡса менән бәйләргә тырышһа ла, бәхет - ул тойғо, ул йөрәк, күңел менән бәйле. Бәхет, моғайын да, йөрәктең сәскә һымаҡ асылған мәлелер. Беҙ ғүмер буйы шул мәлебеҙгә һыйынып йәшәйбеҙ.

**Зөлфиә:** Килешәм, Лариса, йәшерәк саҡта беҙ һәр бер күңел осошон, күңел күтәрелешен бәхеткә тиңләйбеҙ. Әммә йәшәй-йәшәй ҡәҙимге мәлдәрҙе лә бәхеткә тиңләргә өйрәнәбеҙ икән. Иртәнсәк йоҡонан тораһың, Аллаға шөкөр, һаулығың, эшең бар, балаларың иҫән-һау, һиңә тереҙ булырҙай тормош иптәшең янында - был бәхет түгелме? Бәхет. Йәшәй-йәшәй йәшерәк саҡта күрмәгән бәләкәй генә күренештәрҙе лә баһаларға, бәхеткә тиңләргә өйрәнәһең. Бер көн өндәшмәй генә күҙәтеп йөрөнөм дә, үҙем дә аптырап киттем. Хәләлем минән иртәрәк тороп, сәй ҡайнатып ҡуйған, ихатабыҙға сығып, төндә яуған ҡарҙы көрәп, бер ыңғай этте ашатып ингән. Кеҫә телефонымдың зарядкаһы бөтөп барғанын күреп, шым ғына зарядникка тоташтырып киткән. Мин ҡыҙыбыҙҙың сәсен тарап үргәнсе, сығып, машинаны йылытып, бәләкәсебеҙҙе мәктәпкә алып китте. Бәхтиһән, иртән уянып, эшкә сығып киткән ҡыҫҡа араlыҡта ғына ла ул миңә ҡарата әллә күпме изгелек ҡылып өлгөрә. Ә изгелек ҡылынған ерҙә бәхет тә була. Уны күрә һәм баһалай ғына белергә кәрәк. Ә быға тиклем мин быны ғәҙәти хәл тип ҡабул итә инем бит...

**Былдай ситуация өсөн һиндтарҙың тағы бер мәҡәле бар: "Асыуға асыу менән яуап бирмәүсе кеше үҙен дә, дәғүәсеһен дә ҡотҡара". Белеүебеҙсә, Махатма Ганди ошо принцип менән йәшәгән һәм халҡының азатлығына өлгәшкән. Миңә тағы ла бер аҡыл эйәһенең әйткән һүҙҙәре ныҡ оҡшай: "Абсолют бәхет булмай. Сөнки бәхет ҡошон ҡулына эләктергән кеше уны юғалтмаҫ өсөн бәхетһеҙ борсолоуҙар кисереп йәшәй". Ысынлап та, миллиард һум аҡсаһы булған кеше лә, байлығын юғалтмаҫ өсөн бәхетһеҙ борсолоуҙар кисереп йәшәй икән, ул кеше бәхетле түгелдер. Донъялағы иң сибәр ҡыҙға өйләнгән, иң бай принцка кейәүгә сыҡҡан кешенең дә дәғүәселәре барлыҡҡа килә. Бәхет, бәлки, шөкөр итеүҙер?**

**Лариса:** Шөкөр итеү ҙә бәхет, ул бәхетле мәлдең бер сағылышы, формаһы, йөкмәткеһе иһә - бәхеттән үҙе.

**Зөлфиә:** Элек изге йәндәр, әүлиәләр ауырлыҡһыҙ, еңел генә тормош менән йәшәй башлаһа: "Хоҙай Тәғәлә әллә беҙҙән йөҙөн борҙомо икән?" - тип хафалана башлаған. Ауырлыҡты улар Хоҙай Тәғәләнең һынауы итеп ҡабул иткән. Хоҙай Тәғәлә ундай заттарға тағы ла ҡатыраҡ һынауын ебәргән. Тормош һыҙатлы булыуы менән дә матур, ҡыҙыҡтыр ул. Аҡ һыҙат менән ҡара һыҙат һәр ваҡыт сиратлашып бара, бары тик шул ҡара һыҙатын лайыҡлы итеп үтә белергә генә кәрәк.

**Лариса:** Миллионер ҙа бәхетле булыуы бар ул. Әгәр ҙә ул байлығын хәләл көсө менән табып, дөрөҫ итеп йәшәй белһә. Әгәр ҙә булған мөлкәтен бүлешә белһә, зәкәт итеп түләһә, мохтаждарға сәҙаҡа итеп өләшһә. Шул уҡ ваҡытта үҙенең ярлылығында башҡаларҙы ғәйепле һанап, туҡтауһыҙ дәүләтте, түрәләрҙе һүккән кеше бәхетле була алмайҙыр. Аяғы ла, ҡулдары ла булмаған Ник Вуйнич донъя буйлап кешеләр алдында сығыш яһап, бәхет өләшеп йөрөй. Уның ҡатыны ниндәй һылыу, уға ике бала тапҡан һәм үҙен бәхетле тойоп йәшәй. Аллаһы Тәғәлә ул кешене ергә махсус рәүештә, башҡалар шөкөр итһен өсөн ебәргән төҫлө миңә. Уның йөҙөнән, ҡараштарынан әллә ниндәй илаһи нур бөркөлә. Залда ултырған кешеләр, түҙмәйенсә, уны барып ҡосаҡлап илайҙар. Кешеләр уға ҡарап таҙарына.

**Халҡыбыҙ шағиры Рәми Ғариповтың шундай шиғыр юлдары бар: "Һинең бәхетең һуң кемгә кәрәк, үҙ ояңды ғына ҡайғыртһаң?" Нисек уйлайһығыҙ, халҡы бәхетһеҙлек кисергән мәлдә кеше үҙ ғаилә амплуаһында ғына бәхетле була аламы?**

**Лариса:** Ир кеше булараҡ, Рәми ағайға был һүҙҙәрҙе әйтеүе ҡыйын булмағандыр. Ғөмүмән, ир-ат Ергә, гүзәл заттан айырмалы, бөтөнләй башҡа миссия менән ебәрелгән. Ватан, ил, халыҡ яҙмышы тойғоһо улар өсөн - мөҡәддәс бурыс. Эйе, ҡатынҡыҙға был һүҙҙәрҙе әйтеү еңел булмаҫ ине, әммә беҙ барыбер иң тәү сиратта ғаиләбеҙҙе, балаларыбыҙҙы уйлайбыҙ. Ул хәстәрҙәр үҙенән-үҙе ана шул илдең именлегенә, көндөң аяҙлығына ла барып тоташа инде.

**Зөлфиә:** Ғаиләһендә, ире, балалары янында ҡатын-ҡыҙ бәхетле барыбер ҙә. Сөнки әсә булыу - үҙе бәхет. Шул уҡ ваҡытта халыҡтың күңелендә булған һыҙланыу ҡатын-ҡыҙҙың күңелендә лә сағылыш таба.

**Лариса:** Бигерәк тә шағирәләрҙең күңелендә көслө ул һыҙланыу.

**Ә мин ижадты, шиғриәтте енескә бүлмәйем. Ижадсы йә талантлы, йә талантһыҙ ғына булалыр...**

**Лариса:** Ижад енескә бүленмәй, әммә ғаиләлә әсәй менән атайҙың барыбер ҙә үҙ урыны бар. Билдәле риүәйәттә лә өс ирҙең береһен һайларға ҡушылған ҡатын ирен һайлай һәм ағаһы менән улынан баш тарта. Сөнки ул ире менән ҡалһа, тағы ла бала таба аласаҡмын, тип өмөт итә. Ҡатын-ҡыҙ шиғриәте йәки ир-ат поэзияһы, тип әйткәндә, ҡайһылыр затты күтәреү, икенсеһен кәмһетеү маҡсаты ҡуйылмай бында. "Шағир" һәм "шағирә" тигән атамалар йәшәй икән, уларҙың ерлеге бар. Ана шул "ә" ялғауы балаһы, ғаиләһе өсөн ил именлеген имләү, бәпләү, көсәүҙән барлыҡҡа килгәндер.

**Зөлфиә:** Беҙҙең күптәр һоҡланып һәм көнләшеп ҡарарлыҡ Шәйехзада Бабичтарыбыҙ, Рәшит Назаровтарыбыҙ, Рәми Ғариповтарыбыҙ һәм башҡаларыбыҙ бар. Киләсәктә туған телебеҙҙә ошондай кимәлдә фекер йөрөтөрлөк ижади шәхестәр тәрбиәләү өсөн бөгөн уңайлылыҡтар барыбер аҙыраҡ. Телдең бәҫе төшә икән, милләттең дә бәҫе төшә. Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Астанаға барғас, үҙемдең коллегаһан уларҙа ҡаҙаҡ мәктәптәре күпме булыуын һораным. Коллегам мине аңламаны. Һорауымды тағы ҡабатланым. Шунан ул һорауыма аптырап: "Беҙҙә бөтә мәктәптәр ҙә - ҡаҙаҡ мәктәптәре, уҡытыу рус телендә ойошторолған бер-ике генә мәктәп бар", - тине. Уларҙа барлыҡ фәндәр ҙә ҡаҙаҡ телендә уҡытыла һәм балалар үҙенең телендә фекерләй белә. Ҡаҙаҡтар шундай фекерҙә: тик туған телдә һөйләшкән кешене генә шәхес итеп үҫтереп була.

**Лариса:** Мостай Кәримдең юбилейына килгәнендә ҡаҙаҡ халҡының ҡаһарманы Әбделйәлил Нурпейесов менән аралаштым. Ул: "Минең телемде кухня теле итеп кенә танып, халҡымды далаға сығарып ебәрергә теләйҙәр", - тип һөйләгәйне. Беҙ ҡаҙаҡтарҙан айырмалы рәүештә, Рәсәй Федерацияһының уртаһында ултырабыҙ. Ҡаҙаҡтарҙан өлгө алырлыҡ нәмәләр бар, әммә беҙҙең үҙ ҡаҙаныштарыбыҙ ҙа етерлек.

**Мостай Кәримдең 75 йыллыҡ юбилейына килгәнендә Нурпейесов менән мин дә осраштым. Опера һәм балет театрында барған юбилей кисәһендә "Ете ҡыҙ" бейеүе башҡарылған саҡта ул минән: "Башҡорт бейеүенә дәртлелек, ярһылыҡ, темперамент хас. Ниңә был бейеү бик һалмаҡ һәм ҡыҙҙар ниңә баштарын түбән эйеп йөрөй?" - тип һораны. Мин уға бейеүҙең тарихтағы ҡаҙаҡтар менән булған ваҡиғаға бәйле ҡуйылыуы хаҡында аңлаттым: "Ҡаҙаҡтар ҡыҙҙарҙың табанын ярып ҡыл һалғас, улар нисек итеп йылмайыпкөлөп, дәртле баҫып бейей алһын инде? Уларҙың бит табаны ауырта..." - тигәйнем, ҡаҙаҡ ҡаһарманы тәрән тетрәнеү кисереп, ҡысҡырып ебәрә яҙҙы. "Был - бөйөк ауыртыныу, бөйөк халыҡтың бөйөк сәнғәт юғарылығы. Һеҙҙең интеллигенция шул тиклем ҡөҙрәткә эйә!"- тигән баһа бирҙе ул был бейеүгә. Мин быларҙы нимә өсөн һөйләйем: беҙ башҡаларға һоҡланабыҙ, әммә үҙебеҙҙекен күрмәйбеҙ. Ҡаҙаҡтар үҙҙәренең балаларын, йәштәрен үҫтереү өсөн замандса шарттар тыуҙырған, тибеҙ. Бик хуп, афариндар! Әммә бөйөк сәнғәт, бөйөк әҙәбиәт яҡшы шарттарҙа барлыҡҡа килмәй. Бөйөк сәнғәт өсөн, Нурпейесов әйтмешләй, бөйөк һыҙланыу кәрәк. Һеҙ телгә алған Шәйехзада Бабич, Рәшит Назаров, Рәми Ғарипов шул һыҙланыуҙан яралған. Шулай түгелме?**

**Зөлфиә:** Әхмәр, һин беҙҙе дөрөҫ аңла. Беҙ һис тә, әйҙә, ҡаҙаҡтар һымаҡ булайыҡ, тип өндәмәйбеҙ. Улар Рәсәй менән мөнәсәбәттә бөтөнләй икенсе яҙмышлы халыҡ. Беҙ бында бер-беребеҙгә, йәш быуынды тәрбиәләүҙә иғтибарлыраҡ булайыҡ, тип әйтергә теләйбеҙ. Төньяҡ-көнсығыш райондарының бер ауылынан ғына миҫал килтерәм. Тап-таҙа башҡорт ауылы. Һәр ғаиләлә биш-алты бала үҫкән, улар барыһы ла ауылдағы башҡорт мәктәбендә уҡыған, башҡорт телен һәйбәт белә ине. Улар буй еткереп, күрше Силәбе өлкәһенә (яҡын бит!), йәки баш ҡалабыҙ Өфөгә уҡырға йәки эшкә китте, донъя ҡороп, балалар үҫтерҙе. Ул балалар ниндәй телдә һөйләшә, тип уйлайһығыҙ? Тап шулай, рус телендә! Башҡорт телендә иркен аралаша алғандары бармаҡ ме-



**ЗӨЛФИӘ ХАННАНОВА:**

*Илдең, халыҡтың күңелендә булған һыҙланыу ҡатын-ҡыҙҙың күңелендә лә сағылыш таба...*

нән генә һанарлыҡ. Бына ошо күренеш, ҡыҙғаныςҡа ҡаршы, бөгөн һәр өй һайын. Үҙ ҡулдарыбыҙ менән балаларыбыҙҙы халҡыбыҙ өсөн дә, башҡа милләттәр өсөн дә сит-бауыр итеп тәрбиәләйбеҙ. Хәҙер хатта ауылдан килгән балаларҙың да туған телдәге телмәре насар үҫешә. Беҙ ҡала хакимиәтенә ҡайһы бер бүлектәргә белгестәрҙе эшкә алғанда ике телдә лә ижади эш яҙҙыртып ҡарайбыҙ. Сөнки беҙгә ике дәүләт телен дә һәйбәт белгән белгестәр кәрәк. Ни ғәжәптер, хәҙер ауылдан килеүсе ҡайһы бер йәштәр ҡала йәштәренә ҡарағанда ла башҡортса насар фекерләй.

**Лариса:** Беҙҙең халыҡта мал тип мөкиббән китеү, донъя ҡыуыуға ынтылыу ул тиклем юҡ. "Ниңә беҙҙең халыҡта финансистар, иҡтисадсылар, банкирҙар күп түгел икән?" тип әйтергә яратабыҙ. Эйе, улар беҙгә лә кәрәк. Килеп сыҡһалар, бик һәйбәт. XX быуат башында уҡ был хаҡта мәғрифәтсе, затлы мулла Сафуан Яҡшығолов та әйтеп дағы хозур донъяны тапмаймы икән?

**Зөлфиә:** Барыбыҙ ҙа унда ҡайтарыласаҡбыҙ, әммә унда нисек барып баҫыуыбыҙ ҙа икенсе мәсьәлә. Сөнки хәҙрәт ҡатындары булған беҙҙең өләсәйҙәребеҙ бер-берећенә ҡунаҡҡа йөрөшкәндә: "Әхирәт ғазаптары шул тиклем ауыр тип әйтәләр. Ҡылған ғәмәлдәребеҙ өсөн Хоҙай Тәғәлә алдында нисек яуап бирербеҙ икән?" - тип илашып ултырыр булғандар. Олораҡ апайҙарым уларҙың ни өсөн илауҙарының сәбәптәрен белә алмай аптырар булған. Улар бер ҡасан да намаҙҙарын ҡалдырмаған, аборт юлы менән балаларының ғүмерҙәрен ҡыймаған, ураҙалар тотҡан, кеше йәнле, ихлас заттар булып та, яуап көнөнән ҡурҡа торған булған. Хәҙерге заманда иһә, динде лә һаҡлау, диндә лә ҡалыу бик ауыр. Бөгөн дин тотҡан кешегә шикләнеп ҡарайҙар. Кешелә кешегә ҡарата яратыу кәмене. Хатта магазиндарҙа ла яҡшыраҡ кейенгән кешеләр менән яҡшы, аламараҡ йем (көлә). Берәүҙең ире, берәүҙең бисәһе бар икән, тип көләм дә ҡуям. Әммә форсат сыҡҡанда, йылы һүҙ әйтеп китке килә әле ул. Минең Айрат, ҡәйнәмдең икәүҙән берҙән-бер булып ҡалған улы булыуына ҡарамаҫтан, үҙе теләп армияға киткән. Ә бит ул бармай ҙа ҡала алыр ине. Әрмегә алыныу менән, 1996 йылда, беренсе чечен һуғышына барып ингән. Ҡаты яраланып, контузия алып, хәрби госпиталгә барып эләккән, минең бәхеткә тере ҡалған. Ул һауа десанты ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән. Малайҙарыбыҙҙы егеттәрсә тәрбиәләргә тырыша. Ҡайһы ваҡыт мин уға: "Айрат, был беҙҙең рота түгел, ғаилә бит", - тип әйтеп ҡуям. Айрат китап уҡырға ярата. Мин яҙған шиғырҙарҙы, мәҡәләләрҙе уҡып, баһа бирә. Әгәр ҙә кәрәк булһа, машинаһына ултыртып, Башҡортостандың теге осондағы осрашыуға алып барып еткерә. Ғилман Ишкининға арналған "Ҡош юлы" байрамына ғаиләбеҙ менән барҙыҡ. Ул Ғилбурҙа - өс, Дәүләкәндә - алты, Күгәрсендә дүрт тапҡыр булдым. Был ваҡытта балаларҙы ул ҡараны. Айрат тағы ла урыҫ телендәге китабыма спонсор табып, үҙе сығарҙы. Бәй, һанай китһәң, матур яҡтары күп икән дә, нишләп иҫемә төшөрмәй йөрөйөм икән уны!

**Зөлфиә:** Айбулат та әсәһенең берҙән-бер улы. Һәр ваҡыт уның әсәһенә ҡарата булған мөнәсәбәтенә һоҡланып ҡарайым. Ҡәйнәм менән ҡайным улдарына олоно - оло, кесене кесе итә белергә өйрәтеп, матур тәрбиә биргән. Минең әсәйемә лә Айбулат ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте. Әсәйем һуңғы көндәрен беҙҙең ғаиләлә үткәрҙе. Ҡәҙерле кешемде тәрбиәләүҙә Айбулат, медик булараҡ та, ир һәм кейәү булараҡ та ҙур ярҙам күрһәтте. Бының өсөн мин уға ғүмерем буйы рәхмәтлемен.

"Бер кешене үлемдән ҡотҡарһаң, тотош ғаләмде ҡотҡарғандай сауапҡа өлгәшерһең", тиелә бер хәҙистә. Балалар клиникаһында эшләгәс, уға көнөнә әллә быҙҙы ла эшкә өйрәтте. Илгиз улыбыҙҙың атаһы һөнәрен һайлауы ла күпте һөйләйҙер. Ҡыҙҙарыбыҙ Гүзәл менән Әминәгә шул тиклем наҙлы Айбулат, уларҙы иркәләп, яратып ҡына үҫтерҙе. Үҙемә килгәндә, әгәр ҙә ул янымда булмаһа, көйһөҙләнгән саҡтарымда рухымды күтәреп, нығытып тормаһа, шундай яуаплы вазифала эшләй алмаҫ инем.

**▸ Әңгәмәне бәхеттән башлағайныҡ, мөхәббәткә лә килеп еттек. Ниндәй көс-ҡөҙрәткә эйә һуң ул был тойғо? Яратыуҙы ғына мөхәббәт тип әйтеп буламы? Тарихтан белеүебеҙсә, "Алтын Урҙа" империяһының барлыҡҡа килеүе нигеҙендә мөхәббәт тойғоһо ята. Был тарих Темуджиндың меркеттәрҙән һөйөклө ҡатыны Бүртәне яу менән кире ҡайтарыу ваҡиғаһына бәйле. Тарихта бындай миҫалдар бихисап.**

**Лариса:** Мөхәббәт донъяларҙы алға этәрткес тә, емерткес тә көскә эйә. Иң оло мөхәббәт - Аллаһы Тәғәләгә мөхәббәт икәнлеген иҫләһәк, барыһы ла үҙ урынына ултыра. Хәҙер беҙ шулайыраҡ йүнәлештә фекер йөрөтөргә ынтылған йәштәбеҙ. Минеңсә, атай-әсәңә, балаларыңа, иреңә, кәләшеңә, ватанға, милләтеңә мөхәббәт оло мөхәббәткә илтеүсе һуҡмаҡтар ғына.

**Зөлфиә:** Бер мәл Айбулат менән һөйләшәбеҙ. "Һин мине яратаһыңмы?" - тип һорай ул. "Яратам", тием. "Нимә өсөн яратаһың инде?" - ти ул тағы ла. "Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн яратам", тием. Ул шул тиклем аптыраны, шулай ҙа яуабымдан ҡәнәғәт ҡалды.

**Лариса:** Оло мөхәббәткә ынтылғанда ғына кешелә мәрхәмәтлек тойғоһо уяналыр ул.

**Зөлфиә:** Ғүмер буйы ярата һәм яратыла алмаған йәки булмаһа, үҙ-үҙенә генә һоҡланып йәшәгән кешеләр ҙә була. Баштараҡ, Аллаһы Тәғәләнең хозурында булыу - бәхет асылы тигәнерәк фекер әйткәйнек. Беҙ һәр ҡайһыбыҙ, һәр ваҡыт Уның хозурында, бары тик үҙебеҙ генә Уның хозурында булыуыбыҙҙы онотоп ебәрәбеҙ. Ә бит Ул беҙҙе бер ваҡытта ла күҙ уңынан ысҡындырмай...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

# ХОЗУРЫНДА,

## Уны күрмәйбеҙ

ҡалдырған. Тик беҙ нимә эшләнек һуң шулар тормошҡа ашһын өсөн? Беҙҙең халыҡтың да үҙ йәшәү миссияһы барҙыр ул. Әйҙә, әйтһендәр, башҡорттар бейей, башҡорттар ҡурай тарта, тиһендәр, миңә ҡалһа, беҙ нәҡ шул юл менән һаҡланып ҡалғанбыҙ һәм кешелектең дә рухиәтен һаҡлап ҡалырға тырышабыҙ. Халҡыбыҙ рухиәт, иман, илаһиәт һағында тора кеүек миңә. "Урал батыр" эпосында был хаҡта: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ" тип әйтелә. Бер риүәйәттә әйтелгәнсә, донъялыҡ менән хушлашҡан атай кеше улына үлгәндән һуң кеҫәләрен ҡарарға ҡушып китә. Улы уның төрлө кеҫәләренән аҡсалар таба, бер кеҫәһендә "әммә мин быларҙың бер тинен дә үҙем менән тегендә алып китә алманым" тигән яҙыу таба. Беҙ Хоҙай ҡаршыһына күңелебеҙ менән барып баҫабыҙ бит. Бәлки, шуға әҙерләнәбеҙҙер инде...

**▸ Бәлки, ҙур мәғәнәһендәге бәхет Аллаһы Тәғәләнең хозурына барып баҫа алыуҙалыр? Кеше донъяға тыуғас та, әсә ҡарынындағы иң бәхетле, бер ниндәй проблемаһыҙ тормошон юғалтыу ҡайғыһынан илай, тиҙәр. Артабан кеше ғүмер һөргән сағында шул юғалтҡан ожмахын эҙләй, уны байлыҡта, матурлыҡта күрергә тырыша, аҙаҡ ғүмеренең аҙағында бар эҙләгән бәхете әсәһенең ҡарынында ятҡан сағы икәнен аңлай, тик бик һуңға ҡала.**

**Лариса:** Миңә ҡалһа, ул Аллаһы Тәғәлә хозурына барып баҫҡас та, шул уҡ әсәһе ҡарынынкейенгәндәр менән тупаҫыраҡ һөйләшәләр. Ә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе донъяға яратып яралтҡан. Һине кеше итеп яралтҡан икән Хоҙай, бөтә кешегә лә, милләтенә, социаль хәленә ҡарамай, тигеҙ итеп ҡарарға тейешһең.

**▸ Мин был хаҡта яҙғаным булды. Бер районға командировкаға барғанда беҙҙе оҙатып йөрөүсе татар милләтле бер ҡатын сәбәпле лә, сәбәпһеҙ ҙә бер туҡтауһыҙ ирен маҡтаны. Өс көн һуҙымында ул беҙҙең күҙ алдында идеаль ир образын тыуҙыра алды: оҙон буйлы, киң яурынлы, мөһабәт кәүҙәле, ҡара сәсле, ҡара мыйыҡлы, эсмәгән-тартмаған, ярҙамсыл, ҡулынан бар эш килгән, кеше йәнле бынамын тигән ир! Командировка һуңында ул ҡатын беҙҙе сәй эсергә өйөнә алып ҡайтты. Шунда беҙ уның хәләл ефетенең тыуҙырған образының нәҡ киреһен күрҙек. Нисек кенә булмаһын, миндә ул ҡатынға ҡарата һоҡланыу тойғоһо уянды. Ни өсөн тигәндә, ирен башҡалар алдында насарлап һөйләгән ҡатын балаларының юлын яба, йәғни насар атаһына оҡшаясаҡ балалар карьера буйынса үрләй алмаясаҡ, һәр хәлдә, башҡалар быға булышлыҡ итмәйәсәк. Беҙ, башҡорт ирҙәре һәм ҡатындары, был йәһәттән һүҙҙәргә һаранырaҡбыҙ. Ҡыҙҙар, мин һеҙгә, форсаттан файҙаланып, ирҙәрегеҙҙе маҡтарға мөмкинлек бирәм. Маҡтауҙан кеше үлмәй ул, аҡыллы итеп маҡтаһаң, боҙолмай ҙа.**

**Лариса:** Былай үҙем шәхестәр, билдәле кешеләр хәләл ефеттәрен маҡтай башлаһа, өнәп етмәманды бик яҡшы белә ине. Ул минең күңел талаптарымды бик тәрәндән тоя. Мин үткән Әҙәбиәт йылында ғына 36 тапҡыр командировкаға барҙым. Шул иҫәптән Ҡаҙанда - ике, Ырымкүпме операция яһарға тура килә. Ул үҙ коллективында бик ихтирамлы белгес. Айбулат балта эшенә лә оҫта. Әле йәшәп ятҡан өйөбөҙҙө лә ҡайным, ҡәйнәм ярҙамында үҙе төҙөнө, улы-

***ЛАРИСА АБДУЛЛИНА:***

*Бигерәк тә шағирәләр күңелендә көслө ул Ил, милләт өсөн һыҙланыу.*



**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Баҫмабыҙҙа "Заман башҡорто" тигән рубрика асып, милләтебеҙҙең күптәргә таныш аҫыл ул һәм ҡыҙҙары, уларҙың йәшәйеш һәм хеҙмәт өлгөһө тураһында тағы бер ҡат һөйләргә булдыҡ. Рубриканы 7-се һанда арҙаҡлы шәхесебеҙ Рәшит Шәкүр тураһында һөйләүҙән башлағайныҡ: башҡорт донъяһындағы һынылыш - асылыбыҙға, туған телебеҙгә, рухи тамырҙарыбыҙға йөҙ бороу тап Рәшит ағайҙан, уның быуынындағы башҡа шәхестәрҙән башлана бит.**

**Гәзит уҡыусыларға шундай үтенесебеҙҙе еткерәбеҙ: "Заман башҡорто" тип ошо рубрикала һөйләүгә тағы кемдәр лайыҡ, тип уйлайһығыҙ? Әйткәндәй, рубриканы Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай алып бара.**

***✓ Солғап алды бит күңелен бынау ҡарасман әзмәүер. Ҡарағусҡыл йөҙөн, ҡаш аҫтынан һөҙә биреп ҡарауын, ирәбе йылмайыуын, яурын, беләк мускулдарын уйнатып ҡайырып эш эшләүен күҙ алдынан мәңге лә юя алмаҫ кеүек.***



Миләүшә КАҺАРМАНОВА

# АЛДА ҒҮМЕР БАР ӘЛЕ

ПОВЕСТЬ

* * *

– Богдан Радионович, ҡалаға сығып килергә рөхсәт итегеҙ әле, - Булат машина ишегенән табиптың башы күренеү менән осоп ҡунды.

- Ни йомош? - табип сығып баҫып салбар балаҡтарын ҡаҡҡыланы.

- Эшем килеп сыҡты, ала торған нәмәләр бар.

- Миңә әйтеп ебәр, иртәгә киләм бит.

Егет бер аҙ албырғаны. Нимә, уға ышанмайҙармы әллә хәҙер?

- Ҡасып китер тип уйлайһығыҙмы? - вайымһыҙ көлгән булды үҙе.

- Юҡ, уйламайым, йомаҡ йәшергәнеңә генә әйтәм, - Богдан да һыр бирмәй.

Аптырағас, егеткә бөтөнләй уйланылмаған хәбәргә төшөп китергә тура килде.

- Йәшерене юҡ, Сафияға тәҡдим эшләргә уйлайым да... Шуға берәй иҫтәлекле нәмә ҡарармын тигәйнем.

Уның ситкә ҡарап шулай мығырлауына хайран булып ҡарап ҡалды доктор. Ахыр саҡ телгә килде:

- Килештегеҙҙәме?

- Юҡ, ул белмәй.

- Улайһа, нисек була инде?

- Беҙҙә, мосолмандарҙа, ҡыҙҙарҙан артыҡ һорап тормайҙар ул, - егет үҙ тапҡырлығына үҙе шат.

- Һуң, Софья иртән ҡайта бит.

- Беләм. Шуға бөгөн өлгөрәйем, тигәйнем. Һуңынан сыҡҡас, үҙем барып табыр инем. - Унан инәлә биреп өндәште, - рөхсәт ит, ә, һуңғы үтенес.

* * *

Ҡағыҙҙары өҫтөнә эйелеп әллә уҡып, әллә уйланып ултырған Сергейҙы ҡапыл сыңлаған телефон тертләтте. Ошо бер нәмәнең тауышын үҙгәртмәйҙәр, йәнгә тейеп тазылдай. Ынтылып трубканы алды ла ҡырҡыу өндәште:

- Да!

- Алло! - теге яҡтағы бер аҙ тынып торҙо.

Сергейҙың түҙеме етмәне:

- Тыңлайым!

- Миңә Сергей Колесников кәрәк ине, - өндәшеүсенең акценты һиҙелә, күрәһең, икенсе милләттән.

- Баш тәфтишсе Колесников, кем менән һөйләшәм?

- Мин - Булат, санаторийҙан...

Ике ир сәғәткә яҡын ҡаршылағы ашхана өҫтәле артында һөйләште, унан тәфтишсе кабинетында карталар һыҙҙы, план төҙөнө. Кәрәк-яраҡтар биреп Булатты оҙатҡас, Колесников рапорт менән етәксеһенә юлланды, уға операцияға рөхсәт алырға кәрәк ине.

* * *

Сафия оҙата сығыусыларға ҡарап баҫты. Ҡайтыу шатлығы юҡ ине уның һурынҡы аҡ йөҙөндә. Йәшкел-зәңгәр күҙҙәре лә ситлектән иреккә сығырға ҡурҡҡан ҡошсоҡтоҡолай ҡарай. Уймаҡ ирендәре генә дерелдәй биреп йылмайған була. Бына ул күнгән зарлы ҡарашын алдындағыларға һирпелдереп уҙып Булатта туҡтатты. Тегеһе баш һелкете генә. Илап ебәреүҙән саҡ тыйылып ирендәрен тешләне ҡыҙ. Һөмбаш, йүнләп хушлаша ла белмәй. Әллә нимә булды уныһына һуңғы мәл, йә ихласлап һөйләшмәй, йә бөтөнләй күренмәй. Бығаса ҡайһы яҡҡа боролһа ла ҡаршыһында торор ине, әле тотоп алырлыҡ түгел. Ысынлап араларында бер нәмә лә була алмаҫын аңлауымы был, әллә үҙенә тиң түгеллеген аңғартыуымы...

Ауыр уйҙар менән машинаның артҡы урынына инеп ултырҙы һәм үтә күренмәҫен белһә лә тәҙрәгә ҡалҡынып ҡараманы Сафия. Ҡыйын ине уға, бик ҡыйын ине. Күпме ҡаршы тороуына, тартышып сәбәләнеүенә ҡарамаҫтан, солғап алды бит күңелен бынау ҡарасман әзмәүер. Ҡарағусҡыл йөҙөн, ҡаш аҫтынан һөҙә биреп ҡарауын, ирәбе йылмайыуын, яурын, беләк мускулдарын уйнатып ҡайырып эш эшләүен күҙ алдынан мәңге лә юя алмаҫ кеүек. Һуңғы ваҡытта әллә ниндәй уй етмәҫ хыялдарға бирелер, ләззәтле уйҙар диңгеҙендә йөҙәр булып китте үҙе лә. Имеш, Булат уға сәскәләр тотоп һөйөүен белдерергә ингән. Имеш, етәкләп туғандары янына алып ҡайтҡан, бығаса егет һөйләгәндәрҙән генә белгән апаһы, ҡустыһы бергәләшеп өҫтәл артындалар, Сафия уларға сәй яһап эсерә. Имеш, Булат уға никах балдағы кейҙерә...

Йөрәге туңып килгәйне бында, әлеге шул йөрәге ҡанһырап ҡайтырға сыҡты. Ҡайтырға тип... Богдан Радионович уны ҡалалағы икенсе приютҡа күсерә. Уҡыуыңды тамамларһың, эшкә урынлашырһың, ти. Тик ҡалайтып был яңғыҙлыҡҡа күнергә...

Машина артынан тимер ҡапҡалар сыйылдап ябылыу менән Булат ағас йышыу оҫтаханаһына ашыҡты. Инеп ишеген япҡас та таҡталар аҫтынан тоҡ һөйрәп сығарып, ҡабаланып эсендәгеләрен бушатты. Башта бронежилет өҫтөнән махсус костюм, аяҡтарына уңайлы кроссовкиҙар кейеп, пистолет магазинын тикшереп салбар ҡайышына ҡыҫтырҙы ла, һарай артындағы һурылған таҡтаны шылдырып, тышҡа сыҡты. Был юлды ул кисә төндә бер ҡабат үтһә, уйында мең ҡат ҡабатлаған инде. Шунлыҡтан алан-йолан ҡарамаҫтан, йәнфарман ағаслыҡтарға ҡарай йүгерҙе лә, ҡоймаға етәрәк бейек ҡарағастың аҫҡы ботағына ырғып һикереп тотоноп, тейен етеҙлегендә өҫкә үрмәләне. Унан күҙ йомоп аҫҡан арала икенсе яҡҡа һикереп төштө. Сүгәләгән килеш бер секунд ҡына йүнәлешен самалап алғас, тороп ике тау араһынан һуҙылған үҙәк буйлап сапты. Уға өлгөрөргә, машина һыртты урап сыҡҡансы туралап алдан төшөргә кәрәк.

Арттағы пассажирының әбәүелеп килә торғас, ҡолап уҡ йоҡлап китеүен аңғарған Богдан үҙе лә ойоп алырға булып күҙҙәрен йомдо. Бер аҙ ял кәрәк, ике-өс сәғәттән оҙайлы операцияға баҫасаҡ. Яңғыҙына әллә нисә ағзаны айырып алаһы, урынлаштыраһы бар. Шулай ҙа хеҙмәте емешенә торошло. Инде саҡ ҡына, саҡ ҡына түҙгәндә. Ошонооһон һәм һуңғыһын... яҡшы хаҡ менән ебәргәндә. Унда ҡалғандарының артыҡ баһаһы юҡ. Башҡа был эшкә тотонмаҫ. Яңы тормош башларға кәрәк. Өйләнергә, балалар үҫтерергә. Юғиһә, бөтөнләй нервыһы бөттө. Һуңғы айҙар үтә лә ҡатмарлы булды. Бынау басурман килеп юлығып әллә ниндәй шомдарға һалып бөттө бит, сәстәре ағара яҙҙы. Әллә берәй нәмә һиҙә мәлғүн. Күҙгә күренмәҫ януарға ау ҡорған һунарсы кеүек йөрөй, ситкә ҡарап торғанында ла күҙ ҡойроғо менән һине тота һымаҡ. Һәр хәлдә уның янында үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй Богдан. Ҡарашы елек майына тиклем үткәндәй, уйҙарын сығарып тетеп һалғандай. Ярай, ярааай... берәй аҙна йөрөп ҡал әле, һунар...

Машина ҡапыл туҡтауҙан башын алғы тәҙрәгә бәрә яҙҙы Богдан. Сәбәләнеп шоферына екерҙе:

- Күҙең сыҡҡанмы?!

Тегеһе алдына ҡарап ҡатҡан. Күҙен күтәрһә - ҡаршыла ике ҡулын алға һуҙып... басур... Булат тора. Ҡулында - пистолет.

- Сығығыҙ! Ҡулдарығыҙҙы мин күрерлек итеп күтәреп сығығыҙ! - эстәгеләр һаман шаңҡып ултыра бирҙе. Тыштағы машинаның капотына типте - һелкенеп киттеләр. - Сығығыҙ тинем!

Богдан водителенә ултырғыс аҫтындағы автоматҡа ымланы. Тегеһе ҡоралды бер ҡулы менән эләктереп ишекте киң аҫҡан булды ла, ҡапыл тәгәрәп сығып тәтегә баҫты:

- Та-та-та-татт-тат-тат!

Урман, тау-таштар ҡайтауз итеп яңғыратты:

- Тат-тат-та-а-а!..

Ҡарағай олонона ышыҡланып өлгөргән Булат, ҡоралын ташлап ҡаса башлаған әҙәмгә төбәп атмаҡсы булып пистолетын күтәреп төҙләгәйне, ҡапыл беләгенең хәле бөтөп ҡулы аҫҡа һәленде. Ҡараһа, костюмы яурын тәңгәленән тишек, ул арала эстән ағып килгән ҡан бармаҡ остарынан һарҡыны. Яраланған ахыры, ҡалай беленмәгән дә...

Бөтөн был бәрелеште быяла аша ҡарап ултырған Богдан ҡулын күтәреп һаҡ ҡына машинан сыҡты. Ошонан башҡа сара юҡ ине уға.

- Булатик... Булат, братишка... Ни булды ул был, ә?..

Булат алға атланы.

- Булат, братишка, әйҙә килешәйек. Мин һиңә күп аҡса бирә алам! Ғүмереңдә лә күрмәгәнсә күп!

- Машинанан ҡырғараҡ кит!

Богдан егеттең әйткәнен йәһәт үтәне. Булат барып артҡы ишекте иҫән ҡулы менән һелкә тартып астып, үле шикелле ятҡан ҡыҙҙы һөйрәп сығарҙы һәм үләнгә һалып пульсын тикшереп ҡараны.

- Булатик, һин нимә? Ошо ҡыҙ өсөнмө? Был бит сәйнәп төкөрөлгән. Мин һиңә ҡыҙҙарҙың әллә ниндәйҙәрен табып бирә алам, Булатик!

Егет ҡыҙҙың сикәләренә һуҡҡыланы, елкәһе аҫтына усын тығып башын күтәрергә итте:

-Сафия! Сафия, ишетәһеңме мине?!

- Ишетмәй, ул клиник үлем хәлендә, үҙ аллы иҫенә лә килә алмаясаҡ, - Богдан зәһәр йылмайҙы, - әйҙә ваҡытты юғалтма, машинаға кире һал да минең ҡалалағы клиникаға барайыҡ. Ярҙам итәсәкмен - ышан.

- Һиңә былай ҙа аҙ ышанманыҡ инде. Беҙ хәҙер... - Хәбәрен ослай алманы, артынан Богдандың ағас киҫәге менән киҙәнгәнен шәйләп өлгөрөп һау беләге менән ҡапланды ла, теге сәбәләнгәнсе аяҡ салып ҡолатты. Ирҙәр йән тәсмәнгә көрмәкләшеп китте. Икеһе лә кәүҙәле, икеһе лә көслө, әммә яралының көсәнгән һайын шәберәк аҡҡан ҡаны үҙе менән бергә хәлен дә ала. Быны икеһе лә аңлай. Богдан ваҡытты һуҙырға, Булат өлгөрөп ҡалырға теләне. Дошманының хәлен яҡшы тойомлаған табип уның яралы яурынын төйҙө, әлегә ауыртыу тоймаған организмды шок хәленән сығарырға тырышты. Шулай булғанда егетең һыңар ҡулын ҡыбырлата ла алмаҫ ине. Булат та бына-бына хәле мөшкөлләнерен белеп, бар таҫылын, ажарлығын һалды. Бына ул өҫтөндәге кәүҙәне тубығы һәм йоҙроғо ярҙамында һелкеп ташланы ла, өҫтөнә ырғып беләге менән муйынына баҫты. Тегеһе күҙҙәре һытылып сығырҙай булып баҫымдан ысҡынырға маташты. Бөтә кәүҙәһе менән, бармаҡтары менән ер тырнаны, йөҙөндә ҡан тамырҙары күгәреп бүртте, ауыҙы күперҙе. Хәле бөтә барғанын тойған Булат беләгенә нығыраҡ ятты. Аҫтағы кәүҙә тағы берике тыпырсынды ла тынып ҡалды. Уның иҫен юйғанын аңлаған егет тороп ауа-түнә ҡыҙ янына тәнтерәкләне. Уға Сафияһын ҡотҡарырға кәрәк.

Егет ҡыҙҙы күкрәгенә ҡыҫып тотоп, көсәнеп тороп баҫты. Һәр аҙымы ғазаплы көс, әрнеү менән бирелде уға. Ҡайҙа? Ҡайҙа был Сергей?! Нишләп һаман килеп етмәй? Карта төшөрөп, засада ҡороу урынын билдәләгәйнеләр бит. Нимә тотҡарлай уларҙы?

Урман юлы буйлап һуңғы көсө менән тәнтерәкләгән егет томанлана барған ҡарашын офоҡ һыҙығынан алманы, үҙе әллә иҫендә булып, әллә буталып бер үкте һамаҡланы ла һамаҡланы:

- Саф-фыя, ҡарале, алда ғүмер... бар ә-әле... Саф-фыя... ҡар-рал-ле... Сафы-ыя... Саф-фыя... ғүме-ер... бар...әле...

Аҫтан ғына яман тарылдап вертолет осоп үтте, ҡаршы уба артынан һыҙғырып килгән полиция машиналары пәйҙә булды.

- Саф-фы...фыя... Саф-фыя... ҡара... ле....

**(Аҙағы. Башы 1-9-сы һандарҙа).**

БЕҘ - ИНТЕРНЕТ ДОНЪЯҺЫНДА



**"Бәйләнештә" сайтында бынан дүрт йыл элек асылған "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" төркөмө бөгөн 17 меңдән ашыу кешене берләштерә. Унда гүзәл зат ҡына түгел, ир-егеттәр ҙә күренгеләй һәм үҙҙәренең тос фекерҙәре менән бүлешә. Бөгөн төркөмдөң генә түгел, башҡорт телендә "һөйләшкән" интернет селтәренең агинәйе, өләсәһе Гүзәл Рамазан ҡыҙы СИТДИҠОВА менән әңгәмәне хәтирәләрҙән башланыҡ.**

# ИНӘ ҠОРТ КӨСЛӨ БУЛҺА,

## умарта көсле була

**➔ Төркөмдө ойоштороған ваҡытта ниндәй маҡсаттарҙы күҙ уңында тотҡайнығыҙ һәм бөгөн ошо өмөттәрегеҙ аҡланды тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Төркөмдө асҡанда виртуаль мөхиттә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын туған телдәге бер ҡорға берләштереүҙе күҙҙә тотҡайным. Унан һуң, милләттәштәр бөгөн, таралған тарылай һибелеп, ҡайҙа ғына йәшәмәй! Ситтә йәшәгәндәрҙең дә тыуған еренән кендеге өҙөлмәһен, үҙе генә түгел, балалары ла туған мөхиткә инеп китһен өсөн ошондай ҡор кәрәк тип һананым.

Нинә төркөмөн ярҙамында аҡса эшләмәйһең, тип әйтеүселәр ҙә булды. Мин уны былай ниәт менән асманым, үҙем дә, ярҙамсыларым да бер ҡайҙан бер тин алмай, күңел ҡушыуы буйынса эшләйбеҙ. Һәр башҡорттоң ата-баба ҡаны, ошо ерҙе беҙгә ҡалдырғаны хаҡына милләтенә йәнләтә түләр бурысы бар. Беҙ ҙә шул маҡсат менән йәшәргә тейешбеҙ - тоҡомдарыбыҙ илйортһоҙ ҡалмаһын! Был маҡсатҡа бына интернет киңлектәрендә лә үҙ өлөшөндө индереп була.

4 йыл эсендә ҡоробоҙға 17 мең ярым кешене туплау - етди темалар күтәргән төркөм өсөн ярайһы юғары күрһәткес. Мин һан артынан ҡыумайым, иң мөһиме - сифат. Шуның өсөн хәҙер башҡортса баҫмалар менән берлектә төрлө бәйгеләр, саралар ҙа ойошторабыҙ.

Бына "Киске Өфө" гәзите менән әйтеш бәйгеһе үткәрҙек, бик фәһемле, ҡыҙыҡлы сара булды ул. Быйылға һаҡал-ҡашмауҙар эшләү буйынса "Селтәр" тигән бәйге иғлан ителде, уны ла мотлаҡ яҡтыртып барасаҡбыҙ. Төркөмгә ярҙамсы итеп айырым "Селтәр" тигән төркөм дә ойоштороп ебәрҙек.

**➔ Төркөмдә ҡатын-ҡыҙ өсөн генә түгел, гөмүмән, ғаилә өсөн файҙалы, кәрәкле, мөһим кәңәштәр күп бирелә. Интернет аша кешене нимәгәләр өйрәтеү, тәрбиәләү мөмкинме?**

- Башлаған осорҙа төркөмөбөҙҙөң йөҙө итеп өс инәй торған фотоны һайлағайным. Ысынлап та, өләсәйҙәр мәктәбе лә ул беҙҙең төркөм. Халҡыбыҙҙың милли педагогикаһын "Улды - утыҙ, ҡыҙҙы ҡырҡ ерҙән тый" тигән мәҡәл ҡылыҡһырлай. Бына ошо мәҡәл хәҙер виртуалда ла эшләй. Беҙҙең төркөмдә һүрәттәр ҙә бик уйлап һалына - унда шаршалы табин, ярым-яланғас фотоларға урын юҡ, тәрбиәһеҙ һүҙҙәр ҙә осрамай, кемдер тәртипһеҙләнеп маташа икән, шунда уҡ "кара исемлек"кә индерелә.

**➔ Төркөм ҡорона тупланған ҡатын-ҡыҙҙарға ниндәй ҡылыҡһырлама бирер инегеҙ?**

- Беҙҙең ҡорға тупланыусыларҙың 40 процентҡа тиклеме ҡырҡ йәштән уҙғандар. Йәштәр ҙә бар. Ҡоробоҙҙа мотлаҡ юғары белемле түгел, әммә мәҙәниәтле, тәрбиәле ханымдар, ҡыҙҙар өҫтөнлөк итә. Ауыл ҡатындары ла күп, улар өсөн шатланам: йыш ҡына үҙҙәренә кәрәкле һорауҙар яҙып, шунда уҡ яуабын да алыу мөмкинлеге бар. Төркөмдә шәхси хужалығында етештерелгән аҙыҡ-түлек, һөнәрмәндәрҙең үҙ ҡулдары менән эшләгән эштәрен һатыу тураһында түләүһеҙ игландар ҙа баҫабыҙ. Ауыл кешеһе өсөн бик унайлы был. Йәнә төркөмөбөҙҙә табиптар менән туранан-тура бәйләнешкә инеү, уларҙан консультация алыу мөмкинлеге тыуҙырҙыҡ.

**➔ Кемдер интернетты, сүп, бысраҡ сығанағы, тигәндә, һеҙ һәр ваҡыт уны гөл-сәскәле, матур баҡса итеп күҙаллатаһығыҙ...**

- Төркөмдө асҡас, миңә яҙыусы, ғалимә, Яныбай Хамматовтың ҡыҙы Гүзәл Хамматова ярҙам итте. Рәхмәт уға. Шунан инде ул үҙ төркөмдәрен асты. Ярҙамға педагог-ветеран Миләүшә Ғәйфуллинаны, Ләлә Иҡбаеваны, тележурналист Гөлназ Ишемголованы саҡырҙым. Баштан уҡ тиерлек Миләүшә ханым менән эшләйбеҙ. Гөлназ ашыу серҙәре менән бүлешеп, шул яҙмаларҙан китап та әҙерләне. Гөлдәриә Йосопова ваҡыт-ваҡыт яҙмалар өҫтәй, тележурналист, моңло йырҙары менән танылып барған Светлана Насирова ла йөмләшә төркөмдө. Бына шундай ярҙамсылар булғанға ла төркөмөбөҙ үҙенә тарта.

Райондарҙан даими яҙышып торoccулар бар - уларҙың һәммәһенә лә ҙур рәхмәт! Интернетты гөл итеү ҙә, сүплек башы итеү ҙә үҙебеҙҙән тора бит. Йәштәрҙе, балаларҙы интернеттан хәҙер айырып булмай икән, тимәк, унда саф һауалы мөхит булдырыу зарур.

**➔ Яҙҙың тәүге байрамы - 8 Март уңайынан әсәй, өләсәй, йәмәғәт эшмәкәре, хажиә булараҡ, гүзәл заттарға ниндәй теләктәрегеҙҙе еткерерһегеҙ?**

- Донъяуи байрамдарыбыҙҙың күнелле генә бертәүһе был - ысынлап та нәфис зат икәнебеҙҙе лә иҫкә төшөрөп алыу көнө. Ә, гөмүмән, быны һәр саҡ иҫтә тотоу мөһимдер ул, бер көндә генә түгел. Инә ҡорт көслө булһа, умарта көсле була. Шуның өсөн инә ҡортто, йәғни әсәләрҙе һаҡлау, ҡурсыу, ятатыу бик кәрәк! Көн һайын!

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әңгәмәләште.**

### ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...

Һәр ҡатын-ҡыҙ өсөн үҙенең матурлығын белеү мөһим. Был бөтөнләй тойғоһон тыуҙыра. Яғымлы һүҙҙәр һәм матурлығын таныу ҡатын-ҡыҙҙы тағы ла йомшараҡ, нәзәкәтлерәк, шаянраҡ булырға һәм сәскә кеүек асылырға ярҙам итә. Аҡыллы ир-ат ятраҡан ҡатын-ҡыҙына тағы ла нисек матурыраҡ булырға ярҙам итергә белә: ҡатын-ҡыҙ тураһында ни тиклем хәстәрлек күрһә, ул шул тиклем матурыраҡ була бара һәм үҙенең энергияһы менән ир-атты тулыландыра. Ҡатын-ҡыҙ утҡа мохтаж усаҡ булып тора. Был донъяла иң ҙур ҡиммәт - Энергия. Уны бер төрлө аҡсаға ла һатып алып булмай. Шуға күрә, ир-ат ҡатын-ҡыҙҙан ошо утты алыр өсөн ҙур хаҡ түләргә лә риза.

ӘЙТӘГҮР!



**"Мин - ҡатын-ҡыҙ, хәсрәттәрем ябай:**
**Һаҡлайым өй йәмен, үҫә балам,**
**Мин донъяға бирәм тик изгелек,**
**Мин донъяға тик яратып бағам..." - тип яҙа шағирә Йомабикә Ильясова.**
**Бөгөнгө заман ҡатын-ҡыҙы донъяуи мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе үҙ өҫтөнә алып, Хоҙай Тәғәлә тарафынан һалынған үҙенең ошо төп асылына тоғро ҡала аламы?**

# ДОНЪЯНЫ ЯРАТЫУ...

## әсәй булғас көсәйә

***Гөлнара МОСТАФИНА, журналист:*** Дөрөҫөн әйткәндә, гүзәл заттың ҡулынан килмәгән эше юҡ инде ул. Ул балаһын да ҡарай, донъяһын да алып бара, аҡсаһын да таба, йәмәғәт эштәрендә лә ихлас ҡатнаша. Тик урыҫтарҙың бер шәп әйтеме бар: был донъялағы һәр ҡылығың, һәр ғәмәлең өсөн түләргә, йәғни, яуап бирергә кәрәк. Эштән, һығылған лимон кеүек, арып ҡайтып, балаларыңа, иренә, өйөнә ваҡытың йә бөтөнләй ҡалмай, йә бик аҙ ҡала. Бер ваҡыт аяғым һынып, өйҙә ултырғайным. Шунда миңә ҡыҙым: "Һин ауырыған, рәхәт кенә", - тип ҡыуанып йөрөгәйне. Йәшлек менәндер инде, ул ваҡытта был һүҙҙәргә әллә ни әһәмиәт бирмәнек, көлдөк тә ҡуйҙыҡ. Әле бәләкәсем менән өйҙә ултыра башлағас, был ваҡиға йыш иҫемә төшә. Балалар үҫкән сакта эшләгән әсәй - ярты әсәй икән. Һин икегә бүленәһең. Әле ҡыҙыма йәш ярым тулғас, һорау тыуҙы: эшкә сығырғамы, әллә өс йәшенә тиклем өйҙә ултырырғамы? Икенсеһен һайланым. Балалар шул тиклем тиҙ үҫә. Шуға күрә баламды һәр көн наҙлап ҡына йоҡоһонан уятҡым, үҙем бешергән аштар менән һыйлағым, уның менән бергә уйнағым, тәүге тормош дәрестәрен үҙем биргем килә. Һәм иң ҡыҙығы шунда: ирем дә үҙендә яуаплылыҡ тойҙо, ғаиләлә үҙенең иң кәрәкле кеше икәнен аңланы. Дәртләнеп эшләп йөрөй. Яңғыҙы биш кешенән торған (икәүһе - студент) ғаиләне ҡарай алыуы унын өсөн бер ғорурлыҡ.

Нимә генә тимә, ғаиләләгә йылылыҡты, йәмде ҡатын-ҡыҙ булдыра. Әлбиттә, был, ҡатын-ҡыҙ эшләргә тейеш түгел, тигән һүҙ түгел, тик хөкүмәт эше балаларыңды күңел йылыһынан, әсәй яҡынлығынан мәхрүм итеү иҫәбенә эшләнмәһен. Йәмғиәт эшендәге уңыштарың күренмәҫкә, тейешенсә баһаланмаҫҡа ла мөмкин, ә балаларыңа бүләк иткән шатлыҡлы минуттар бер ваҡытта ла онотолмай, уларға биргән дөрөҫ тәрбиә емештәре йылдар үткәс рәхмәт булып әйләнеп ҡайта.

***Гүзәл ВИЛДАНОВА, философия фәндәре докторы:*** Ҡатын-ҡыҙҙың төп асылы, минеңсә, ир ҡатыны, әсә булыуҙа, өй ҡотон һаҡлай белеүҙә. Башҡорт халыҡ ижады өлгөләренән дә, диндән дә күреүебеҙсә, ҡатын-ҡыҙ иң тәүҙә әсә булараҡ хөрмәт ителә. Милләттең тотҡаһы - әсәй, ул тәрбиәләгән балалар милләттең киләсәген, йөҙөн билдәләй, йәғни, ябай ғына булып тойолған хәсрәттәр артында оло яуаплылыҡ ята. Ғаилә усағын, ғаиләне һаҡлап өйҙә генә ултырған ҡатын-ҡыҙ ҙа ҙур бурыс башҡара - ул йәмғиәттең нигеҙен бар итә, сөнки йәмғиәт ғаиләнән башлана.

Әлбиттә, бөгөнгө йәмғиәттә ҡатын-ҡыҙҙың роле ҙур, уны баһалап бөтөп булмай. Фән, мәғариф, сәйәсәт, сәнғәт, сәнәғәт йәки башҡа берәй өлкәне алайыҡ - күпме аҫыл ҡыҙҙарыбыҙ бар, иң мөһиме, улар барыһы ла төп ҡатын-ҡыҙ асылына хыянат итмәй, милләтебеҙгә бынамын тигән балалар үҫтерә. Минең тормошомда ла булды шундай мәлдәр, диссертация ла яҡларға кәрәк, балаларҙы ҡарарға ла. Быныһ икеһен дә бер юлы алып барыу еңел булманы. Шул саҡта миңә дин, рухи яҡтан үҫтереүсе китаптар, төрлө күренекле кешеләрҙең яҙмышын өйрәнеү ярҙам итте.

***Рәзилә ШАХМӨХӘМӘТОВА, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Ысынлап та, бала тыуғас, донъяны бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡабул итә башлайһың. Элек иҫең китеп, артыҡ көйәләнеп йөрөгән проблемалар, бәләкәсәйеп, әһәмиәтен юғалта. Донъяны ятатыу әсәй булғас көсәйә, тиер инем. Шуға ла ятатыу, изгелек кеүек матур хистәрҙән туҡылған күңелебеҙ әсәй булғас ҡына "уяна" икән, тәүге бурысыбыҙ ҙа әсәй булыуҙыр ул.

Кеше үҙе йәшәгән заманы менән бергә үҙгәрә. Бөгөн аҡса тапҡан ҡатын-ҡыҙға берәү ҙә аптырап ҡарамай, был гәҙәти хәлгә әйләнде. Шулай ҙа арыпталып эштән ҡайтыуыңды көтөп тороп кешең булыуы был ауырлыҡты ла еңеләйтә. Ял тураһында хыяллланаһың, ә балаларыңдан бер аҙға ғына айырылып торһаң да, нимәләр етмәй башлай. Саҡ ҡына көйәфем булмаһа, мин күп итеп тәм-том һатып алам да, уларымды шатландырырға ятатам. Уларҙың ҡыуаныcы үҙенде лә бәхетле итә лә ҡуя.

**Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ГҮЗӘЛ ЗАТТЫҢ...

## хәтере ҡыҫҡа

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөңдө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына өлгәшеү өсөн эффектлы сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тыныслыҡҡа эйә булырға ҡамаусалаясаҡ.

■ Баш ауыртыуының сәбәптәре төрлө була ала, мәҫәлән, хроник арыу, көсөргәнеш кисереү һәм һәр осраҡта табип менән кәңәшләшеү мотлаҡ. Шулай ҙа нисек туҡланыуығыҙға ла иғтибар бирегеҙ, ти белгестәр. Улар 4 ризыҡты рациондан алып ташларға кәңәш итә. Уларҙың беренсеһе - оҙаҡ һаҡлана торған сырҙар. Уларҙың составындағы тирамин ҡан тамырҙарына насар йоғонто яһай, ҡан баҫымын күтәрә. Баш йыш ауырығанда сырҙың фета, моцарелла, пармезан кеүек төрҙәрен бөтөнләй ашамағыҙ. Сырҙы эремсек менән алыштырыу дөрөҫөрәк. Икенсеһе - һаҡлы эсемлектәр. Бер стакан татлы эсемлектән һуң ҡанда глюкоза кимәле ҡапыл күтәрелә һәм ҡан тамырҙарының ҡапыл ҡыҫылыуына, һөҙөмтәлә, баш ауыртыуына килтерә. Баш ауыртҡанда ҡаһүәне айына бер тапҡыр ғына эсергә ярай, сөнки ул ҡан баҫымын күтәрә. Исемлектең дүртенсе юлын банан алып тора. Уның ҡабығында шулай уҡ тирамин бар.

■ Ҡатын-ҡыҙҙың хәтере ҡыҫҡа тиһәләр ҙә, ғалимдар раҫлауынса, гүзәл заттың хәтере уның тән төҙөлөшөнә бәйле имеш. АҠШ-ның Төньяҡ-көнсығыш университеты эргәһендәге медицина колледжы ғалимдары раҫлауынса, груша фигуралы ҡатын-ҡыҙҙарҙың хәтере күпкә насарыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, алма фигуралыларҙың һөҙөмтәләре башҡаларға ҡарағанда яҡшыраҡ булып сыҡҡан.

■ Стокгольм университеты ғалимдары раҫлауынса, мармелад, емеш желелары, төрлө ҡайнатмалар сәләмәтлек өсөн мотлаҡ кәрәк, сөнки уларҙың составындағы пектин организмдан зарарлы матдәләрҙе сығарыуға булышлыҡ итә. Пектин - үҙенсәлекле химик структураға эйә булған үсемлек сығышлы углевод. Ул организмдан ауыр тоҙҙарҙы, свинец һәм башҡа матдәләрҙе сығарыу һәләтенә эйә. Еләк-емеш желеһы һәм мармелад организмдың бөтөн проблемаларын хәл итә алмаһа ла, күп белгестәр иҫәпләүенсә, был татлы ризыҡтарҙың көн һайын ашау күңелһеҙ өҙлөгөүҙәр хәүефен күпкә түбәнәйтә.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үсмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емешеләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның зәҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти Австралияның Аделаида университеты ғалимдары.

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Байрамыбыҙ уңайынан ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың аш-һыу оҫталығын, донъя көтөү бөтмөрлөгөн, рух ныҡлығын да телгә алып үтке килде. Ошо сифаттарҙы сағылдырыу өсөн Белорет районы Шығай ауылы ағинәйҙәре - районда билдәле "Гөлнәзирә" халыҡ фольклор ансамбле етәксеһе Гөлдәр Ҡолбирҙина, ансамблдең алыштырғыһыҙ, иң әүҙем ағзаларының береһе Сәлимә Татлыбаева һәм Шығай ауылының мәҙәниәт йорто директоры Сәғирә Шәрәфетдинова менән ҡыҫҡа ғына әңгәмә ҡороп алдыҡ. Көнө-төнө халҡыбыҙ мәҙәниәтен үҫтерәйек, йолаларыбыҙҙы һаҡлайыҡ, ауылыбыҙҙың нигеҙен ҡоротorға бирмәйек тип сапһалар ҙа, йорт мәшәҡәттәрен, ғаилә усағы һағында тороу юҫығындағы бурыстарын да индәренән төшөрмәй улар. Ошо уңған хужабикәләрҙең донъя көтөү серҙәрен тыңлағыҙ әле.**

# ҺАЙ, БАШҠОРТОМДОҢ ЙОЛАЛАРЫ!

*Сәғирә ШӘРӘФЕТДИНОВА: "Үҙең етештергәнгә бер ни ҙә етмәй"*



Ата-бабаларыбыҙ һәр саҡта ла ит ашап, ҡымыҙ, буҙа эсеп көн күргән, әлеге ваҡытта киң таралған ауырыуҙар тураһында ишетеп тә белмәгән. Бөгөн заманалар үҙгәрҙе, һатыу кәштәләрендә ниндәй генә ризыҡ юҡ. Беҙ ҙә ошоға тиклем магазинда һатылған ризыҡтарҙы бер ниндәй уй-шикһеҙ һатып ала инек. Уларҙың сифаты сәләмәтлек өсөн хәүеф тыуҙыра башлағас, ғаиләбеҙ менән үҙебеҙ үҫтергән продукцияға өҫтөнлөк бирә башланыҡ. Мал тоткас, баҡса үҫтергәс, өҫтәлдән ҡаймаҡ, эремсек, ҡорот, йәшелсә өҙөлмәй. Үткән йәй помидорҙарым ишелеп уңды. Уны үҫтереүҙең үҙем генә белгән серҙәре лә бар хәҙер. Мәҫәлән, күптәр үсентеләрҙе тура ултырта, ә мин уларҙы ергә йығып һалам, улар үҙҙәре турайып үҫә. Шулай уҡ бер ваҡытта ла помидорҙың артыҡ ян үрендеһен (пасынки) өҙмәйем. Үсентеләр ныҡ, помидорҙары күп һәм сирһеҙ булһын өсөн уларға айырылған һөт ҡоям. Үсемлектәргә лә аҡһым кәрәктер, тигән уйҙан сығып эшләгәйнем быны. Һөт ҡоя башлағандан һуң нәҙек булып ултырған һабаҡтар бер аҙна эсендә йыуанайып, күҙгә күренеп нығынды. Ошо алымдар ярҙам итәмелер, әллә башҡа ғиләһе бармылыр инде, уңыш мул була.

Бөтә ашҡаҙан, эсәк сирҙәре консерваланған продукция ашағандан килә, тип һанағанға, күпләп үҫтерһәм дә, йәшелсәләрҙе маринадламайым, ҡышҡылыҡҡа салаттар ҙа әҙерләмәйем. Уларҙы яңы сағында, түтәлдән өҙөп ашауҙы хуп күрәбеҙ. Шул саҡта уның файҙаһы ла ҙурыраҡ, тәмлерәк тә була. Үҙебеҙҙән артҡанын туғандарға, дуҫтарға, күрше-күләнгә күстәнәс итеп таратам. Быйыл һис уйламағандан ғына ҡорот эшләүҙең еңел ысулын табып алдым. Ҡатыҡ ойоторға, тип, һөт ҡайнатырға ултыртҡайным. Донъя мәшәҡәттәренә күмелеп, был турала бөтөнләй онотҡанмын. Көнө буйы ҡыҙарғансы ҡайнаған һөттө ни эшләтергә белмәй, аптырап торҙом-торҙом да, ни булһа ла булыр, тип, ойотҡо ҡойоп ҡарарға булдым. Икенсе көнө асып ҡараһам, өҫтөнә һары һыуы айырылып, ҡәҙимге ҡорот килгән дә сыҡҡан. Айға яҡын әсетеп, ҡаҙан төбөнән китмәй ҡайнатҡан ҡороттан бер нәмәһе менән дә айырылмай, хатта тәмлерәк тә кеүек. Шуға күрә, хәҙер ҡоротто ошондай юл менән дә ҡайната башланым. Оҙаҡ һаҡлана, ҡыш буйы рәхәтләнеп тотонабыҙ.

*Гөлдәр ҠОЛБИРҘИНА: "Мал тотоуҙың бәсен аңланыҡ..."*



Бөгөнгө баҙар иҡтисады шарттарында шәхси хужалыҡ ауыл кешеһенең берҙән-бер йәшәү сығанағы. Сөнки мал ашата ла, кейендерә лә, йылыта ла. Ҡасандыр, "Ана, ҡала кешеһе йәшәй ҙәһә, исмаһам, мәшәҡәте әҙерәк булыр", тип, мал-тыуарын бөтөргәндәр ҙә яңынан мал үрсетеүгә тотондо һәм үҙе етештергән ризыҡтың хәләл дә, файҙалы ла булыуын аңланы. Составына нимә ҡушылғаны ла билдәһеҙ булған сит ил ризыҡтарынан бүген бөткән ауыл кешеһе бөгөн малын ҡәҙерләп, булғанын исраф итмәй, ризыҡ етештереп, артҡанын һатып, етеш донъя көтә. Шуға, беҙ ҙә ғаилә ҡороу менән иң тәү сиратта мал көтөргә ынтылдыҡ. Һөтө лә, эремсеге лә, ҡаймағы ла үҙебеҙҙеке.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ЯУЛЫҠҠА МӘҘХИӘ ЙЫРЛАНДЫ...

**Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ ағинәйҙәре үҙҙәренең башҡарған ғәмәлдәре менән әлегәсә һәүетемсә генә йәшәп ятҡан ауылдарына, әйтерһең, йән өрҙө: береһенән-береһе сағыу һәм бай йөкмәткеле тәрбиәүи саралар үткәреп кенә торалар. Хәйбуллаға - республика Ағинәйҙәр ҡорона, Маҡар ағинәйҙәре үткәргән "Ҡарға бутҡаһы"на барырға ла, Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы "Бәхетнамә", "Алтын тирмә" тапшырыуҙарының геройҙары булырға ла, Өфөгә барып, селтәр-ҡашмау яһау буйынса оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашырға ла өлгөрә улар. Улай ғына ла түгел, былтыр "Байыҡ- 2015" телевизион бейеү конкурсында ҡатнашып, 3-сө урын яуланылар.**

Быны әле ауылдаштары янына Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы ағинәйҙәрен дә саҡырып, "Аҡ яулығым һалып инемә..." исеме аҫтында үҙенсәлекле байрам ойоштороҙолар. "Ҡунаҡ ашы - ҡара ҡаршы, - ти Урман-Бишҡаҙаҡтың төп ағинәйе Фәниә Зөфәр ҡыҙы Рәшитова. - Көҙөн үҙебеҙ Күсәрбайға барғайныҡ. Быны шунда ике ауыл ағинәйҙәренең дуҫлығына күпер һалыуында ла инде".

Урман-Бишҡаҙаҡтағы сара урындағы мәсеттә аят уҡыуҙан башланып, ауыл китапханаһының яҡты һәм ҙур залында дауам итте. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың төп баш кейеме булған яулыҡҡа ысын мәғәнәһендә мәҙхиә йырланды был кисте. Әйтерһең, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең һандыҡ төптәрендәге барлыҡ яулыҡ-шәлдәрен бында йыйғандар - улар, аллы-гөллө ялан сәскәләрен хәтерләтеп, тотош залды биләп алғайны. Ағинәйҙәр мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре менән берлектә "яулыҡ" һүҙенең килеп сығышы, уның тарихы, ябыныу традициялары тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр йыйғайны. Күптәребеҙ белмәйҙер ҙә әле: элек, яулығына ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙың холҡон, йәшен, байлығын, милләтен билдәләгәндәр. Кейәүгә

## Сәлимә ТАТЛЫБАЕВА: "Хәләл тирең мәнфәғәтеңә яҙһын..."

Быйыл беҙ һуғымды ла матур итеп, боронғоса өмәләп ойоштороҡ. Тәғәйен көндә инселәгән малды "ҡулы еңел" кешенән шартына килтереп салдырҙыҡ. Ирҙәр, тиреһен һыҙырып, ҡорһағын асыуға өмәсе ҡатындар йәһәт кенә эсәк арытырға тотондо. Мин инде, хужабикә булараҡ, аш өлгөрттөм. Өмәселәр аш ашап алғас, йәһәт кенә мәкегә эсәк, үпкә-бауырҙы сайҡарға китте. Ҡайтҡас, үпкә бауырын, йөрәген үткәреп, тултырма тултырырға тотондоҡ. Бындай ысул ҡайһы берәүҙәргә ирмәгерәк тә күренер, әммә шәхсән миңә бик оҡшай. Һуйған көндө үк эшкәрткәнгәме, тултырма бик һутлы, тәмле килеп сыға. Ҡыҙыҡһынған уҡыусыларға тултырма әҙерләүҙең бер рецебын тәҡдим итәм: үпкә-бауырҙың тышсаһын һыҙырып, йөрәктең ҡанын сығарып, ит үткәргес аша үткәреп, һарымһаҡ, ҡара борос һәм башҡа тәмләткестәрҙе теләгәнсә һалабыҙ ҙа болғайбыҙ. Унан инде эслекте туҡ эсәккә (ас эсәккә түгел) тултырабыҙ. Иҫ киткес тәмле килеп сыға.

Ә инде эсәк-ҡарынды мин "оҙон ағайҙар" (ҡышҡы көндәр) килгән мәлдә тотоноп ҡалам. Уларҙан манты яһап, туңдырып ҡуям. Ҡабалан ваҡыттарҙа бешереп ебәрергә тәмле ризыҡ ҡул аҫтында була. Баш-тояғын да әрәм итмәй, "ҡалтырауыҡ" эшләйем. Артып ҡалған итте яҙғыһын быҡтырып, банкаларға тултырабыҙ.

Һәр ауылда һуғым һуйышҡан кешеләрҙе ашҡа саҡырыу ғәҙәте бар һәм ул әлегәсә матур йола булып һаҡланып ҡалған. Һуғым ашын кемдер шул уҡ көндә, икенсеһе һуңғараҡ ауыҙ иттерә. Ашҡа мотлаҡ туған-тыумаса, һуғым һуйышҡан кешеләр, күрше-күлән саҡырыла. Аш алдынан табынға тултырма, ҡаҙы ризыҡтарын ҡуябыҙ. Шунан инде итте теүәл өлөштәргә бүлеп, өлөш ашатыуға тотонаһың. Шаяныраҡтар иткә еп бәйләп, эргәһендәге кешегә һоғондора. Өлөш һоғона алмаған кеше үпкәләмәй, сөнки йолаһы шулай. Ҡунаҡтар аш ашап, ҡоротлап һурпа эсеп, һуғымға бәрәкәт теләп хуш итә. Беҙҙең яҡта салыусы кешене айырыуса ризалатырға тырышалар: салыу һөйәген бирәләр, күлдәк кейҙерәләр. Бына шулай, һуғым һуйыу өмәләре, ашҡа саҡырышыу - халҡыбыҙҙың ҡунаҡсыллығын күрһәткән, ризығын тәғәм иттереп, уға бәрәкәт теләүгә ҡайтып ҡалған матур йолаларҙың береһе ул. Ялҡау булмаған кешеләр ошондай йолалар атҡарып, ауылда ла мул, етеш йәшәй. Елкәһе ҡалын, ҡулы эш белгәндәр ас ултырмай бөгөн. Ҡайһы берәүҙәр ҡышын да, йәйен дә һуғым һуя. Был иһә, үҙ продукцияңды етештереп, сәләмәт йәшәүгә ынтылыуҙы ла күрһәтә.



Һыйыр малы көтһәк тә, 1979 йылдан алып бөгөнгәсә иптәшем менән һуғымға йылҡы малы салабыҙ. Йылҡы ите - башҡорттарҙың иң яратҡан ризығы. Уны ашаған кеше һыуыҡҡа бирешмәй, өшөмәй. Организм да был итте тиҙерәк үҙләштерә, ҡан баҫымы ауырыуҙары, холестерин булмай. Һуғымлыҡ һатып алыуҙы ла, мал һуйыуҙы ла боронғо йолаға таянып башҡарабыҙ. Хужаға күстәнәстәр, бүләктәр бирәбеҙ. Хаҡын түләгәндә: "Көткән малың, түккән хәләл тирең мәнфәғәтеңә яҙһын", - тип теләйбеҙ.

Бөгөн күптәр, мәшәҡәтенән ҡурҡып, эсәк-ҡарталарҙы эшкәртә һалып бармай. Белеп тотонғанда, бынамын тигән, экологик яҡтан таҙа ризыҡ килеп сыға. Мәҫәлән, ҡаҙылыҡты ятмаған кеше бик һирәктер бөгөн, һатып алам тиһәң, хаҡы ла ҡиммәт кенә. Ә бына ҡулы эш белгәндәр рәхәтләнеп файҙалы ла, шифалы ла ризыҡ ашай. Ҡаҙылыҡ эшләү өсөн башта эсәктәрҙе ике тапҡыр ҡарҙа тапап йыуып алабыҙ. Шунан ҡабырғаға ҡушылып үҫкән итте эсәккә һыймалы итеп, оҙонсалап киҫәбеҙ ҙә, ҙур табаҡҡа һалып, өҫтөнә тоҙ, борсаҡлы боросто төйөп һибәбеҙ, ит турағыстан күп итеп һарымһаҡ үткәреп, барыһын бергә яҡшы итеп болғағас, ярты сәғәткә йылы урынға ҡуйып тораһың. Ит әҙер булғас, уны бер яҡ осо бәйләнгән эсәккә тултырып, икенсе яҡ осон да бәйләп, әҙер ҡаҙылыҡтарҙы һыуытҡысҡа һалаһың. Әгәр үҙ тәме менән ятһын тиһәгеҙ, ағас йәшниккә ҡар тултырып, ҡаҙылыҡтарҙы шунда ҡар менән аралаштырып һалырға кәрәк, борон шулай иткәндәр. Ҡаҙылыҡты сәғәт, сәғәт ярым бешереп, һыуытҡыста туңдыраһың. Шунан нәҙек кенә итеп телеп ашайһың. Ҡапыл ҡунаҡ килеп инһә лә ризығың әҙер.

Һуғым һуйып та бишбармаҡ бешермәү мөмкин түгел. Шәхсән үҙем һуғым ашына саҡырғанда мотлаҡ ошо ризыҡты бешерәм. Йылҡы итенән ул бигерәк тә тәмле була. Итте ҡайнап торған һыуға һалам. Был осраҡта һурпа тәмле, матур була. Ҡайнап сыҡҡас, тоҙ һалына, бешеп сыҡҡас, итте берәр ҡабым ҙурлығында турап, ситкә ҡуйып тораһың. Һурпа өҫтөнән һөҙлөк майын ипләп кенә һөҙөп алаһың һәм уға ике-өс баш һуған турап һалаһың. Һурпаның ярты өлөшөн һөҙөп, йылы урынға ҡуяһың. Ҡалған өлөшөн ҡайнатып, ҡырҡып әҙерләнгән һалманы төшөрәһең. Мин, ғәҙәттә, 10 кешегә әҙерләү өсөн 4 йомортҡаға он, һыу ҡушып, ете йәйем һалма йәйеп, киптереп ҡырҡып алам. Баймаҡ яғында һалманы бәләкәй генә квадрат итеп ҡырҡһалар, беҙҙең яҡта уның оҙонсалап ҡырҡылғанын үҙ итәләр. Һурпалағы һалма өҫкә ҡалҡып сыҡһа, бишбармаҡ әҙер, тигәнде аңлата. Ҙур ҡоштабаҡҡа һалманы һөҙөп алып, янына туралған ит һалып, өҫтөнә һөҙлөктө ҡояһың. Һуңынан ҡоротлап һурпа бирәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошолай, ауыл тормошона ла йән өрөп, үҙ донъяларында ла ырыҫ, ҡот арттырып йәшәй беҙҙең "Ағинәй" тигән дәрәжәне күтәргән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ. Белоретта ғына түгел, Баймаҡта ла, Әбйәлилдә лә, Учалыла, Хәйбуллала, Йылайырҙа, Ейәнсурала, Күгәрсендә лә ошондайҙар улар, тиер инек... Һәр районды ғына түгел, һәр ҡатын-ҡыҙҙың барыбер ҙә үҙ оҫталыҡ сере, донъя көтөү маһирлығы бар. Әммә маҡсаттар бер: милләт бәҫен күтәреү, уның йолаларын күҙ ҡараһылай һаҡлау һәм киләһе быуындарға тапшырыу.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА**
**яҙып алды.**



*Эльдар ФӘТТӘХОВ фотоһы.*

сыҡмаған ҡыҙҙар - маңлайса, йәш ир ҡатыны - ҡашмау, оло йәштәгеләр - ҡушъяулыҡ, ағинәйҙәр таҫтар ябынған. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙҙар араһында яланбаш сәс туҙҙырып йөрөү ят күренеш һаналған. Сәстәрен шыма итеп тарап, толомлап үреп, толом остарына сулпылар тағып, зауыҡ менән кейенгән улар. Шуға ла башҡорт ауыҙ-тел ижадында яулыҡ менән бәйле ырым-ышаныуҙар, ғөрөф-ғәҙәт, мәҡәл-әйтем, йомаҡтар, йырҙар күп булған. Уларҙың ҡайһы берҙәре бөгөнгө көнгәсә килеп еткән. Мәҫәлән, аҡ яулыҡ түшәһәң, аҡ йылан мөгөҙөн һалып китер. Уны күреп ҡалып алған кеше бәхетле булыр. Ә инде йылан ҡабығын аҡ яулыҡҡа төрөп һалһаң, өйҙә ҡот, бәрәкәт, ырыҫ артыр, тигәндәр. Был ырымды бөгөн дә онотмаусылар бар икән - ошо сараның башында йөрөгән Фәйрүзә Арыҫланғәлина йортонда һаҡланған шундай ҡомартҡыны үҙе менән байрам сараһына алып килгәйне. Яулыҡ быуындан-быуынға өләсәйҙән - әсәйгә, әсәйҙән - ҡыҙына, килендәренә тапшырыла килә. Ағинәй Мәрйәм Дауытова әсәһенән ҡалған яулыҡты ғәзиз кешеһенең төҫө итеп ябыныуы тураһында һөйләне. Ә бына Рима Хәмиҙуллина - ҡушъяулыҡты, Миниса Искәндәрова таҫтарҙы үҙҙәре тегеп кейгәйне.

Сарала ҡатнашыусылар яулыҡҡа бәйле бик күп мәҡәләйтемдәр, йомаҡтар, уйындар белеүе менән дә һоҡландырҙы. Минзилә Фәхретдинованың бер генә викторина һорауы ла яуапһыҙ ҡалманы. Ауылдарҙа халыҡ шул тиклем талантлы бит ул. Марат Шәһит улы Сәфәрғоловтың баянына ҡушылып, Гөлгөнә Ибрасова "Йәшел яулыҡ"ты һуҙһа, Фазила Ғәбитова дәртле таҡмаҡтарын әйтте. Бер төркөм ағинәйҙәр иһә үҙҙәре бәйләгән шәлдәре менән "Шәл бәйләнем" бейеүен башҡарҙы.

Был күркәм байрамда Ишембай районы һәм ҡалаһы ағинәйҙәре ҡоро рәйесе, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы Солтанова ла ҡатнашты. Ул һуңғы йылдарҙа ауылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың әүҙемләшеүенә, бер төптән булып, бер уй-ниәт менән янып йәшәүҙәренә шатланыуын белдерҙе. Һәм артабан аҡһаҡалдар мәктәбен дә тергеҙеп, ауылдарыбыҙ тормошон йәнләндереү, уға ҡот өҫтәү, йәш быуынды тәрбиәләү, рухи ҡиммәттәрҙе, башҡорт халыҡ традицияларын һаҡлау юлында арымай-талмай эшләргә саҡырҙы.

**Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: үҙ дәлилеңде аңлау

Дәлил (мотивация), моғайын, инглиз телендә дөрөҫ аңлатма бирелмәгән һүҙҙер. Нимә һуң ул дәлил? Дәлил ваҡыттың аныҡ арауығында нимәлер эшләү урынына, икенсе нәмәне эшләгәндәге мөнәсәбәтте һүрәтләй. Һәр ҡайһыбыҙ һәр саҡ ниндәйҙер дәлилгә нигеҙләнә. Берәй өлкәлә уңыш ҡаҙанырға тырышаһығыҙмы йәки креслола ялҡауланып ятаһығыҙмы - һеҙҙең менән дәлил идара итә. Әгәр ҡул ҡаушырып ултырырға теләмәһәгеҙ, дәлил булып хеҙмәт иткән нимәлер эшләр инегеҙ. Дәлилһеҙ бер генә ғәмәл дә ҡылып булмай. Шулай ҙа ыңғай һәм кире дәлилде айыра белергә кәрәк: лайыҡлы һәм конструктив нәмә эшләп булған кеүек, зыянлы эш ҡылыу ҙа бар. Нигеҙҙә, кемделер дәлилләү мөмкин түгел. Һәр кем үҙенсә уйлай. Шуны онотмағыҙ: һеҙ һәр саҡ үҙегеҙ өҫтөнлөк биргән нәмәне эшләйһегеҙ, киреһенсә түгел. Тап ошо дәлил тыуҙыра ла инде. Һәр ғәмәл Аңдың әлеге ваҡытта билдәләнгән шәхсән ихтыяж йәки теләк эҙемтәһе. Ҡағиҙә булараҡ, тәү сираттағы дәлил булып үҙеңде яҡшы тойоу теләге тора - аҡыл йәһәтенән дә, физик, хис-тойғолар, рух яғынан да. Әгәр бер генә өлкә буйынса ҡәнәғәтһеҙлек ҡалһа ла, был күңел төшөнкөлөгөнә һәм хәүефкә килтерә. Шуға күрә, хатта ғәмәлдәрегеҙ зыян килтерһә лә, уңайлылыҡ тойғоһон ҡайтарыуға мөмкин тиклем көс һалығыҙ.

Үҙеңде нисек ыңғайға көйләргә? Әгәр ыңғай тормош тәжрибәһе алырға теләһәгеҙ, үҙегеҙҙе инандырығыҙ: һәр ғәмәлегеҙ теге йәки был ихтыяжды йәки теләкте ҡәнәғәтләндерә. Үҙ-үҙегеҙҙе ыңғай дәлилләү Аңығыҙҙы үҙгәртеүҙән башлана. Тормошоғоҙҙа конструктив үҙгәрештәр планлаштырып, һәр аныҡ ғәмәлдең файҙаһын баһаларға тейешһегеҙ. Һуңынан үҙегеҙҙе был файҙаның түләргә тура килгән хаҡты ҡаплаймы, әллә унан артып китәме икәненә инандырығыҙ. Кешеләр һеҙҙе илһамландырыуы, хатта ҡурҡытып, үҙгәртергә тырышыуы мөмкин, әммә бары үҙегеҙ үҙегеҙҙе "килем һәм сығым" принцибы буйынса сағыштырып ҡына дәлилләй-дәртләндерә алаһығыҙ. Ниндәйҙер кимәлдә бының менән ғүмер буйына шөғөлләнәһегеҙ, әммә хәҙер процестың һеҙгә ҡаршы түгел, ә файҙаға эшләгәненә инанырға кәрәк.

Енәйәтсе, эскесе, бирән йәки наркоман - улар барыһы ла үҙҙәренең Аң кимәленә таянып, бер үк юл үтә, зыянлы ғәҙәттәренең күпме түләүҙәренә ҡарап баһаланғанын үҙҙәре хәл итә. Андары үҙгәреү менән (ғәҙәттә, был фажиғәле хәл-торош тәьҫире аҫтында була) улар ысынбарлыҡтан һәм үҙҙәре күрә алмаған "Мин"дән ҡасыу хаҡының, алмашҡа алған кисерештәр менән сағыштырғанда, бик ҡиммәт булыуын аңлай. Шулай итеп, дәлил уларҙы тура юлға баҫтыра. Мин һеҙгә ике таныш, әммә бик һирәк ҡулланылған һүҙҙәргә: аҡыллы һәм аҡылһыҙ һүҙҙәрен файҙаланырға тәҡдим итәм. Һеҙҙең һәм тирә-яҡтағыларҙың ғәмәлдәрен аҡыллы йәки аҡылһыҙ тип ҡарарға мөмкин. Ләкин яҡшы йәки насар, ғәҙел йәки нахаҡ, дөрөҫ йәки хаталы тип түгел. Былар бары тик һеҙҙең әлеге ваҡыттағы Аң кимәлегеҙ йәки йәмғиәттәге коллектив Аң кимәленә нигеҙләнгән әхлаҡи баһалар ғына. "Аҡыллы" һәм "аҡылһыҙ" билдәләмәләре субъектив баһаларҙы көсләп таҡмай. Улар Аңға таянып, үҙендең, тирә-яҡтағыларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеп, был ғәмәлдәрҙең аҡыллымы, аҡылһыҙмы икәнлеген асыҡларға ярҙам итә.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 7 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Фиктивный брак". Худ. фильм (16+).
07.30 "Соломенная шляпка". Худ. фильм.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Манекенщица". Сериал (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Манекенщица". Сериал (16+).
14.40 "Кристиан Лубутен. На высоких каблуках" (12+).
15.40 "Я блесну непрошеной слезой..." К 75-летию Андрея Миронова (12+).
16.50 "ДОстояние РЕспублики". Андрей Миронов.
18.40 "Красотка". Мелодрама (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Статус: свободен". Романтическая комедия (16+).
23.10 "Большая мечта обыкновенного человека". Концерт Данилы Козловского.
00.40 "У каждого своя ложь". Драма (16+).
02.05 "Руководство для женатых". Худ. фильм (12+).
03.50 "Модный приговор".
04.50 "Наедине со всеми" (16+).

### РОССИЯ 1

05.15 "Девушка с гитарой". Худ. фильм.
07.05 "Катерина". 8 серий. Мелодраматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Катерина". Продолжение сериала (16+)..
15.00 "Петросян и женщины" (16+).
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2016.
20.00 "Вести". Информационно-аналитическая программа.
20.30 "Москва слезам не верит". Мелодрама (12+).
23.40 "Андрей Миронов. Держась за облака". Док. фильм к 75-летию актера (12+).
00.35 "Соломенная шляпка". 2 серии. Музыкальная комедия.
03.25 "Сватовство гусара". Худ. фильм.
04.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Король сафари". Худ. фильм (0+).**
**10.00 "Мамин праздник".**
**10.30 "Гора новостей". Детская информационная программа (0+).**
**10.45 "Ал да гөл". Программа для девочек.**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Бәхәт ҡошо" ("Птица счастья"). Сериал (12+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Врпрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк". Вечерняя программа для малышей.**
**20.00 "Все песни о любви". Концерт (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 "Полезные новости" (12+).**
**22.45 "Королевский роман". Худ. фильм (12+).**
**01.15 "Башҡорт йыры" представляет". Концерт "Когда спорят разум и сердце…" (6+).**
**04.30 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**

## 8 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Моя любовь". Худ. фильм (12+).
06.40 "Орел и решка". Худ. фильм (12+).
08.20 "Одинокая женщина желает познакомиться". Худ. фильм.
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Приходите завтра..." Худ. фильм.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Высота". Худ. фильм.
14.10 "Девчата". Романтическая комедия.
16.10 "Весна на Заречной улице". Мелодрама (12+).
18.00 "Любовь и голуби". Лирическая комедия (12+).
20.00 "Юбилейный вечер Раймонда Паулса".
21.00 "Время".
21.20 "Юбилейный вечер Раймонда Паулса". Продолжение.
23.00 "Одна встреча". Мелодрама (16+).
00.30 "В ожидании выдоха". Худ. фильм (16+).
02.45 "Модный приговор".
03.45 "Наедине со всеми" (16+).

### РОССИЯ 1

06.10 "Одиноким предоставляется общежитие". Худ. фильм (12+).
07.55 "Любовь с испытательным сроком". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
12.00 "О чем поют мужчины" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Москва слезам не верит". Худ. фильм (12+).
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2016.
20.00 "Вести". Информационно-аналитическая программа.
20.30 "Дневник свекрови". 1-3 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.25 Праздничное шоу Валентина Юдашкина.
01.40 "Люблю 9 марта!" Мелодрама (16+).
03.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "С праздником, милые женщины!" (12+).**
**07.45 "Принцесса Мононоке" (0+),**
**10.00 "Мамин праздник".**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Профили". Ляйсан Утяшева.**
**11.30 "Материнское сердце". Док. фильм.**
**12.00 "Счастливый час". Праздничный выпуск.**
**13.00 "Бәхетнамә". Праздничный выпуск.**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Экзамен для двоих". Худ. фильм (12+).**
**17.15 "Вопрос+Ответ=Портрет" (0+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.).**
**19.00 "Башҡорт йыры" представляет… "Есть только миг…" Праздничный концерт (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Башҡорт йыры" представляет…"Есть только миг…" Праздничный концерт (12+).**
**23.15 "Всегда". Худ. фильм (16+).**
**01.30 Т.Миннуллин. "Встреча с молодостью" (12+).**

## 9 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Любовь и голуби". Худ. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Любовь и голуби". Продолжение худ. фильма (12+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.35 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Батальон". 1-я и 2-я серии. Военно-драматический сериал (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.20 "Модный приговор".
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Дневник свекрови". 4-6 серии (12+).
23.50 "Специальный корреспондент" (16+).
01.35 "Загадки цивилизации. Русская версия". Фильм 1-й. "Гиперборея. Потерянный рай". Фильм 2-й "Новая прародина славян".
03.35"Срочно в номер-2" Детективный сериал (16+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (12+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 Дневной канал "Счастливый час".**
**13.00 Дневной канал "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Малый бизнес" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**18.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. "Урал" (Уфа) - "Динамо" (Краснодар).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Машина времени в джакузи". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Д.Салихов. "Не женщина - дракон" (12+).**

## 10 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15, 19.50 "Пусть говорят". Сериал (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55, 15.15, 02.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.10, 01.30 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Давай поженимся!" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Батальон". 3-я и 4-я, заключительная, серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Минин и Гафт" (16+).
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай". Сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Дневник свекрови". 7-я и 8-я, заключительная, серии (12+).
22.55 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).
00.40 "Загадки цивилизации. Русская версия". Док. фильмы (12+).
02.40 "Срочно в номер-2". Детективный сериал (16+).
03.40 "Комната смеха" (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 15.45 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Дети-герои" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 Дневной канал "Счастливый час".**
**13.00 Дневной канал "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Лаура. Необыкновенная жизнь". Сериал (16+).**
**18.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.00, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Погребенный заживо". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 И.Юмагулов. "Наркас" (12+).**

## 11 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25 "Таблетка" (16+).
13.55 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
23.20 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Большой Вавилон". Док. фильм.
01.45 "Свадьба". Худ. фильм (16+).
05.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Гюльчатай". Мелодраматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.00 "Метель". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
02.50 "Заговор против женщин". Док. фильм (12+).
03.45 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Голос свободы. Эленита Варгас". Сериал (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45, 14.45, 17.45, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Загадка Чехова" (12+).**
**13.00 "Башҡорт йыры" представляет…" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.45 "Перекличка" (12+).**
**15.45 "Телелавка" (12+).**
**16.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**16.45 "Время башкирское". "Без фильтров", "Уфимский городовой", "Уфимский тракт" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Дикая банда: Сорванцы снова в игре". Худ. фильм (12+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.00 "Ларго Винч: Заговор в Бирме". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Р.Киньзябаев. "Одолжи мне жеребца" (12+).**

## 12 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Предварительное расследование". Худ. фильм (16+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Владимир Гостюхин. "Она его за муки полюбила..." (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.15 "ДОстояние РЕспублики". Александр Зацепин.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "ДОстояние РЕспублики". Продолжение.
16.25 "Мне уже не страшно..." К 90-летию Александра Зацепина.
17.30 "Любит не любит". Худ. фильм (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Любит не любит". Комедия (16+).
19.30 Чемпионат мира по биатлону. Эстафета. Мужчины. Прямой эфир из Норвегии.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Подмосковные вечера" (16+).
23.55 "Версаль". Исторический сериал. 1-я и 2-я серии (18+).
02.00 "Хоффа". Худ. фильм (16+).
04.35 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.30 "Следствие ведут знатоки". "Он где-то здесь". Сериал.
06.15 "Сельское утро".
06.45 "Диалоги о животных".
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
08.55 "Тренды" (12+).
09.15 "Правила движения" (12+).
10.10 "Личное. Анастасия Волочкова" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Когда цветет сирень". Худ. фильм (16+).
13.15 "Жизнь рассудит". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Жизнь рассудит". Продолжение сериала (12+).
17.00 "Один в один. Битва сезонов" (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Старшая жена". Мелодрама (12+).
01.00 "Райский уголок". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого". Сериал (12+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Джастин и рыцари доблести" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Телелавка" (12+).**
**10.15 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Вячеславом Черневым (6+).**
**13.30 "Автограф" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ" представляет…" (12+).**
**17.00 "Жизнь полна таинств и мелодий" (12+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Знай наших!" (6+).**
**21.00 "Люди скорости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "4-й период" (6+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Окулус". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Полезные новости" (12+).**

## 13 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Барханов и его телохранитель". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Открытие Китая".
10.50 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
11.10 "Пока все дома".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Фазенда".
12.55 "Гости по воскресеньям".
13.50 "Ирина Алферова. "С тобой и без тебя..." (12+).
15.00 "Голос. Дети". Музыкальный конкурс.
17.00 Чемпионат мира по биатлону. Масс-старт. Женчины. Прямой эфир из Норвегии.
17.45 "Черно-белое" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Клуб веселых и находчивых. Высшая лига" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клим". Детективный сериал (16+).
00.55 "Он ушел в воскресенье". Худ. фильм (16+).
02.45 "Скудда-у! Скудда-эй". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.20 "Следствие ведут знатоки". "Он где-то здесь". Сериал.
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.25 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.05 "Братские узы". Продолжение сериала (12+).
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2016.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "По горячим следам". Детективный сериал (16+).
02.30 "Вечный человек, или Повесть Туринской Плащаницы". Док. фильм.
03.55 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 Мультфильм (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "4-й период" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Автограф". Тимер Юсупов (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Полезные новости" (12+).**
**17.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.45 "Любимое дело" (12+).**
**18.15 "История признания" (12+).**
**18.30 "Народы Башкортостана" (6+).**
**19.00 "Пираты Эгейского моря". Худ. фильм (12+).**
**20.45 "Красная кнопка" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байыҡ-2016" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Война в Донбассе. Круги ада". Док. фильм.**
**01.45 "Слепой". Худ. фильм (16+).**
**03.15 М.Себастьян. "Мона" (12+).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# УҢҒАНДАР, ЯЛҠЫН КЕҮЕКТӘР!

## Өфөнөң етәксе вазифалағы ҡыҙҙарына арнала




Фәүзиә Иҙелбаева төҙөнө.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**6 март "Әбейүшкә@тушка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**8 март "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**10 март "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма

**11 март "Руди - never off..."** (А. Абушахманов), Рудольф Нуриевтың ғүмер миҙгелдәре

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 март "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**10 март "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия

**11 март "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим), хәтирәләр

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**10 март** Башҡортостандың халыҡ артисы **Радик Вәлмөхәмәтов "Бәхеттә ҡойонор сағым"** тип аталған юбилей концертына саҡыра.

**10 март** Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты **Азат Айытҡолов "Ҡурайсы ла тигән даны бар"** тигән концертына саҡыра. Тамашала ҡурайсылар - Роберт Юлдашев, Рушан Биктимеров, Рәсүл Ҡарабулатов, Ишмөрат Илбәков, баянсы Миңлеәхмәт Ғәйнетдинов, органсы Владислав Мортазин ҡатнаша. Сара "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтә.

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 март "Ә таңдар бында тыныс"** (Б. Васильев), драма

**6 март "Аладдин: тающий песок, или жгучий снег"**, әкиәт. Башлана 12.00

**8 март "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миннуллин), драма

**11 март "Великий синема"** Году Российского кино

**8-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Иленә. Телендә. Күбә. Йәмле. Һүҙем. Санлури. Тейешле. Наҙан. Манара. Осрай. Бра. Атҡан. Наил. Тел. Ғүмер. Оянан. Ынйы. Атайың. Шөшлә. Гимнаст. Камселл.

**Вертикаль буйынса:** Торормон. Йәйҙергән. Шмайс. Трал. Түнгәк. Есеме. Ирлек. Биләй. Ышаныс. Булмағандың. Әләм. Тол. Һин. Алғыш. Азат. Аҡса. Мин. Нөрлө.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл әүүәл - Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (27) дүшәмбе | 6:22 | 7:52 | 13:30 | 17:32 | 19:02 | 20:32 |
| 8 (28) шишәмбе | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 9 (29) шаршамбы | 6:17 | 7:47 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 10 (1) кесе йома | 6:15 | 7:45 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 11 (2) йома | 6:12 | 7:42 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 12 (3) шәмбе | 6:10 | 7:40 | 13:30 | 17:42 | 19:12 | 20:42 |
| 13 (4) йәкшәмбе | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ХОККЕЙ

## ЕҢЕҮ КӨТӘБЕҘ!

**Ошо көндәрҙә көйәрмәндәр ҙур тулҡынланыу менән "Салауат Юлаев" һәм Ҡаҙандың "Аҡ Барс" хоккей командалары алышын күҙәтә.**

Өфөлә үткән ике осрашыуҙа ике тапҡыр еңеү яулағандан һуң, юлаевсылар Ҡаҙанда ике уйында өҫтөнлөктө майҙан хужаларына бирҙе, береһендә үҙе өҫтөн сыҡты. Шулай итеп, 3 февралгә тиклем юлаевсылар 3:2 иҫәбе менән алда килә, уларға ҡаршы яҡ командаһы оҙайлы тәнәфескә ебәреү өсөн ни бары бер генә еңеү етмәй ине. Әммә... Был көндө ҡаҙандар өфөләрҙә 8:0 иҫәбе менән ҡыйратты. Дөйөм иҫәп: 3:3.

Хәл иткес осрашыу бөгөн - 5 мартта Өфөлә үтәсәк. Юлаевсыларҙан үҙ боҙонда ышаныслы уйын күрһәтеүен, еңеүҙәр көтәбеҙ.

ЗАУЫҠ

Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА

# ЭЙ, ШИҒРИӘТ, ҺИНЕҢ МЕНӘН

## Күңелгенәм ҡауышҡандыр...

### Эй, шиғриәт!

Тауышһыҙҙы тауышландыр,
Һағышһыҙҙы һағышландыр,
Эй, шиғриәт, донъяларҙы
Сағыуландыр, баҙыҡландыр!
Йәшерен серҙе ауыҙландыр,
Өнһеҙ телде ауазландыр,
Эй, шиғриәт, һәр һүҙенде
Һөтләндерсе, ыуыҙландыр!
Аҙыҡһыҙҙы аҙыҡландыр,
Рухиәткә бағышландыр!
Эй, шиғриәт, һинең менән
Күңелгенәм ҡауышҡандыр...

### Хыял

Хыял итә ҡышым яҙ хаҡында.
Арынырға теләй туңлыҡтан.
Ташҡынларға теләй тойғоларым,
Ҡотолорға теләй тынлыҡтан.
Хыял итә яҙым йәй хаҡында.
Төрөнгөһө килә сәскәгә.
Ҡара тупраҡтары япраҡланып,
Әйләнгеһе килә сәхрәгә.
Хыяллана йәйем көҙ хаҡында.
Йәйҙең теләктәре - еләктәр.
Һәр кемгә лә ғәзиз ғүмеренең
Емештәре генә бүләктәр.
Хыяллана көҙөм ҡыш хаҡында,
Сафландырыр өсөн донъяны.
Ҡарҙың бурандарын һағына бит
Һары япраҡтарҙың бураны.

### Сират

Бына тағы, тағы, тағы
Йоҡоһоҙ үтте төнөм.
Яҡтыртырға, айҙан башҡа,
Юҡ янымда бер кемем.
Уйланым мин, киләсәктә
Кем булмаҫ та, кем булыр?
Иртәгә лә үтер төнөм!
Тик ул бүтән төн булыр.
Бүтән төндә күк йөҙөндә
Булыр, ҡалыр шул уҡ ай.
Тәҙерәмдән шул ай ҡарар,
Мин барлыҡты онотмай.

Мин булмаған төн дә килер.
Яндырыр айҙан сыраҡ.
Бүтән кешеләр уйланыр!
Кемгә лә етер сират..

### Таң тишеге

Һыҙылды нур: төн ҡараһы
Йыртылды, тишелде.
Был ярыҡтан күк йөҙөнә
Ал яҡтылыҡ бөркөлдө.
Сәскә атҡан кеүек атты
Офоҡтағы таң гөлө.
Хуш еҫтәрен һибелдереп,
Иҫте ҡояштың еле.
Сәселдерҙе нур таждарын
Ҡап-ҡараңғы донъяға!
Ҡояш сыҡты! Ҡояш сыҡты
Таң тишеге булғанға.

### Ғүмер

Үҙе теләп осмай япраҡ.
Япраҡты ел осорта.
Шул осонсоҡ ҡанатһыҙҙы,
Ҡоштай ос, тип ҡоторта.
Ел осорта ҡороғанды,
Ел осорта кипкәнде.
Ҡояш үҙе һарғайтмалыр
Үҙе йәшел иткәнде.
Кеше ташламай донъяны,
Үтһә лә үҙәгенә.
Үҙе биргәндә алыусы
Бер Хоҙай үҙе генә.

### Кисәнге

Биткә ҡаплап сәс тұҙымын
Арттан баҫтырған елдәй,
Эйәрә арттан кисәнге -
Торол ҡалғыһы килмәй.
Туҡтатмаҡсы ул ваҡытты,
Уны уҙып китмәксе.
Алдарына сығып уның,
Бер һыҙғырып үтмәксе.
Алға сыҡмай кисәгә көн!
Ул бары шаша ала.
Күпме генә туҙынмаһын,
Ваҡыттан артта ҡала.



### Эйәрсәндәр

Һуҙылып та килгән еп шикелле
Күҙәүенән һаплы энәнең,
Бер тотам да ҡалмай, кисәге көн
Бөгөнгөгә килә эйәреп.
Эйәреп килә беҙгә яҡшы-яман,
Эйәреп килә арттан аҡ-ҡара.
Еп - эйәрсен, энә - эйәһелер,
Еептәр менән энә һаплана.
Эйәреп килә һаман Ленин, Сталин,
Тағылып килә һаман Гитлерҙар.
Мәйет - тере! Тере мәйеттәргә
Мәҙхиәләр бағлай күп йырҙар.
Үткән быуат энә күҙәүенә
Оҙон епкә икән һапланған!
Дауам итә эшен илбаҫарҙар,
Ҡорбан түгел, ҡатил  аҡланған!
Татыулыҡтар түгел, дошманлыҡтар
Түгелдер ҙә мәңге ҡалмаҡҡа?
Замананың иҫке энәһенә
Яңы еңтәр кәрәк алмашҡа.

### Аҡланыулыҡ

Аҡланырҙан алда тапланылды.
Төрмә эстәрендә ҡаҡланылды.
Ваҡыт еткәс, ҡағыҙ кисәгендә
Золом ҡорбандары аҡланылды.
Вагондарға тейәп һөрҙөрөлдө,
Лагерҙарға илтеп ташланылды.
Тотош халыҡ, күпме ватандаштар
Аҙаҡ, йәнеһе лә, аҡланылды.
Күпме ҡәбәхәтлек йәшерелде,
Дәүләт сере итеп һаҡланылды.
Гулагтарҙа серегән "кулактар ҙа"
Бер көн килеп, эйе, аҡланылды.
Бер көн килеп, барыһы "ярлыҡанды",
"Халыҡ дошмандары" аҡланылды.
Тик яңынан баш күтәрә вәхши!
Яңы ҡорбандар ҙа аҡланырмы?

### Ҡабуллыҡ

*Шәйехзада Бабич ҡәбере янында*

"Тынысландыр шағир йөнен,
Ғазаптарҙан арындыр!"
Аяҙ көндә йәшен атты!
Болотһоҙ яуҙы ямғыр...
Ишетте күк аятымды,
Аңланы мине һауа.
Һауаның һүле һығыла,
Ҡояшлы йәше яуа.
Миңә ҡуша бар тәбиғәт
Бәхилләйҙер шағирҙы.
Ҡабул булды ҡылған доғам,
Ҡылған һайын яңырҙы.
Ишетте бит теләктәрҙе,
Яуап бирҙе бит йыһан!
Бар әрнеше уның да бит
Һауаға тулып торған.
Быуа инде күҙ йәштәрем
Минең дә бит яуалар.
Тыныстыр ҙа инде шағир -
Бушанды бит һауалар!

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕСӘН ҺЕҮЛӘНЕ БЫЙЫЛ...

**Әсәйем Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан ине, гәзит уҡыусыға уның телендә булған,  хәҙер һирәк ишетелгән һүҙҙәрҙе яҙып үтәм.**

**Уба-туба** - байтаҡ;
**Даурығып китә** - әркеп китә, башы һуҡҡан яҡҡа ҡасып китә;
**Тай типтереү** - биҙҙереү;
**Уппа ҡәҙәр** - буйтым;
**Тумбып һыҙлай** - һулҡылдап һыҙлай;
**Һүренде** - туҡыманан һүреп алынған еп;
**Һырғалай** - әҙләп аға;
**Һырғалаҡ эйеү** - тауҙан шыуыу;
**Кернәкә** - лайла;
**Һәлкәү** - яй;
**Эскернә** - үс тотҡан кеше;
**Бесән һеүләне** - бесән күп тотонолдо;
**Йымлап эшләй** - еренә еткереп;
**Утыҙ туғыҙлы кеше** - аҡылы зәғиф кеше.

**Гөлдәр КӘЛИМУЛЛИНА.**
**Йылайыр районы Шанский ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫҪЫР ҺАРЫҠ...

## күп баҡырыр

Телең бауҙа булһа, башың һау булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ниндәйҙер теләгенде тормошҡа ашырыр алдынан уйла: ошондай уҡ теләкте тормошҡа ашырған башҡалар бәхетлеме?

**(Франсуа Ларошфуко).**

Кешенең бәхете ул эйә булған нәмәләрҙән генә тормай.

**(Варна Дозье).**

Изгелек һәм ғилемлелек һәр саҡ бергә атлай, береһе юғалһа, уға алмаш әҙләргә кәрәкмәй.

**(Артур Дойль).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бар тирәяҡ бер Ҡатындың ҡартая барған һайын матурлана, йәшәрә барыуын шәйләп һоҡланған. Башҡа ҡатын-ҡыҙҙар араһында унан көнләшеүселәр ҙә табылған. Ләкин Ҡатын бераүҙән дә үҙенең йәш килеш һаҡланыуының серен йәшермәгән: кем кәнәш һорап килә, һәр береһенә сәләмәт һәм матур булыу ысулдарын өйрәткән. Ләкин уның матурлыҡ кәңәштәрен ҡулланған башҡа ҡатын-ҡыҙҙарҙа бер ниндәй ыңғай үҙгәреш тә һиҙелмәгән. Был хәлдән тағы ла ныҡыраҡ асыуы ҡабарған эргә-тирәләге гүзәл заттарҙың һәм улар берләшеп, һылыу Ҡатындың өйөн яндырырға булған. Өй янып бөткән, әммә янғын эсендә ҡалған Ҡатын зыян күрмәгән. Көл өҫтөндә ултырып ҡалһа ла, Ҡатындың йөҙөнән матурлыҡ һәм мөләйемлек китмәгән.**

**Был хәлдән һуң асыулы, көнсөл ҡатындар сихырсыға бара һәм унан һылыу Ҡатынға боҙом ебәреүен үтенә. Ысынлап та, был сихырсыға ла һылыу Ҡатындың ящмышы ҡыҙыҡ тойола: уның янғындан иҫән-һау сығыуы түгел, ә ни өсөн уның кәңәштәренең башҡа ҡатын-ҡыҙҙарға бер ярҙам итмәүе ҡыҙыҡһындарыу һорау борсой уны.**

**Һылыу Ҡатын сихырсыны ҡабул  һәм уның һорауҙарына ҡаршы шулай тип яуаплай:**

**- Мин ҡалалағы бар ҡатын-ҡыҙҙарға ла үҙемдең һаулыҡ һәм матурлыҡ буйынса кәңәштәремде бирҙем, минең бер серем дә ҡалманы. Ләкин эш бит шунда: күңелендә Алла нуры балҡып тормаһа, йөҙҙәге картлыҡ билдәләрен тотҡарлаусы бер ниндәй май ҙа, үлән төнәтмәләре лә, хатта күктәге ҡояш нуры ла һиңә ярҙам итмәйәсәк - бына шуны аңлай алманы минән кәңәш һораусылар...**

**Сихырсы һылыу Ҡатынға тағы бер тапҡыр ҡарап ала ла, шулай ти:**

**- Эйе, мин хәҙер ул ҡатын-ҡыҙҙарҙың ни өсөн йәшәрмәүенең сәбәбен аңланым: уларҙың күңеленә Алла нуры түгел, ә Яуызлыҡ уты инеп урынлашҡан..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 4 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 386/03